ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

19-25 сентябрь (нарысай) 2015

№38 (664)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • hатыуҙа хаҡы ирекле

*Мин үҙемде һәр саҡ бәхетле тоям. Ни өсөн, беләһеңме? Сөнки мин берәүҙән дә бер нәмә лә көтмәйем, өмөт тә итмәйем. Көтөп тә өмөтөң аҡланмау - һәр ваҡыт ауыртыныу-һыҙланыу ғына килтерә. Ә ғүмер ҡыҫҡа. Шуның өсөн, тормошто һөй. Бәхетле бул. Йылмай. Нимәлер әйтер алдынан башҡаларҙы тыңла. Ниҙер яҙыр алдынан - уйла. Аҡса туҙҙырыр алдынан - аҡса эшлә. Ғәфү үтенер алдынан - үҙең ғәфү ит. Кемгәлер ауыр һүҙ әйтер алдынан - уның ауырлығын үҙеңдә той. Кемгәлер нәфрәтләнер алдынан - уны ярат. Үлер алдынан - йәшә...*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Яҙа үтәү...**

ял итеү түгел бит



3

**Еңеллек эҙләгәндә...**




8-9

**Тире лә иғтибар талап итә**



12

**Буйһоноусан булғандарҙы...**




13

**ТВ-программа** 14

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Өфөләге демографик хәл тураһында баш ҡалабыҙҙа теркәлгәндәр иҫәбенән сығып фекер йөрөтәбеҙ, шул уҡ ваҡытта рәсми теркәлеүһеҙ ҙә йылдар буйы ошонда йәшәп, эшләп, үҙен өфөлө тип иҫәпләгән кешеләр һаны ла байтаҡ. Уларҙың гражданлыҡ хәлен нисек аңлатырға?

**Илшат САТТАРОВ, күп балалы ғаилә башлығы:** Һеҙҙең һорау көн тәртибенә бик урынлы ҡуйыла, минең үҙәккә үткән мәсьәлә был. Ни өсөн тигәндә, баш ҡалабыҙ халҡының әле үрҙә әйтеп кителгән "иҫәпкә бар, һанға юҡ" тигән ҡатламы вәкилдәренән булабыҙ. Өфөлә фатир ялына йәшәйбеҙ, күптән үҙебеҙҙе өфөлө тип иҫәпләһәк тә, ошонда эшләп, балалар үҫтереп, уларҙы баҡсаға йөрөтөп, баш ҡала мәктәптәрендә уҡытып, хәҙер инде 15 йыл буйы Өфөлә йәшәп ятһаҡ та, рәсми иҫәптә тормағанлыҡтан, ҡала халҡына тейешле бер ниндәй хеҙмәттәр менән дә файҙаланыу хоҡуғына эйә түгелбеҙ. Бөтөн проблема прописка мәсьәләһенә барып терәлә, ә ул юҡ! Үҙ йортоңда, йә булмаһа, исмаһам, ятаҡта йәшәмәгәс, беҙҙе кем теркәһен бында? Прописка булмау сәбәпле, штраф та түләргә тура килде. Иң ҡыйыны балаларҙы баҡсаға урынлаштырыу булды. Алмай йонсоттолар балалар баҡсаһына кескәйҙәребеҙҙе. Балағыҙҙы булһа ла теркәгеҙ берәй ерҙә, тиҙәр, ә ҡайҙа теркәргә? Берәй паспорт өҫтәле аша килешергә булыр ине лә, уларҙың ҡулынан мисәттәрҙе район паспорт өҫтәленә алғандар хәҙер, бер ни ҙә эшләй алмайҙар. Өфөнән алыҫ түгел районда атайҙан ҡалған йорт бар, уны үҙ милкемә күсермәйенсә тороп, хатта унда ла иҫәпкә ҡуя алманылар. Иң әрнеткәне шул: өсөнсө балабыҙға ер участкаһы ала алмайбыҙ хәҙер. Социаль торлаҡҡа ла, Федераль торлаҡ программаһына ла сиратҡа яҙыла алмайбыҙ. Шуға күрә форсаттан файҙаланып, Өфө ҡала округы хакимиәтенә ҙур үтенес менән мөрәжәғәт иткем килә: беҙҙең һамаҡ оҙаҡ йылдар баш ҡалала йәшәгән һәм эшләгән кешеләр, ғаиләләр бик күп. Берәй юлын табып, беҙҙе ҡала пропискаһы менән тәьмин итһендәр ине. Ана шул саҡта ғына баш ҡалабыҙҙың демографик йөҙө ысынлап та реаль мәғлүмәттәргә нигеҙләнә аласаҡ.

(Дауамы 2-се биттә).

БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# УТЛЫ ЙЫЛДАР, ОҘОН ЮЛДАР АША



*Ҡырмыҫҡалы районы Шайморатов ауылында легендар яҡташыбыҙ генерал Миңлеғәле Шайморатовҡа һәйкәл асылды. Ошо ваҡиғаға арналған мәҡәләне 7-се биттә уҡығыҙ.*

*Ҡайтыуыңды дүрт күҙ менән көттөк,*
*Урын һайлап ерем түренән.*
*Яҡташтарҙың нисек көткәндәре*
*Йөҙҙәрендә яҡшы күренә.*

*Тап ошолай ҡайтыуыңды көттө,*
*Ерем күпме күҙен талдырып.*
*Байрамдарҙа, бәйгеләрҙә һиңә*
*Ат бәйләргә урын ҡалдырып.*

*Ҡарашыңда, йөрәгеңдә бөгөн*
*Яҡташтарҙың яҡты ер уйы.*
*Мәңгелеккә ат өҫтөндә ҡайтты*
*Халҡыбыҙҙың халыҡ геройы.*

*Һин һаман да ат өҫтөндә икән,*
*Уйың да юҡ атың бәйләргә.*
*Яҡташтарҙы мәңге рухландырып,*
*Бында ҡышлап, бында йәйләргә.*

*Аңға һыймаҫ батырлыҡтар ҡылып,*
*Еңеү юлын шулай башланың.*
*Ат өҫтөндә бары ҡылыс менән*
*Танктарға ҡаршы ташланып.*

*Димдән Бранденбург ҡапҡаһына*
*Саҡлы утлы юлдар һуҙылды.*
*Фашистарҙы өңдәренә ҡыуып,*
*Күпме даръя кисеп уҙылды.*

*Башҡорт атлылары бар яуҙа ла*
*Һәр саҡ тоғро булды антына.*
*Һинең ейәндәрең, кәрәк булһа,*
*Атланасаҡ тағы атына.*

*Ҡуша үҫкән һымаҡ атланғанһың,*
*Төшмәҫһең һин мәңге атыңдан.*
*Ерҙә хаҡлыҡ өсөн тынмаҫ яуҙа*
*Һис ҡалмабыҙ һинең артыңдан,*
*Һис ҡалмабыҙ һинең артыңдан!*

**Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ.**

12+

✓ *Өфө агломерацияһы сиктәрендә 1,4 млн кеше йәшәй. "Баш ҡаланың балалар баҡсаһына өфөлө булмаған 5,5 мең бала йөрөй, ә Өфө поликлиникаһы һәм дауаханаларында 250 мең кеше өҫтәмә хеҙмәтләндерелә, - тине Ирек Ялалов.*



ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районДарының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Унының өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.



● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Сентябрҙә 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына яҙылыу тураһындағы квитанцияларын ебәргән уҡыусыларыбыҙ **Ә. Әсфәндийәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Өфөләге демографик хәл тураһында баш ҡалабыҙҙа теркәлгәндәр иҫәбенән сығып фекер йөрөтәбеҙ, шул уҡ ваҡытта рәсми теркәлеүһеҙ ҙә йылдар буйы ошонда йәшәп, эшләп, үҙен өфөлө тип иҫәпләгән кешеләр һаны ла байтаҡ. Уларҙың граждандлыҡ хәлен нисек аңлатырға?*



(Башы 1-се биттә).

***Луиза ФӘЙЗУЛЛИНА, уҡытыусы:*** Мин оҙаҡ йылдар Өфө мәктәптәренең береһендә башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән уҡытам. Ун йыл тигәндә саҡ ятаҡтан бер койка-урын бүлделәр, уныһын да ваҡытлыса, тип әллә нисә иҫкәрттеләр. Әйтерһең дә, бомж мин...Пропискаға ла ваҡытлыса теркәп торҙолар. Ә ошоға тиклем пропискаһыҙ интеккәйнем. Ул хаҡта һөйләй башлаһаң... Кеше сирләмәй тормай, ә поликлиникаға йөрөп булмай. Торлаҡ алырға һәр төрлө социаль программаларҙан да тороп ҡалып бөттөм. Пропискаһыҙ йәшәгән йылдарҙа бер тапҡыр ҙа һайлауҙарҙа ҡатнашып, үҙем теләгән кандидаттар өсөн тауыш бирә алманым. Ә бит үҙем уҡытыусы - был турала кешегә әйтергә лә ояла инем. Балаларҙа телгә, ватанға һөйөү тәрбиәләргә тырышам, ә үҙем бындай һөйөүҙең бер кемгә лә кәрәкмәгәнен, ундай тойғоларҙың күп осраҡта яуапһыҙ булыуын күреп, әрнейем. Ябай уҡытыусының яҙмышы бер кемде лә борсомай асылда, мин быны үҙ иңемдә татыным һәм ғарҡ булдым. Өфөлә халыҡ һаны арта, тиҙәр, тик тирә-йүнегеҙгә күҙ һалығыҙ әле: кем иҫәбенә арта? Дөрөҫ, мигранттар иҫәбенә. Миңә ҡалһа, баш ҡалабыҙ тиҙҙән үҙ йөҙөн юғалтып, ниндәйҙер бер Кавказ йә Урта Азия ҡалаларының береһен хәтерләтәсәк. Улар өсөн бөтөн шарттар бар Өфөлә, тик йылдар буйы ошонда йәшәп, көн күргән үҙ граждандарының ғына бер ниндәй ҙә хоҡуҡтары юҡ. Мигранттар күпләп фатир һатып алалар ҙа, ғаиләләрен, хатта туған-тыумасаларын саҡырып килтерә һалалар. Ә мин хәйерсе һымаҡ һоранып-ялынып, йөҙ һыуымды түгеп алған ваҡытлыса прописка менән барыбер бер ҡасан да торлаҡҡа дәғүә итә алмаясаҡмын. Шунан миңә үҙ илемдә кем сифатында йәшәргә тура килеүен әйтмәһәм дә аңлайһығыҙҙыр...

***Валентин СОТНИЧЕНКО, Өфө ҡала округы хакимиәтенең дәүләт статистика бүлеге начальнигы:*** Баш ҡалабыҙ Өфө - Рәсәйҙә 2008 йылдан алып халҡының тәбиғи артымы менән билдәле берҙәнбер миллионлы ҡала. Өфөлә былтыр 17 888 сабый донъяға килде, был Башҡортостанда тыуған балалар һанының 29 процентын тәшкил итә. Үҫеш быйылғы йылда ла һаҡланып ҡалыр, тип өмөт итәбеҙ: тәүге ярты йыллыҡта 8 632 бала тыуҙы. Был былтырғы ошо осор менән сағыштырғанда 151 балаға күберәк. Халҡының һаны буйынса баш ҡалабыҙ Рәсәйҙең 13 миллионлы ҡалаһы араһында (Мәскәү менән Санкт-Петербургты иҫәпләмәгәндә) 9-сынан 8-се урынға күсте. 2015 йылдың 1 ғинуарына ҡарата республикабыҙ баш ҡалаһында даими йәшәүсе халыҡ һаны 1млн.115,9 кешегә етте. Бында ҡала округы хакимиәтенә ҡараған эргә-тирәләге ауылдар ҙа индерелде. Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында миллионлы Өфө тыуымдың дөйөм коэффициенты буйынса тәүге урында килһә, үлемдең дөйөм коэффициенты буйынса - дүртенсе урын биләп, әйтеп китеүемсә, халыҡтың тәбиғи артымы буйынса һуңғы ете йыл буйы лидерлыҡты һаҡлай. Бындай күрһәткестәрҙең һөҙөмтәһе булараҡ, яҡындағы 6 йылда мәктәп йәшендәге балалар һанының артыуы күҙәтеләсәк. Быйыл нигеҙҙә 2008 йылда тыуған балалар беренсе класҡа уҡырға килде. Ә уларҙың һаны 2007 йыл тыуғандарҙан 700-ҙән ашыу балаға артығыраҡ. 2009 йылда иһә унан алдағы йыл менән сағыштырғанда үҫеш 888 кеше тәшкил иткәйне. Һөҙөмтәлә 2020 йылға мәктәп йәшендәге балалар һаны 35-40 мең кешегә артасаҡ, тип күҙаллана.

Элегерәк Рәсәйҙең иҡтисади үҫеш министрлығы Өфө ҡалаһын Рәсәйҙең халҡы һаны байтаҡҡа артасаҡ тип күҙалланған 20 ҡалаһы иҫәбенә индергәйне, тип билдәләне Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ишмөхәмәт улы Ялалов баш ҡала демографияһына арналған муниципалитет кәңәшмәһендә. Ҡайһы бер белгестәр иҫәпләүенсә, Өфө агломерацияһы сиктәрендә, уға яҡын урынлашҡан ауыл биләмәләрен дә индереп, барлығы 1,4 млн кеше йәшәй. "Баш ҡаланың балалар баҡсаһына өфөлө булмаған 5,5 мең бала йөрөй, ә Өфө поликлиникаһы һәм дауаханаларында 250 мең кеше өҫтәмә хеҙмәтләндерелә, - тине Ирек Ялалов. - Өфө менән сиктәш ятҡан Өфө һәм Иглин райондарында күпләп торлаҡ төҙөлөшө алып барыла. Өфө - тиҫтәләрсә йылдарға халҡы һаман да артыуға табан барған Рәсәй ҡалаларының береһе ул". Шул уҡ ваҡытта баш ҡалабыҙ башлығының ошо мәсьәләгә ҡағылышлы бик урынлы шелтәһе менән дә ризалашмайынса булмай: статистика мәғлүмәттәре йыш ҡына ысын хәл-торошто сағылдырып бөтөрмәй, улар бер ни тиклем кәмерәк күрһәтелә, тине И. Ялалов. Ул муниципалитеттың структур подразделениелары етәкселәрен һәм ҡала райондарының хакимиәт башлыҡтарын иҫәпләүҙәр һәм күҙаллауҙарҙа реаль һандар һәм мәғлүмәттәргә таянып эш итергә саҡырҙы. Был урынлы тәҡдим, тип уйлайым. Киләсәктә, моғайын, Өфөлә теркәлмәй йәшәгәндәрҙең ысын иҫәбен билдәләүҙең, уларҙы дөйөм иҫәптә сағылдырыуҙың берәй механизмын эшләргә кәрәк буласаҡ.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ БР Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Фәндәр академияһы Урал бүлексәһенең Иҡтисад институты директоры Александр Татаркин менән осрашты. Осрашыу барышында республиканың социаль-иҡтисади үҫеш мәсьәләләре тикшерелде. Александр Татаркин төбәк властының фән менән хеҙмәттәшлеген ыңғай күренеш тип баһаланы. Унының фекеренсә, ҡулланыусылар кооперацияһын үҫтереү, маҡсатлы инвестиция сәйәсәте, шулай уҡ дәүләт-шәхси партнерлыҡты, шул иҫәптән төбәк-ара кимәлдә лә, үҫтереү заманса этапта төп бурыстар булып тора.

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов "Үҙәк-2015" стратегик уҡыуҙарының тамамланыуына арналған митингта сығыш яһаны. Билдәләнеүенсә, уҡыуҙар Башҡортостандың мобилизация сараларын үткәреүгә әҙерлеген күрһәтте. Уҡыуҙар матди-техник тәьминәт, ойоштороу әҙерлеге йәһәтенән ҡайһы бер етешһеҙлектәрҙе лә асыҡланы. Рәсәй Ҡораллы Көстәре Генераль штабы әҙерлек барышына, башҡарма власть һәм урындағы үҙидара органдары менән үҙ-ара килешеп эш итеүгә, "Үҙәк-2015" уҡыуҙары барышында Башҡортостан биләмәһендә саралар үткәреүгә юғары баһа бирҙе.

✓ Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай йортонда республика парламентының көҙгө сессиялағы тәүге пленар ултырышы асылды. Депутаттар 40-ҡа яҡын закон проектын ҡарай. Юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге дәүләт инспекцияһы идаралығы начальнигы Динар Ғилметдинов республикалағы юл хәрәкәте хәүефһеҙлеге тураһында мәғлүмәт менән сығыш яһаны.

✓ Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы илдәре менән хеҙмәттәшлекте үҫтереү сиктәрендә 15 сентябрҙән 26-на тиклем Башҡортостан делегацияһының Ҡытай Халыҡ Республикаһына рәсми сәфәре ойошторола. Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Дмитрий Шаронов етәкселегендәге делегация Хубэй, Сычуань, Ляонин провинцияларында, шулай уҡ Пекин ҡалаһында Башҡортостандың инвестиция һәм сәнәғәт ҡеүәте презентацияларын һәм "ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәренең бәләкәй эшҡыуарлығы" исемле беренсе форум үткәреү күҙаллана.

✓ Республика Башлығы Башҡортостандың һәләтле уҡыусыларынан стипендиаттар билдәләү тураһында Указ ҡабул итте. Ай һайын дөйөм һәм өҫтәмә белем биреү ойошмаларының һәләтле уҡыусыларына Башҡортостан Башлығы стипендиялары тапшырыла. Исемлектә бөтә республиканан 100 стипендиат.

✓ *Әммә баҡсаны ҡарамаһаң, түтәлдәрҙе ҡый баҫҡан кеүек, сәнғәт баҡсаһында ла йырлай белмәгән кешеләр күтәрелеп сыға башлай. Ҡайһы бер йәш йырсылар араһында ике-өс нота йырлаусы кешеләр булыуы аянyслы.*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Яңыраҡ үҙәк матбуғатта байҙар өсөн махсус төрмәләр асыу хаҡында хәбәр булды. Был мәсьәлә ошо башланғыстың авторы - Яза башҡарыу федераль хеҙмәтенең Йәмәғәт советы ағзаһы, юридик фәндәр докторы Владислав Гриб тигән әфәндене бик борсой икән: "Ә ниңә төрмәлә ултырыусы массаж яһатырға, туйғансы йоҡларға, сауна инергә тейеш түгел әле?" - тип өҙгөләнә комфорт яратыусы хоҡуҡ һаҡсыһы. "Шуның өсөн: сөнки ул ҡылған енәйәте өсөн яза хөкөмөн үтәй. Әгәр ана шул енәйәтте ҡылмаған булһа, йәне теләгән әлеге һәм башҡа ләззәттәрҙе ул иректә: өйөндә йәки курорттарҙа татып йәшәр ине," - тип яуап бирге килә был әфәндегә.**



# ЯЗА ҮТӘҮ...

## ял итеү түгел бит

Тормош - ул бер сатраш уйыны кеүек, ярлыһын-байын, түрәһен-ҡараһын ҡасандыр килеп бер тигеҙләй барыбер: ҡартлыҡ йә үлем алдында. Шулай уҡ закон һәм хөкөм алдында ла, әлбиттә. Дөрөҫ, һуңғы йылдарҙа илдең сереп, ҡотороп байыған һәм үҙҙәрен бөтөн кешеләктән өҫтөн ҡуйған "юғары ҡатлам" аҡһөйәктәре хөкөм алдында үҙҙәренә - айырым статья, ә төрмәлә "лайыҡ" урын хәстәрләү менән әүҙем мәшғүл. Урлашыуҙарҙың ҡасан да бер сиге буласағын улар үҙҙәре лә яҡшы аңлай, күрәһең. Ҡомһоҙлоҡтары саманан ашты. Етерлеген генә урлап-талап туҡтаһалар була ла бит, туҡтай алмайҙарҙыр инде, азарт тигән нәмә шайтан ҡотортоуына тиң ти бит ул. Заманында Ходорковский дөйөм тәртиптә ун йыл ултырып сыҡты ла ул, ә бына Васильеваның бер көн дә ултырғыһы килмәне. Әйткәндәй, был ханымды ирекҡә сығарыуҙың законһыҙлығы хаҡында белдереүҙәрҙе һуңғы ваҡыт интернетта йыш осратырға мөмкин.

2006 йылда ғына әле Хөкөм язаһы үтәтеү буйынса федераль хеҙмәт директоры Ю. Калинин, закон алдында бөтәһенең дә тигеҙ булыуы, шунлыҡтан байҙар өсөн курорт тибындағы VIP-төрмәләр, ә ҡәҙимге Алла бәндәләре өсөн айырым төрмәләр төҙөүҙе әхлаҡҡа һыймаған, ярамаған эш, тип иҫәпләүе хаҡында белдергәйне. Бөгөн килеп был турала тағы һүҙ ҡуҙғатыла. Күрәһең, мәсьәлә өлгөрөп еткәндер: эшләп түгел, илдә урлап байыу фактарлы арта ғына бара бит, ә был енәйәттәрен лоббистар аша страховкалап ҡуйыу бик тә кәрәктер элиталы бурҙарға. VIP-төрмәләр асыу идеяһы һаман да шул Көнбайыш өлгөһөнә һуҡырҙарса эйәреү сәбәпле килеп тыуған нәмә. Бер юрист әйтмешләй, ул тарафтарҙа бит тормош та, менталитет та башҡаса. Мәҫәлән, ҡайһы бер Европа илдәрендәге шәхси төрмәләрҙә, ысынлап та, курорттағы кеүек шарттарҙа йәшәйҙәр. Уларҙың музыкаль студиялары янында беҙҙең Мәҙәниәт йорттары бүстәк кенә икән, тип яҙалар.

Бәлки, шәхси төрмә түгел, ә мәктәптәр, балалар баҡсалары, ижад йорттары, ҡарттар йорттары төҙөргә кәрәктер беҙгә тәү сиратта, нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт? Нисек кенә булмаһын, Мәскәүҙә шәхси төрмә төҙөү эшен башларға әҙер торған бизнес-төркөмдәр бар, тиҙәр, улар бары хөкүмәт ҡарарын ғына көтә, имеш. Бындай төрмә төҙәлә ҡалһа, унда, йәһәһе, тәү сиратта балалы ҡатындар, үҫмерҙәр, инвалидтар урынлаштырыласаҡ икән. Ай-һай, енәйәтсел даирә лоббистары ошо социаль ҡатлам мәнфәғәттәрен хәстәрләй буламы һуң инде? Дөрөҫөрәге, бала-саға менән ҡатын-ҡыҙ уларға йәмәғәтселек фекеренән ҡасыу өсөн шаршау ғына булып хеҙмәт итәсәк, моғайын...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ*

# АУЫЛ ТОРМОШО ЛА ЯҠТЫРТЫЛҺЫН...

**"Киске Өфө"нө күптән уҡыйым һәм гәзит тураһындағы фекерҙәрем менән уртаҡлашҡым килә.**

Бик тиҙ үҙгәреүсе заманда, мәғлүмәттәр ифрат күп ваҡытта йәшәйбеҙ. "Киске Өфө" быларҙың барыһын да күҙ уңында тотоп, бөтә мәғлүмәтте ваҡытында биреп бара. Ә мәғлүмәттең "барҙы", "булды", "үтте", "ҡабул ителде" һәм башҡа дежур фразалар менән түгел, ә абруйлы кешеләрҙең фекере менән тулыландырып, аңлайышлы итеп бирелеүе баҫманы уҡыусыһы алдында тағы ла юғарыраҡ күтәрә.

Гәзиттең һәр һаны үткәнде тәфсирләп аңлатҡан, бөгөнгөнө объектив яҡтыртҡан, яҡты киләсәккә ышаныс бирген мәҡәләләр менән бай. Шуныһын да билдәләп үткем килә - мәҡәләләрҙә ҡайһы бер баҫмаларҙағы кеүек артыҡ "ҡыҫҡырыуҙар" юҡ, барыһы ла тыныс тонда, әммә күңелгә үткәрерлек итеп яҙыла.

Түңәрәк ҡорҙа алып барылған һөйләшеүҙәр бай йөкмәткеле, фәһемле, төрлө быуын кешеһенә ҡыҙыҡлы. Ошондай күркәм әңгәмәләргә власть органдарында эшләүселәрҙе, халыҡ депутаттарын, төрлө ойошма һәм учреждение етәкселәрен күберәк йәлеп итеүегеҙҙе теләр инем.

Шулай уҡ гәзит биттәрендә ауыл хужалығына ҡағылышлы мәҡәләләр йышыраҡ донъя күрһә ине. Был өлкәне үҫтереүсе йә алға ебәреүсе - ул район хакимиәте башлығы ла, колхоз йәки совхоз директоры ла түгел, ә тәү сиратта баҫыуҙа баш күтәрмәй эшләгән, ал-ял белмәй уныш йыйған, һыйыр һауған ябай комбайнсы, тракторсы, һауынсылар бит һәм гәзит биттәрендә уларҙың да фекерҙәрен ишеттереү яҡшы булыр ине. Уларҙың хеҙмәтен күрә һәм баһалай белергә кәрәк. Һәм был йәһәттән гәзит биттәрендә баҫылған мәҡәләләр уларҙың мәртәбәһен тағы юғарыраҡ күтәрергә ярҙам итәсәк.

Тағы ла шул: гәзит геройҙары күберәк ҡала кешеләре, улар менән бер рәттән ауылда донъя көтөүсе егәрле, ихлас, алсаҡ һәм булдыҡлы геройҙарға ла урын бирелһә, гәзит отор ғына ине. Намыҫлы, әҙәпле, киң күңелле яратҡан баҫмама уңышлы, һөҙөмтәле киләсәк теләйем.

**Марат ИБРАҺИМОВ.**
**Белорет ҡалаһы.**

*ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ*

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# КҮҢЕЛЕБЕҘ АҒЫУЛАНМАҺЫН!

**Салауат ИТБАЕВ, БР-ҙың атҡаҙанған артисы һәм сәнғәт эшмәкәре, Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһының ҡуйыусы режиссеры:** Профессиональ йырсылар алдында халыҡтың юғары зауығын тәрбиәләү, рухын күтәреү, күңелен үҫтереү бурысы ҡуйылған. Шуға күрә, коллегаларым менән Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы тамашасыһын һәр яҡлап тәрбиәләргә тырышабыҙ. Тәү сиратта, әлбиттә, башҡорт йыр сәнғәте классиктарының ижадын халыҡҡа еткереүгә ҙур көс һалабыҙ. Улар менән бергә заманса эстрада йырҙарына ла иғтибар бүлинә. Әммә баҡсаны ҡарамаһаң, түтәлдәрҙе ҡый баҫҡан кеүек, сәнғәт баҡсаһында ла йырлай белмәгән кешеләр күтәрелеп сыға башлай. Ҡайһы бер үҙешмәкәр коллективтар, йәш йырсылар араһында ике-өс нота йырлаусы кешеләр булыуы аянyслы. Улар алдына, әлбиттә, профессиональ йырсыларҙан талап ителгәндәр, план, графиктар ҡуйылмай. Шуға ла улар һәр урында сығыш яһарға өлгөрә, халыҡ араһында күп йөрөй, ҡайҙа саҡырһалар ҙа бара, үҙенең ижады менән таныштыра, аҡса мәсьәләһен дә тиҙ хәл итә. Мин барыһын да насар, тимәйем. Ул йырсылар ҙа үҙенең ижад кимәленән сығып тамашасыны тәрбиәләй. Үҙешмәкәр коллективтар араһында бик талантлы, көслө тауышлы, матур йырсылар бар. Әммә уларға профессиональ кимәлдә артабан да үҫергә, уҡырға, музыка сәнғәте өлкәһендә белемдәрен камиллаштырырға, һәләттәрен арттырырға кәңәш иткем килә. Бигерәк тә йәш йырсылар араһында, бер көнлөк умырзая сәскәһе кеүек, бик ҡыҫҡа ваҡытҡа ғына сәхнәлә күренеп ҡалыусылар күп булыуын беләм. Талантлары булып та, артабан үҙе өҫтөндә эшләргә, профессиональ яҡтан үҫергә ялҡауы килеп, сәхнәнән төшөп ҡалған йәштәр урынына артыҡ бер ниндәй ҙә таланты булмаған, ләкин тырышып эшләгәндәр килә. Талантың бар икән, артабан ошо өлкәлә эшләгән килә икән, теорияны ла үҙләштерергә кәрәк. Һуңғы арала илебеҙҙә һаулыҡҡа зыян килтерергә мөмкин булған сит ил аҙыҡ-түлектәренә ҡаршы көрәш башланды, беҙ үҙ сиратыбыҙҙа, күңелебеҙгә "ағыулы аҙыҡ" бирген яҙыҡлыҡтарҙан һаҡланайыҡ. Музыка сәнғәте күңел асыу ысулы ғына түгел, рухи байлыҡ сығанағы булыуын да онотмайыҡ.

**Камила ҒӘЛИЕВА**
**яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓25 сентябрҙән 27-нә тиклем Өфөлә өсөнсө тапҡыр бөтә Рәсәй Фән фестивале уҙғарыла. Был көндәрҙә республиканың баш ҡалаһы Волга буйы федераль округының төп ғилми майҙансығына әүерелләсәк. Бөйыл күләмле фәнни форумда 20-нән ашыу майҙансыҡ йәлеп итеү планлаштырыла. Фестивалдә юғары уҡыу йорттары һәм Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге институттары ҡатнаша. Программа сиктәрендә 40-тан ашыу лектор - Рәсәй һәм сит ил ғалимдары, билдәле фәндә популярлаштырыусылар сығыш яһаясаҡ.

✓Өфөлә ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәре эшҡыуарҙарының күргәҙмәһендә төп бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ предприятиелары ҡатнашасаҡ. Күргәҙмә 22-23 октябрҙә ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәренең Беренсе бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ форумы сиктәрендә уҙғарыла. Күргәҙмәлә IT-технологиялар, сәнәғәт, сеймал табыу һәм уны эшкәртеү, экология, туризм, медицина һәм фармацевтика, ауыл хужалығы, аҙыҡ-түлек сәнәғәте, франчайзинг өлкәһендәге яңылыҡтар тәҡдим ителәсәк.

✓Өфөнөң Салауат Юлаев майҙанында уҙғарылған "Әҙәбиәт. Асыҡ дәрес" акцияһына 500-гә яҡын уҡыусы йыйылды. Саф һауала әҙәбиәттән асыҡ дәресте "Тамыр" балалар телеканалы ойошторҙо. Уҡытыусылар сифатында яҙыусы, тәнҡитсе, журналист Игорь Савельев, М. Аҡмулла исемендәге БДПУ доценты, яҙыусы Зәки Әлибаев, шағирә Марианна Плотникова, 35-се урта дөйөм белем биреү мәктәбенең рус теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Елена Жерякова сығыш яһаны. Сара тураһында репортаж Башҡортостан юлдаш телеканалында 27 сентябрҙә иртәнге сәғәт 10-да эфирға сыға.

✓Башҡортостан аниматоры Рим Шәрәфетдиновтың "Хәйерлегә булһын!" йәнһүрәте Ҡазанда уҙған XI халыҡ-ара мосолман киноһы фестивалендә "Баһалама ағзаларының махсус билдәләүе"нә лайыҡ булды. "Башҡортостан" киностудияһынан фестивалгә өс эш тәҡдим ителгәйне. "Ҡыҫҡа метражлы уйын фильмдары" номинацияһында режиссер Айнур Аҫҡаровтың "Әсә", "Ҡыҫҡа метражлы документаль фильм" номинацияһында режиссер Нәсүр Йәрөшбаевтың "Ике тоткон: Жәүит менән Вальтер" фильмдары ҡатнашты.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Агентлыҡ күҙаллауынса, 2015-2017 йылдарға Өфөнөң финанс күрһәткестәре яҡшырыуға табан барасаҡ, ә бурыстары халыҡ-ара кимәлдә түбән булып ҡаласаҡ.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы.** Дим бистәһенән Шаҡшаға тиклем ҡала электричкаһы йөрөй башланы. Һуңғы йылдарҙа Шаҡша менән Дим бистәләре бик етеҙ ҙурайып, үҫәрҙәре айырым ҡала сүрәтен алды. Улар араһындағы юлдар ҙа тиҫтәләрсә саҡрымдарҙы тәшкил итә. Хәҙер был арауыҡты яңы электричкала Өфөнән Шаҡшаға тиклем - 36, Димдән 42 минутта үтеп була һәм юл хаҡы тәүгеһендә - 36, һуңғыһында 37 һум була.

**Совет районы.** Үткән ял көндәре ҡаланың Якутов паркында республикабыҙҙың 47 районынан йыйылған бал етештереүселәр йәрминкәһе үтте. Һатып алыусылар балды тәмләп ҡарау ғына түгел, уның сифатын шунда уҡ ҡала ветеринар станцияһының мобиль лабораторияһында тикшертеп тә ала алды. Бал башҡорттоң төп брендтарының береһе булһа ла, 2004 йылға тиклем ГОСТ тарафынан өйрәнелмәгән ине әле. Яңы Зеландияның "Манука" балы донъялағы иң яҡшыһы тип һанала, беҙҙең бал унан бер яғы менән дә ҡайтыш булмай сыҡты. Сентябрь айында башҡорт балы Көньяҡ Кореяла үтәсәк халыҡ-ара күргәҙмәлә ҡатнашасаҡ. Бындай сараны Башҡортостан үҙендә 2021 йылда ҡабул итәсәк.

**Дим районы.** Дим бистәһендә ауыл хужалығы йәрминкәһе сиктәрендә Халыҡтар дуҫлығы фестивале үтте. "Бер ғаилә" тип аталған был матур байрам республикабыҙ суверенлығының 25 йыллығына арналды. Халыҡ бында сауҙа итеүҙән тыш башҡорт, рус йәки сыуаш йорттары алдында барған күнелле концерттарҙы йәки йола күренештәрен ҡарап кинәнә алды. Тамашасыларҙы иң күп йыйғаны шулай ҙа башҡорт тирмәһе булды. Унда 102-се башҡорт гимназияһы "Килен төшөрөү" йолаһын сәхнәләштергәйне.

**Киров районы.** Киров районында "Реаль эштәр" проектын реализациялау буйынса БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары менән осрашыу үтте. Халыҡтың һорауы буйынса бында Достоевский урамы 106-сы йорт ихатаһында хоккей "ҡумтаһы", 22-се урта мәктәп янында спорт майҙансығы төҙөләсәк. Кувыкин урамы 7а йорто ихатаһындағы Хәрби дан аллеяһы эшләнеп бөтөп бара, Өфө дәүләт нефть техник университеты студенттары аллея һәйкәле проектын башҡара.

**Ленин районы.** Ленин районында тәүге тапҡыр гәҙәти булмаған бәйге ойошторолдо. Бында 16 йәшкә тиклемге һәм унан ололар ауыр юл шарттарында машиналарҙа ярышты. Ярыш алдынан тамашасыларҙы ӨФСИН кинологтары тоҡомло овчаркаларының һәләттәре менән һоҡландырҙы. Енәйәтселәрҙе эттәр ярҙамында асыҡ ерҙә, машина салонында һәм башҡа урындарҙа ҡоралһыҙландырыу, ҡулға алыу осраҡтарын миҫалда күрһәтте полиция хеҙмәткәрҙәре.

**Орджоникидзе районы.** 10 сентябрҙән алып ҡалабыҙҙа гәҙәти булмаған троллейбус йөрөй. Баш ҡалабыҙ "Дуҫлыҡ дәфтәре" проекты сиктәрендә Бөтә Рәсәй "Уҡыусы троллейбус"акцияһын ойоштороусы Пермь ҡалаһы эстафетаһын ҡабул итеп алды. Орджоникидзе районы волонтерҙар хәрәкәте беренсе булып 2-се маршрут буйынса ҡаланы гиҙҙе һәм пассажирҙар алдында билдәле классиктарҙың илһамлы шиғырҙарын уҡып ишеттерҙе.

**Октябрь районы.** 10 сентябрь районда наркотиктарға ҡаршы комиссияның дүртенсе ултырышы булып үтте. Дөйөм күрһәткестәр буйынса был райондағы наркоситуация һаман да көсөргәнешле килеш ҡала. Ошо сәбәпле районда йәштәрҙең волонтерҙар хәрәкәте эштәрен әүҙемләштерә. Һуңғы алты айҙа ғына ла улар тарафынан 30 профилактик сара уҙғарылған. Комиссия ултырышы тағы ла өҫтәмә сараларға, сәләмәт тормошто пропагандалаусы йүнәлештәргә йөкләмәләр алды.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## ҺАЙЛАУҘАР ҮТТЕ



**Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, 13 сентябрҙә - Берҙәм тауыш биреү көнөндә һайлаусыларҙың 73 проценттан ашыуы "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһенән күрһәтелгән кандидаттар өсөн тауыш биргән. Ошо хаҡта "Башинформ" агентлығында уҙған "Көҙ-2015" һайлау кампанияһы йомғаҡтарына арналған матбуғат конференцияһында партияның төбәк бүлексәһе секретары Константин Толкачев хәбәр итте.**

Билдәләнеүенсә, был көндә 7310 мандатҡа 15 329 кандидат дәғүә итте. "Берҙәм Рәсәй" партияһынан 5572 депутат һайланды. Партияның төбәк бүлексәһе барлыҡ алмаштырыласаҡ мандаттарға кандидаттар күрһәтте. Уларҙың барыһы ла партия эсендә алдан тауыш биреү буйынса һайлап алынды. Үҙ-үҙен күрһәткән 700-ҙән ашыу кандидат "Берҙәм Рәсәй" партияһынан. Алдан һайлауҙа 15395 кеше ҡатнашты.

"Партия күберәк йәштәргә баҫым яһаны. Яҡынса мәғлүмәттәр буйынса, урындағы үҙидара органдарына 35 йәшкәсә 793 кеше һайланды", - тип һөйләне Константин Толкачев.

Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттарын өҫтәмә һайлауҙарҙа ла "Берҙәм Рәсәй" вәкилдәре еңеп сыҡты. Күмертау округы буйынса "Акрополь" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенең генераль директоры Хәйҙәр Ғайсин, Туймазы округы буйынса "Белсталь" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең генераль директоры Рәмил Бигнов һайлаусыларҙың ышанысын яуланы.

## КРЕДИТ СОҠОРОНДА ТҮГЕЛБЕҘ!




**Standard & Poor's Халыҡ-ара рейтинг агентлығы ошо йылдың авгусында үткәрелгән сираттағы тикшеренеүҙәрҙән һуң Өфө ҡалаһының финанс күрһәткестәре яҡшырыуын билдәләне һәм рейтингтар буйынса күҙаллауҙарҙы "Негатив"тан "Тотороҡло"ға күсерҙе.**

Өфө кредиттар йәлеп итеү иҫәбенә бурыстар һәм уларҙы ҡаплау күрһәткестәрен тотороҡландыра алды һәм был ҡалаға хеҙмәтләндереү сығымдарын ҡаплау һәм бурыстарҙы түләү коэффициентын тейешле кимәлдә тоторға булышлыҡ итәсәк. Агентлыҡ күҙаллауынса, 2015-2017 йылдарҙа Өфөнөң финанс күрһәткестәре яҡшырыуға табан барасаҡ, ә бурыстары халыҡ-ара кимәлдә түбән булып ҡаласаҡ.

Агентлыҡтан хәбәр итеүҙәренсә, яҡындағы 12 ай эсендә бюджетҡа өҫтәмә килемдәр менән сығымдарға иҫәпсел мөнәсәбәт ағымдағы бюджет үҫешенә алып килгән хәлдә рейтинг артабан күтәрелеүен дауам итәсәк, ә хеҙмәтләндереүгә сығымдарҙы ҡаплау һәм бурыстарҙы түләү коэффициенты 120 проценттан артып китәсәк.

2014-2015 йылдарҙа Рәсәй төбәктәре һәм муниципалитеттары араһында Standard & Poor's агентлығы күҙаллауҙарҙы яҡшыртҡан берҙән-бер ҡала Өфө булды. Өфөнөң юғары халыҡ-ара эксперттар баһаһына лайыҡ булыуы унайынан ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов үҙ бурыстарын яҡшы башҡарғандары өсөн муниципалитеттың финанс-иҡтисад бүлектәренә рәхмәтен белдерҙе.

## ИҪКЕҺЕ ЯҢЫРТЫЛДЫ



**Өфө дәүләт нефть техник университеты Йәштәр һарайы алдындағы Серго Орджоникидзе исемендәге майҙанда Өфөнөң иң иҫке фонтандарының береһен (уға быйыл - 60 йыл) яңыртып ҡороу тантанаһы булып үтте.**

Уның тәүге һүрәтләнеше 6 метр диаметрлы түңәрәк булып, 70-се йылдарҙа фонтан кәсәһе тура мөйөшлө итеп үҙгәртелгәйне. Һеҙөмтәлә ул 10 метр оҙонлоҡҡа һуҙылды. Әлеге үҙгәртеп ҡороу эштәрендә уның кәсәләре мәрмәр плитәләр менән ҡапланды, бөтөн коммуникациялар яңыртылды, эргә-тирә биләмәләре төҙөкләндерелде. Бынан тыш, фонтанға яҡтыртҡыс музыка ҡулайламаһы ҡуйылды: Рәсәй һәм сит ил композиторҙары көйҙәре аҫтында 14 һыу бағанаһы йәйгоро 28 прожектор менән яҡтыртыла.

-Баш ҡалабыҙҙы төҙөкләндереү, йәшелләндереү, ҡала халҡының ялы өсөн унайлы мөхит булдырыуға ҙур иғтибар бирелә, - тине фонтанды асыу тантанаһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов, - Өфө скверҙары, парктары һәм аллеяларының йөҙө ҡупшылана, яңыртыла. Быйыл яҙ Беренсе май урамындағы аллея ҡайтанан асылды, ул хәҙер Енеү аллеяһы тип атала. Яңы фонтандар төҙөлә һәм яңыртып ҡорола. Йәй көнө Театр скверында асылған "Ете ҡыҙ" фонтаны өфөләрҙең яратҡан урынына әүерелдә лә инде. Ҡала халҡының урам ығы-зығыһынан арынып, балалары менән килеп ял итерлек яраткан урындары булырға тейеш.

Яҡын йылдарҙа Орджоникидзе һәм Калинин райондарын комплекслы үҫтереү мәсьәләләре даими тормошҡа ашырыласаҡ икәне тураһында хәбәр иткәйнек инде. Бөгөн иһә бында төҙөләш, коммуналь, торлаҡ һәм мәғариф өлкәләрен үҙ эсенә алған махсус программа тамамланыу алдында.

## ЙОРТОҒОҘҒА ЙЫЛЫ КИЛӘСӘК



**Башҡортостан баш ҡалаһының торлаҡ предприятиелары, ресурстар менән тәьминәт ойошмалары, йылылыҡ селтәрҙәре йылылыҡ энергияһы ҡулланыусыларҙы тәьмин итеүгә әҙер.**

Ҡала хужалығы объекттарын 2015-2016 көҙгө-ҡышҡы осорға әҙерләү буйынса ҡаралған саралар планына ярашлы, эштәр күләме графикка ярашлы алып барылды һәм әҙерлек нигеҙҙә тамамланды. Шул уҡ ваҡытта ресурс менән тәьмин итеүсе ҡайһы бер участкаларҙа йылылыҡ селтәрҙәренә капиталь ремонт үткәреү буйынса 2015 йыл аҙағына иҫәпләнгән ағымдағы эштәр дауам итә. Был йылытыу миҙгелен башлап ебәреүгә һис тә ҡамасаулыҡ итмәй: йылылыҡ үткәргес торбалар линияһын урынлаштырыу хәҙер өсөнсө йыл ана шулай башҡарыла.

Коммуналь хеҙмәттәр менән тәьмин итеүҙе көйләүсе федераль законға ярашлы, йорттарға йылы биреү уртаса һауа температураһы биш көн рәттән Цельсий буйынса плюс 8 градус тәшкил иткән осраҡта башланып китә. Ләкин ҡулланыусылар бындай температура сиктәрен көтөп тормайынса ла йорттарына йылылыҡ биреүгә ғариза яҙа ала. Бының өсөн күп фатирлы йорттарҙа йәшәүселәр торлаҡ милекселдәренең дөйөм йыйылышын үткәреп, тейешле ҡарар ҡабул итергә һәм йыйылыш протоколын үҙҙәренең идарасы компанияһына бирергә тейеш.

"Башинформ"

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостан юлдаш телеканалындағы "Орнамент" тапшырыуының биш сығарылышы журналистарҙың "СМИротворец" милләт-ара һәм этноконфессия мөнәсәбәттәре мәсьәләләрен иң яҡшы яҡтыртыуға Бөтә Рәсәй конкурсының округ этабы еңеүселәре иҫәбенә инде. Башҡорттарҙың һарыҡ йөнө ҡырҡыу, мордваларҙың Святки байрамы, мариҙарҙың яусылау һәм кесертҡәндән еп эшләү йолалары тураһында тапшырыуҙар "СМИротворец-Волга буйы" конкурсында икенсе урын алды.

✓Рәсәйҙең Баҡылағы мәғлүмәт-мәҙәни үҙәгендә ике туғандаш республиканың - Башҡортостан менән Татарстандың мәҙәниәттәренә бағышланған сара булды. Кисәлә Башҡортостан ҡунағы - "Башинформ" мәғлүмәт агентлығы күҙәтеүсеһе Ләйлә Аралбаева сығыш яһаны. Ул йыйылыусыларға республикабыҙҙың мәҙәниәте хаҡында һөйләне, башҡорт телендә йырҙар башҡарҙы.

✓Башҡортостандың 32 муниципаль районында һәм ҡала округтарында республиканан сыҡҡан Советтар Союзы Геройҙарына арналған 82 мемориаль таҡтаны асыу һәм ошо ваҡиғаларға арналған линейкалар үтте. Был иҫтәлекле таҡталар "Берҙәм Рәсәй" партияһы тарафынан әҙерләнде.

✓22 сентябрҙә Өфөлә һәм бөтә донъяла Автомобилһеҙ бер көн билдәләнә. Йола буйынса был көндә автомобилдән баш тартырға һәм тәғәйенләнгән урынға (эш, уҡыу) йәйәү йәки йәмғәт транспортында, велосипедта барырға тәҡдим ителә. Быйыл Бөтә донъя автомобилһеҙ бер көн Европа мобиллек аҙналығы сиктәрендә уҙғарыла. 16 сентябрҙән 22-нә тиклем үтәсәк аҙналыҡта Рәсәйҙең 40-ҡа яҡын ҡалаһы: Мәскәү, Санкт-Петербург, Владивосток, Өфө, Калининград, Ҡазан һәм башҡалар ҡатнаша.

✓Бөрйән районында экологик матбуғат туры уҙғарылды. Экологик турҙы Дәүләт Думаһы депутаты Марсель Йосопов һәм М.Ғафури исемендәге Башҡортостан ҡошсолоҡ комплексы булышлығында Башҡортостандың Журналистар союзы ойоштороҙо. Унда республика һәм муниципаль киң мәғлүмәт сараларының 20-нән ашыу вәкиле ҡатнашты.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!



# АЛТЫНҒА ТИҢ, УНАН ҠИММӘТ

## Беҙҙең һатҡан балыбыҙ…

**Алдағы һанда хәбәр итеүебеҙсә, Өфөнөң Совет районында "Баллы төбәк" бал һәм бал нигеҙендә эшләнгән продукция йәрминкәһе үтте. Унда республикабыҙҙың 47 районы вәкилдәре үҙ тауарын тәҡдим итте. Быйылғы бал уңышы былтырғы менән сағыштырғанда ҡайтышыраҡ булды, тиһәләр ҙә, эшһөйәр бөжәктәр быйыл да хужаларын шәрбәтле ризыҡтан яҙҙырмаған - ана бит, кәштәләрен һығылдырып, сәскә еҫтәрен аңҡытып, рәт-рәт булып теҙелгән умартасы-һатыусылар.**

Эйе, умартасылар үҙҙәрен һатыусы ролендә йыш һынай. Шулай булмай ни, етештергән тауарын алам тип торған, балдың баһаһын яҡшы белгән һатып алыусылар барҙа, тәбиғәт үҙе фатихаһын биргән был шөғөлдән файҙа алыу мотлаҡ кәрәк. Ҡала халҡына иһә шуныһы бик уңай: тәбиғи ризыҡ артынан аҡса түгеп, райондарға елдерергә лә кәрәкмәй - йәшелсә-емеше, ите-балы, ҡымыҙы һәм башҡаһы ҡалаға үҙе килә лә ҡуя. Әйткәндәй, ауыл хужалығы йәрминкәләрен уҙғарыуҙы тыйған төбәктәр ҙә бар икән. Әммә баш ҡалабыҙ Өфөлә, республикабыҙҙың башҡа ҡалаларында һәм район үҙәктәрендә көҙ айҙарында ауыл хужалығы йәрминкәләре аҙна һайын тиерлек гөрләп тора, аҡсаң, теләгең генә булһын. Бал йәрминкәһен айырыуса көтөп ала ҡала халҡы. Шулай уҡ умартасыларҙың үҙҙәре өсөн дә бик әһәмиәтле был сара. Уның шулай икәнен раҫлаһы өсөн йәрминкәгә килгән берҙенсә умартасыға мөрәжәғәт иттек.

**Юлдаш ЙОМАҒУЖИН, умартасы, Бөрйән районы Ғәҙелгәрәй ауылы:** Беҙҙең ата-бабалар ғүмер буйы умарта тотҡан. Беҙ ҙә бәләкәйҙән атайға умарталыҡта ярҙамлашып үҫтек. Атайыбыҙ Рафиҡ Ғилметдин улы менән Ғәзиз ҡустыбыҙ 2012 йылда Өфөлә үткән "Умартасылар бәйгеһе"ндә "умартасылар династияһы" номинацияһында беренсе урын да алғайны. Йәрминкәләргә йыл һайын йөрөп торабыҙ. Рәстәм ағайыбыҙ, Шәфҡәт, Ғәзиз ҡустыларым менән кисә кис уҡ Өфөгә килеп, туғандарҙа ҡунып, таңғы 5-тә үк палаткабыҙҙы ҡороп ҡуйҙыҡ. Ойоштороусылар, етмәүе мөмкин, тигәс, палатканы Өфөнән үҙебеҙ һатып алдыҡ, өҫтәлен дә таптыҡ. Хәйер, зарланырға урын юҡ. Алып килгән өс фляга балыбыҙ тулыһынса һатылып бөттө. Балдың 3 литрын 2000 һумға алып бөттөләр. Бөрйәндән, күршеләрҙә иҫәпкә алмағанда, ике ғаилә ҡатнаштыҡ. Күршеләр тигәнебеҙ, Бөрйән районы менән сиктәш урынлашҡан күгәрсендәр булды - улар ҙа балын "бөрйән балы" тип һатыуға ҡуйҙы. Был хәлгә кемдеңдер иҫе китмәҫ, әммә беҙҙең үтенес шул: һәр кем үҙ районын дөрөҫ күрһәтһен ине. Башҡа райондарға күләгә төшмәһен. Бөрйән балы, тип килтерелгән балдың сифаты яҡшы булһа ярар ҙа ул, мутлашыусылар ҙа осрап ҡуя бит. Балдың сифаты насар булһа, былдай алдашыу һатып алыусыны һыуындыра. Ниңә сит район исеменән аҡса эшләргә тырышаларҙыр? Үҙҙәренең шәп балын үҙ районы исеменән һатһалар, яҡшыраҡтыр бит - дан тарала, яңы бренд барлыҡҡа килә. Хәйер, күптәр бөгөнгөнө генә уйлай шул - киләсәк тураһында ул тиклем бошоноп бармай. Ә беҙ, дүрт бер туған, етештергән тауарыбыҙ сифатлы булһын, тип, йәйен-ҡышын тырышып эшләйбеҙ.

**Самат КӘЛИМУЛЛИН, умартасы, Бәләбәй ҡалаһы:** Бынан 4 йыл элек булды был хәл: Һупайлы биҫтәһендә бал һата инем, кешеләр сират торған. Ситтәрәк бер ҡарттың миңә ҡарап нимәлер яҙғанын күреп ҡалдым. Бер аҙҙан ул минең яныма килеп, ҡулыма ҡағыҙ киҫәге тотторҙо. Унда:

*"Башҡорт иле - дуҫлыҡ иле,*
*Йыраҡ китә данылыбыҙ.*
*Алтынға тиң, унан ҡиммәт*
*Беҙҙең һатҡан балыбыҙ.*
*Ҡүркмәйынса алығыҙ,*
*Бөтә, алып ҡалығыҙ!"*

- тигән юлдар бар. Әле бына ошо шиғырҙы матур ҡағыҙға сығартып, тышлатып, өҫтәлгә һалғанмын. Йәл, ағайҙың исемен генә һорамағанмын. Һәүәҫкәр шағир булдымы ул, әллә профессионалмы? Хәйер, ҡыуанысымдан сәсәнгә бер һауыт балды һис икеләнмәй бүләк иттем. Шиғыр яҙыу һәләте беҙҙә юҡ. Беҙҙең талант - умарта менән бәйле. 6 йәшемдән умарта ҡарайым. Умарта аҫтында тыуғанмын, умарта өҫтөндә үҫкәнмен, тип көлөп тә алам.

Быйыл, дөрөҫөн әйткәндә, бал аҙ булды. Июнда, июлдә көн бик эҫе торҙо бит. Йүкә сәскәһе нектарҙы ул тиклем күп бүлеп сығарманы. Эҫе булды ла, ямғырҙар китте, һыуыҡтар башланды. Йәрминкәгә өс фляга бал килтергәйнек, һатылып бөттө. Йүкә, ҡарабойҙай, сәскә балы, шулай уҡ кәрәҙҙән айыртылмаған балыбыҙ ҙа бар. Бынан тыш, балауыҙ, сәскә һеркәһе алып килдек. Балдың литрын 350 һум менән һаттыҡ. Йүкә балын 450 һум менән дә алдылар. Йүкә балының тәме икенсе төрлө бит инде.

Ошондай йәрминкәләрҙә умартасылар менән аралашыу, тәжрибә уртаҡлашыу оҡшай. Шунан ниндәйҙер бер дәрт, ҡомар барлыҡҡа килә. Дәрт тигәндән, бал ҡорттары менән бер ритмда йәшәү шул тиклем ҙур бәхет икәнен бары ошо өлкә кешеләре генә беләләр. Ҡорттар бит ҡояш ҡалҡыу менән уяна ла, көн буйына эш менән була. Мин дә шулай, сәғәт таңғы 6-ла уҡ йоҡом да туя, эшкә тотонам. Бал ҡорттары тәмәке, араҡы, һыра еҫен ныҡ яратмай, хушбуйҙы ла үҙ итмәй. Умартасылыҡ - таҙалыҡ тигән һүҙ менән дә ауаздаш. Тағы, теүәллек тә талап итә ул. Һәр көнөмдөң планын алдан яҙып барам, был ныҡ ярҙам итә. Умартасы оптимист та ул. Мин, мәҫәлән, бер ҡасан да зарланмайым. Тормош шундай матур бит - шуға ҡыуанып, һәр көнөм өсөн һөйөнөп йәшәйем.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Йәрминкәлә умартасылар араһында конкурс та уҙғарылды. Конкурс йомғаҡтары былай булды: "Һатып алыусыны ылыҡтырғаны өсөн" номинацияһына - Белореттан Сергей Тихонов лайыҡ булһа, "Иң яҡшы һатыу нөктәһе өсөн" номинацияһында урындар түбәндәгеҫә билдәләнде: Ҡариҙел районынан Айрат Ғайсин - беренсе, Иглиндан Әфғәт Хәлитов - икенсе, Күгәрсен районының "Тәүәкән" дәүләт унитар ауыл хужалығы предприятиеһы өсөнсө урынға лайыҡ булды.**

**Бал йәрминкәһен Илгиз ИШБУЛАТОВ ҡыҙырҙы.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ТАШЛАМА МЕНӘН ФАЙҘАЛАН

**Ағымдағы йылдағы кеүек үк, 2016 йылда ла Башҡортостан һалым түләүселәре милеккә һалым буйынса ташлама менән файҙалана ала. Бының өсөн 2015 йылдың 1 ноябренә тиклем һалым органдарына тейешле белдереү ҡағыҙын тапшырырға кәрәк, тип хәбәр итә Рәсәйҙең Федераль һалым хеҙмәте.**

Белдереү ҡағыҙының формаһын Федераль һалым хеҙмәтенең сайтынан күсереп алырға мөмкин. Әгәр ҙә элек һалым түләүсенең милеккә һалым буйынса ташламаһы булмаған икән, белдереү ҡағыҙы менән бергә тейешле ғариза, шулай уҡ һалым ташламаһына хоҡуҡлы булыуҙы раҫлаған документтар тапшырыла. Күсемһеҙ милектең түбәндәге төрҙәренең бер объектына ҡарата ташлама ҡаралған: фатир йәки бүлмә; йорт; ижади оҫтахана, ателье, студия; баҡса йәки дача участкаларында урынлашҡан 50 квадрат метрҙан артмаған хужалыҡ ҡаралтыһы; гараж йәки машина урыны. 2015 йылдың 1 ноябренә тиклем белдереү ҡағыҙын тапшырмаған осраҡта уны киләһе йылда 2017 йылда һалым ташламаһы менән файҙаланыу өсөн бирергә була.

## ЯҢЫ ХУЖА

**2016 йылдан Башҡортостанда балаһы уллыҡҡа алыусыларға пособиены социаль ярҙам үҙәктәре түләйәсәк. Башҡортостан Хөкүмәте бер тапҡыр бирелә торған аҡсалата пособие тәғәйенләү һәм түләү тәртибенә үҙгәрештәр индерҙе.**

Хәҙерге ваҡытта ошо вәкәләттәр Башҡортостандың Мәғариф министрлығы ҡарамағында, әммә 2016 йылдың 1 ғинуарынан пособиеларҙы төбәктең Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы тәғәйенләйәсәк. Уларҙы түләү менән Халыҡты социаль яҡлау республика үҙәге филиалдары шөғөлләнәсәк, тип аңлаттылар Башҡортостан Хөкүмәтенең матбуғат хеҙмәтендә. 2016-2018 йылдарҙа ошо маҡсатта республика бюджетынан йыл һайын 84,6 миллион һум бүленәсәк.

Белешмә. Былтыр Башҡортостанда 372 баланы уллыҡҡа алғандар - был Волга буйы федераль округында икенсе күрһәткес. Пермь крайында - 429, Нижегород өлкәһендә - 162, Һамар өлкәһендә - 133, Татарстанда 129 бала уллыҡҡа тапшырылған.

## ТРАМВАЙ ҠИММӘТЛӘНӘ

**Сентябрҙә Өфөлә ҡулаҡса менән иҫәпләшеүселәр өсөн трамвайҙа йөрөү хаҡы үҙгәрә. Улар өсөн юл хаҡы троллейбустағы кеүек үк 18 һум буласаҡ. Электрон пластик карта буйынса йөрөү - 15 һум. Пенсионерҙар, федераль һәм төбәк әһәмиәтендәге ташламаға эйә булыусылар өсөн социаль пластик карта буйынса юл хаҡы 10 һум, студенттар өсөн - 10 һум, мәктәп уҡыусылары өсөн 6 һум торасаҡ. Багаж хаҡы 10 һум күләмендә билдәләнәсәк.**

Өфөләге Муниципаль электр транспорты идаралығы былтыр индерелгән айлыҡ абонементтар системаһын дауам итәсәк. Ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, бөгөн Муниципаль электр транспорты идаралығы өс иң популяр һәм социаль әһәмиәтле айлыҡ абонементты билдәләне. Улар киләһе йылда ла Өфө ҡалаһының электр транспортында һаҡланып ҡала. Айлыҡ абонементтар буйынса 20 һәм 30 тапҡыр юл йөрөүгә 240 һәм 340 һумлыҡ тариф ҡулланыла. 50 тапҡыр юл йөрөүгә иҫәпләнгән айлыҡ билет федераль һәм төбәк әһәмиәтендәге ташламаға эйә булыусылар, пенсионерҙар өсөн 340 һум торасаҡ. Шулай итеп, ошо абонементтар буйынса бер тапҡыр йөрөү 12 һум, 11,3 һум һәм 6,8 һум тәшкил итәсәк.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Арпа сыҡһа…

❖ Күҙгә арпа сыҡһа, үҙегеҙ тағып йөрөгән алтын алҡа менән ышҡығыҙ.

### Тире ауырыуҙарынан

❖ Бойҙай икмәген ваҡлап һыуға һалырға, йәбешеп торған масса хәләнә етерлек итеп бал ҡушып болғарға. Шуны тиренең ауыртҡан урындарына көнөнә бер нисә тапҡыр 15-20 минутҡа һөртөргә.

### Тирләһәң…

❖ Ҡултыҡ аҫты тирләһә, иртәнсәк һәм кис ҡултыҡ аҫтына сиратлап ҡайнар һәм һалҡын һыуға тығып алынған таҫтамалды 5-әр минутҡа ҡуйығыҙ.

### Йөҡоһоҙлоҡтан

❖ Төнгә 1 балғалаҡ бал болғатылған 1 стакан йылы һөт эсеү ҙә етә.

❖ Яңы ғына һығылған ярты стакан ҡабаҡ һутын 1 ҡалаҡ бал менән эсеү яҡшы.

❖ 200 грамм балды 3 ҡалаҡ тәбиғи алма һеркәһе менән болғатып, йоҡо алдынан 2-шәр балғалаҡ эсергә. Был доза ярҙам итмәҫтәй тойолһа, тағы ла арттырығыҙ. Төнөн уяның йоҡлап китә алмаһағыҙ, ҡатнашманы тағы ла эсегеҙ.

### Гемоглобин

❖ Гемоглобинды күтәреү өсөн 20 грамм женьшень тамырын төйөп, ярты килограмм балға ҡушып, әлдән-әле болғатып, 1 аҙна төнәтергә һәм көнөнә 3 мәртәбә сирек балғалаҡ ҡабырға.

### Балан

❖ **Миҙгел ауырыуҙарынан.** 1 ҡалаҡ балан ҡайырыһы, ярты стакан балан һуты, 1 ҡалаҡ аҡ сәскә, 1 ҡалаҡ кейәү үләне, 1 ҡалаҡ бөтнөк, 1 ҡалаҡ балға 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 10 минут төнәткәс, һөҙөргә һәм быяла банкаға ҡойоп алырға. Көнөнә 3-4 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда яртышар стакан эсергә.

❖ **Диабеттан дауа.** 10 г киптерелгән балан емеше, 20 г артыш емеше, 40 г кертмәле япраҡтары, 20 г етен орлоғон ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға. 30 минут ҡайнап ултырған һыулы һауытта тотоҡандан һуң, һөҙөргә. Көнөнә 2-3 тапҡыр 1-әр стакан эсергә.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

✓ *"Әгәр ҙә эсеүҙе ташларға үҙегеҙ теләмәһәгеҙ, һеҙгә бер кем дә ярҙам итә алмай - өшкөрөүҙең дә, үлән төнәтмәләренең дә файҙаһы юҡ. Гипноз да, нарколог та, һаулыҡ һаҡлау министры ла ярҙам итә алмай."*



*ЙОЛАЛАРЫБЫҘ*



# МИФОЛОГИЯЛА ӨЙРӘК ОБРАЗЫ

**Башҡорт мифологияһында, йолаларында өйрәк тотем ҡош, тотемик тәүтыуҙырыусы, һаҡлаусы, ерҙе барлыҡҡа килтереүсе булараҡ ҡабул ителә. Уның соляр культ менән бәйләнеше лә асыҡ һиҙелә.**

"Урал батыр" менән "Аҡбуҙат" эпостарында өйрәктәр ҡояшты һәм айҙы кәүҙәләндерә. "Урал батыр"ҙа Урал батыр тере һыу эҙләп донъя гиҙеп йөрөгәнендә ҡояш ҡыҙы ҡыҙ-аҡҡош Һомай иленә барып сыға. Һомай батырға ярҙам итергә ризалаша, тик бының өсөн Урал батыр "бөтә донъя ҡош төҫөн үҙ төҫөнә биҙәгән" ҡошто алып килергә тейеш була. Батыр бындай ҡошто ярҙары һәм төбө көмөш менән ҡапланған, тирә-яғы бейек тауҙар менән уратып алынған күлдә таба. Урал батыр был ҡошто тота һәм егеттең дейеүҙәр тоҡомонан булмауына ышанғас, ай йөҙлө ҡыҙға әүерелә һәм айҙың ҡыҙы Айһылыу икәнен белдерә.

Эпоста бөтә донъя ҡош төҫөн үҙ төҫөнә биҙәгән ҡоштоң өйрәк икәнлеге әйтелмәй. Евразия халыҡтарының фольклор сюжеттарын һәм йолаларын өйрәнеп, В. Котов, "Урал батыр" эпосында һыуҙа йөҙгән ҡош һүрәтендәге ике апалы-һеңлеле ҡыҙҙар (өйрәк образындағы Айһылыу - ай, аҡҡош образындағы Һомай ҡояш) хаҡындағы боронғо соляр мифтың эҙҙәрен таба. Улар демиургтар - ерҙе булдырыусылар ағалы-ҡустылы Шүлгән менән Уралдың ҡатындары булып китә. Был фекер "Аҡбуҙат"тың сюжет линияһы менән дә нығытыла. Эпостың төп геройы Һәүбән күлдә йөҙөп йөрөгән алтын өйрәкте күреп ҡала. Оҙаҡ уйлап тормай, уҡты төҙәп ата ла, өйрәк эргәһенә йөҙөп барып, уны ярға табан ҡыуа башлай. Шул мәлдә өйрәк телгә килә һәм һыу аҫты батшаһы Шүлгәндең ҡыҙы булыуын әйтеп, батырҙан уны ебәреүен үтенә. Әгәр ҙә ул һыуҙан ергә сыҡһа, үләсәген дә әйтә, сөнки ул һыу ҡыҙы, "һыу ҡыҙының бар ере нурҙан, уттан яралған". Ҡыҙы өсөн батша байлыҡ, мал һәм легендар батыр аты - Аҡбуҙатты тәҡдим итә. Һәүбән риза була һәм өйрәкте ебәрә.

Икенсе тапҡыр Һәүбән алтын өйрәк менән шул уҡ күлдә осраша, тик был юлы ул алтын сәсле ҡыҙ булып, алтын тәхеттә ултыра. Һәүбән һиҙҙермәй генә килеп, ҡыҙҙың сәсенән эләктереп ала һәм ҡыҙға бергә булырға тәҡдим яһай. Ҡыҙ ябай кеше булмауын, ә "нурҙан тыуған ҡыҙ бала" икәнен әйтә. Аҙаҡтан Һәүбән уның менән һыу аҫтына төшә, ҡыҙҙың исеме Нәркәс икәнен белә, ҡыҙ егеткә Аҡбуҙатты бүләк итә. Эпостың аҙағында ҡыҙ Һәүбәнде яратыуын һәм шуның өсөн генә уға буйһоноуын белдерә. Быға тиклем Нәркәс менән көс һынашырға теләүселәргә ҡыҙ йөҙөн асыу була, уларҙың барыһы ла уның нурҙарынан һуҡырға әйләнә.

Шулай итеп, "Аҡбуҙат" эпосында аныҡ әйтелә: өйрәк-Нәркәс нурҙан һәм уттан яралған, ул үҙе лә яҡтылыҡ сығанағы булып тора, алтын сәстәре - ҡояш һәм уның нурҙары символы. Фольклорсыларҙың "Аҡбуҙат"ты "Урал батыр" эпосының тематик һәм логик дауамы итеп ҡарауын иҫәпкә алһаҡ, нурҙан ҡойолған өйрәк - Нәркәс матур ҡаурыйлы ҡош - Айһылыуға тиң. Икеһе лә күк есемдәрен кәүҙәләндерә, беренсеһе - айҙы, икенсеһе - ҡояшты.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

*ТӘҮБӘ*

# ИҪЕРЕККӘ СӘЛӘМ БИРМӘ,

## сәләм бирһәң, сәм алма

**Араҡынан күргән ыҙаларымды яҙып үтәйем әле. Миңә генә ҡағылып, башҡаларҙы урап үтһен ине ул хәшәрәт. Шешәбикә менән дуҫлашыуым әсәйемә, ғаиләмә, туғандарыма, дуҫтарыма күпме ҡайғы килтерҙе.**



Бигерәк тә Өфөгә күсеп килгәс ауырға тура килде. Араҡы ҡоло булып, эшһеҙ аптырап йөрөгән саҡтарҙы һаман да тетрәнеп иҫкә алам. Башта дуҫтар ярҙам итергә тырышып ҡараны, килеп сыҡманы. Бөгөн һәр кем башта үҙен ҡайғырта, шунһыҙ мөмкин дә түгел. Ул саҡтарҙағы араҡы шауҡымы ғаиләгә тарҡалыуына тиклем алып барып еткерҙе. Иҫкә төшһә, әле лә тәнем зымбырлап, йөрәгем сәнсеп ҡуя. Бигерәк тә ике баланың йүнле кейеме булмауы үҙәккә үтә ине. Аҙыҡты ҡатыным эшенән алып ҡайтырға тырыша, аҡса тигән әйберҙе бик һирәк күрә инек. Ул саҡта атайым тере ине әле. Улы өсөн бигерәк тә ул ҡайғырҙы. Атайымдан, ҡәйнәмдән ярҙам булмаһа, упҡын ситенән тәгәрәүгә күп ҡалмағайны, шикелле. Туғандар ҙа ярҙам ҡулы һуҙҙы. Ауылда йәшәгән апай менән еҙнәй, үҙҙәренең биш балаһынан арттырып, беҙҙең балалар өсөн кейем, картуф, ит ебәреп торҙо. Ярай әле ул саҡта балалар бәләкәй ине, уны-быны аңламайҙар, өлкән туғандарынан ҡалған кейемде кейеп үҫтеләр. Минең унда-бында эшләп тапҡан аҡсам араҡынан артманы.

Шулай бер көн эштән ҡайтыуға өй бушаған, ҡатыным арлы-бирле әйберҙәрен төйнәп, балаларҙы етәкләп, апаһына күсенеп киткән...

Бер ай самаһы илке-һалҡы йөрөгәндән һуң, башың эшләмәгәс, ҡулың эшләһен, тип, "шабашник" булып киттем. Иң мөһиме, мин эсеүҙе бөтөнләй ташларға ҡарар иттем. Айыҡ тормошҡа аяҡ баҫҡас, кеҫәлә аҡса күренә башланы, элек күрмәмешкә һалышып үтеп киткән таныштар һаҡ ҡына һаулыҡ һораша башланы. Ҡатын да кире ҡайтты. Эштәр яйға һалынды, тип, ҡунаҡҡа барғанда ғына яңынан рюмка тота башланым. Тик шунһын белмәгәнмен: араҡы менән тәмәкене ҡайҙа ташлайһың, шул урындан яңынан күтәреп алып китәһең икән... Ярай әле, йылға яҡын эсмәй йөрөгән арала айыҡ тормоштоң яҡшы яҡтарын татып, күңелемә һеңдереп өлгөргәйнем. Таныш әбейгә йүгереп тигәндәй барып, яңынан ике йылға тәүбә ҡылдым. Шулай ике йыл үтте, артабан йылдар йылға йәбешеп, ғүмер алға китеп бара.

Тормошта һәр кеше үҙенең эшләнгән эшенә, ҡылығына үҙен аҡларҙай сәбәп таба белә. Эскеселәрҙең аңы был йүнәлештә уғата шәп эшләй. Әле бына тәүбәгә килеп, яҙып ултырам да, әммә эскелек арҡаһында күргәндәрҙең аяныслығын һөйләп тә, яҙып та аңлатып булмайҙыр, тигән фекергә киләм. Бахмурҙан сыға алмай хәл бөткәс, наркология диспансерында ла ятып сығырға тура килде бит хатта. Туғандар таныш табиптар менән һөйләшеп килешкәс, үҙ иркем менән барҙым. Башта ҡурҡыныс түгел ине, бөтә мәхшәр өс көндән һуң башланды. Күрше бүлмәләрҙә йәш кенә егеттәр наркоманлыҡтан дауалана. Аҡсаһы түләнгәс ни, уларҙың һәр береһен телевизоры, һыуытҡысы булған айырым палатаға урынлаштырғандар, теләгән ваҡыттарында ашарҙарына килтереп торалар. Тәү ҡарамаҡҡа, һап-һау әзмәүерҙәй ирҙәр, эштән арып, санаторийҙа ял итеп ята, тип уйларһың. Тик бикле ишектәр, һаҡсы менән саф һауала йөрөүҙәр генә үҙеңдең ҡайҙа эләккәнеңде иҫкә төшөрә. Ул егеттәрҙең эсендә ниндәй уйҙар ҡайнағанын улар үҙҙәре генә беләләр инде. Шул саҡта бөтөн донъя һинә ҡаршы һәм һинең ауырыуыңа ғәйепле һымаҡ тойола.

Айыҡ тормош өсөн көрәшеү кешенән күп көс талап итә. Бигерәк тә бөгөнгө көндә. Киноларҙа, телевидениела бит хәҙер күп кешеләрҙең эсеп тә, бай, һәйбәт йәшәүен йыш күрһәтәләр. Йәштәр уны шулай булырға тейеш һымаҡ ҡабул итә. Урам буйлап һыра тотоп йөрөүсе йәштәрҙе күреп йәлләйем. Был ғәҙәт модаға инеп бара инде, бугай. Ул йәштәрҙең күбеһе уҡып, һөнәр алыу урынына физик эштә йөрөүҙе хуп күрә. Сығып булмай торған ҡуласаға эләгә түгелме ундайҙар? Юғары уҡыу йорттарына, техникумдарға инә алмағандар өсөн төрлө курстар, һөнәрселек училищелары бар ҙаһа. Һөнәрле кешегә һәр саҡ ҡулай эш табыла. Башҡаларҙың уңышына көнләшмәй, ҡыуанып, сәмләнеп йәшәр саҡта, ваҡыттары заяға үтмәһен ине.

Йөҙөн тултырып үлгән олатайымдың әйткәне ҡолағымда әле лә сыңлай кеүек:

*Иҫереккә сәләм бирмә,*
*Сәләм бирһәң, сәм алма.*
*Аңа яҡшылыҡ итмә,*
*Андин яҡшылыҡ көтмә.*

Аҡыл өйрәтә был, тип уйламағыҙ, фәһем булһын тип яҙам. Йөҙйәшәр ҡарт белмәй әйтмәгәндер.

**Сәми ҒӘББӘСОВ.**

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Тағы бер гәзит уҡыусыбыҙ эскелектән арыныуҙың ошондай юлын тәҡдим итә. Ышанһағыҙ - ышанығыҙ, ышанмаһағыҙ - юҡ. Әммә ошо кәңәште ир-егеттәр мыйығына урап ҡуйһын ине: "Әгәр ҙә эсеүҙе ташларға үҙегеҙ теләмәһәгеҙ, һеҙгә бер кем дә ярҙам итә алмай - өшкөрөүҙең дә, үлән төнәтмәләренең дә, бал ҡортонан елкәгеҙҙе саҡтырыуҙың да файҙаһы юҡ. Гипноз да, нарколог та, һаулыҡ һаҡлау министры ла ярҙам итә алмай. Хәҙер элекке кеүек көсләп дауалау ҙа юҡ. Азатлыҡ! Аҡсаң булһа, миңә тиһә, ниңә араҡы менән ҡойонмағанһың, һөйөклө бисәңдән башҡа берәү ҙә бер һүҙ әйтмәҫ.**

**Эсеүҙе ташларға уйлаһаң, дарыуға аҡса сарыф итеп торма - бигерәк ҡиммәт улар хәҙер. Беләһегеҙме, дарыуҙарға ҡарағанда ла көслөрәк бер сара бар. Ул миңә ярҙам итте. Билләһи. Ул... үҙегеҙҙең кесе ярау. Ысын!**

**Кәңәшем шул: кеҫәгеҙҙә йыйылмалы стакан алып йөрөгөҙ. Ғәҙәт буйынса, иҫерткес эскегеҙ килә башлаһа, кеше күрмәгән урынға ышыҡланып ҡына үҙегеҙҙән сыҡҡан шыйыҡсаны стаканға бушатығыҙ ҙа - һоп! Иманым камил, шунда уҡ эсеү теләгегеҙ юҡҡа сығасаҡ. Теләк тә юҡҡа сыға, табиптар әйтеүенсә, һейҙектең һаулыҡҡа ла файҙаһы бар.**

**Әгәр ҙә эсергә ерәнһәң, уны араҡы йә шарап, һис юғы, самогон тип күҙ алдына килтер. Ҡыҫҡаһы, башыңды эшләт, тик был турала ләм-мим - берәү ҙә белмәһен дә, һиҙмәһен дә. Шым ғына эсеп тик йөрө, һөҙөмтәһе оҙаҡ көттөрмәҫ. Бер айҙан араҡыға ғына түгел, һыраға ла әйләнеп тә ҡарамаҫһың - быны мин үҙ тәжрибәмдән сығып әйтәм".**

✓ Әйткәндәй, Владимир Мединский 1948 йылдан күтәрелә башлаған темаға - бөйөк хәрби етәксегә Рәсәй Геройы исемен биреү мәсьәләһенә кире әйләнеп ҡайтырға тәҡдим итте. Республика Башлығы был инициативаны раҫланы.



БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

**Ҡырмыҫҡалы районының Шайморатов ауылында 112-се (16-сы гвардия) Башҡорт кавалерия дивизияһының легендар командиры генерал-майор Миңлегәле Шайморатовҡа һәйкәл асылыуы - әле йәшәгән дәүеребеҙҙең генә түгел, тарихыбыҙҙың иң мөһим ваҡиғаларының береһе булып иҫәпләнергә лайыҡлы. Ул Башҡортостан Башлығы гранты, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте һәм халыҡтан йыйылған сараларға төҙөлдө. Билдәле Рәсәй скульпторы Денис Стритовичтың иждад емеше Рәсәйҙә һуңғы ике йылда асылған Хәрби Дан мемориалдарының 40-ынсыһы. "Был һәйкәл тотош ил күләменән ҡарағанда артыҡ ҙур булмаһа ла, әһәмиәте буйынса бөләкәй түгел", - тине тантанала ҡатнашыусы Рәсәй мәҙәниәт министры, Рәсәй хәрби-тарихи йәмғиәте рәйесе Владимир Мединский.**

# САЛАУАТҠА ТИҢ БАТЫР УЛ -

## Шайморатов генерал!



*Хөрмәтулла Үтәшев генерал Шайморатов образында. Моразым Мөхәмәтов фотоһы.*

Ҡасандыр үҙе лә ошо дивизияла һуғышҡан шағир Ҡадир Даян һүҙҙәренә мәшһүр композиторыбыҙ Заһир Исмәғилев яҙған "Шайморатов генерал" йырын нисә быуын йырлап үҫһә лә, был бөйөк хәрби командир тураһында нимә беләһең, тип һораһаң, унын 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының командиры булыуынан тыш, бер кем дә әллә ниндәй мәғлүмәт бирә алмаҫ, моғайын. Халыҡ хәтерендә ҙур батыр булараҡ уйылып ҡалған Шайморатов генералды Салауатҡа тиңләргә булыр ине. Уның исеме, командирлыҡ һәләте Совет Армияһында легендалар тыуҙырған. Шайморатов етәкселегендәге дивизия Украинаны фашист илбаҫарҙарын азат итеүҙә ҡыйыулыҡ күрһәткәне өсөн Черниговисеменә лә лайыҡ була. Хатта үҙе һәләк булған рейдта ла уратып алған дошман ҡыҫымынан 7-се кавалерия корпусын алып сығыуға өлгәшеп, үҙен иң талантлы командир икәнен тағы бер тапҡыр раҫлай. Әгәр ҙә үҙенән өҫтә торған командирҙың бойороғо булмаһа, был операция ла уңышлы тамамланыр ине лә бит, тик батырға яҙмыш әҙерләгән икенсе һынауҙы үтергә кәрәк булған, күрәһең.

- Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығы унайынан легендар генералға һәйкәл асыуҙа ҡатнашыу минең өсөн ҙур хөрмәт. Һуңғы мәлдә беҙҙең атайҙарҙың, олатайҙарҙың ҡаһарманлығын шик аҫтына ҡуйыусылар йыш осрай. Шайморатов дивизияһының тарихына ла ҡара биттәр өҫтәргә теләүселәр юҡ түгел. Шундай кешеләр үҙҙәренә бер генә һорау бирһен ине: ә һин генерал Шайморатов урынында булһаң, нимә эшләр инең? Ул Манштейн ғәскәре тарафынан ҡамауҙа ҡалған башлыса ҡоралһыҙ, аҙыҡһыҙ атлы дивизия менән, бойороҡто үтәп, дошман ҡурғаулын әҙәүгә өлгәшә. Үҙ ғүмеренең хаҡы менән атлыларҙың күп өлөшөн ҡотҡара. Командирҙары һәләк булғандан һуң дивизия Шайморатов дивизияһы тип атала башлай һәм "Шайморатовсылар, алға!" тигән хәрби оран менән Еңеүгә тиклем һуғыша. Тап ошо дивизия Тыуған илгә 5 Дан орденының тулы кавалерҙары һәм 78 Советтар Союзы Геройын бирә. Был Советтар Союзының бер генә дивизияһы тарихында ла юҡ. 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы батырҙар һаны буйынса абсолют алдынғылыҡта, сөнки ул үҙ теләге менән һуғышҡа китергә теләүселәрҙән төҙөлгән, генерал Шайморатов уларҙы башҡорт ерендә йыйған, - тине Владимир Мединский үҙенең сығышында бөйөк генерал шәхесенә ҡарата ихтирамын белдереп. - Был һәйкәлгә ҡарап, беҙҙең балаларыбыҙ унан өлгө алһын ине. Шайморатов бик белемле булған, бер нисә сит телдә һөйләшкән, оҙаҡ йылдар хәрби разведкала эшләгән. Ул аҡыллы етәксе, хәрби зыялы, үҙ дивизияһының йәне булған...

Һәйкәл асыу тантанаһына Икенсе Донъя һуғышын ошо дивизия составында үтеүселәрҙең береһенең улы, Салауат ҡалаһында йәшәгән отставкалағы майор Әбүзәр Мирсаяпов та Шайморатовтың ғәҙел, һалдаттарға ҡарата изгелекле кеше булыуын телгә алды. "Атайым фин һуғышынан һуң 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһына эләгә. Командирын ҡыйыу, изге күнелле, бер кемгә насарлыҡ ҡылмаҫ шәхес итеп хәтергә ала ине. Бер ҡасан да һалдаттары ас, яланғас булманы, аттарҙы ла яҡшы итеп ҡарауҙы талап итә ине, тиер ине. Һәр йылдың 23 февралендә, Совет Армияһы көнөн билдәләгәндә, Миңлегәле Шайморатовтың һәләк булған көнө, тип уны иҫкә алды, уға Советтар Союзы Геройы исеме бирелер, тип аҙаҡҡы көндәренә тиклем ышанды", - тине Әбүзәр Йәһүҙә улы.

Әйткәндәй, Владимир Мединский 1948 йылдан күтәрелә башлаған темаға - бөйөк хәрби етәксегә Рәсәй Геройы исемен биреү мәсьәләһенә кире әйләнеп ҡайтырға тәҡдим итте. Республика Башлығы был инициативаны раҫланы һәм төбәк власталары адресына республика халҡынан бындай мөрәжәғәттәр килеүен дауам итеүе, бик күп ҡултамғалар йыйылыуы тураһында белдерҙе.

Кавалерия дивизияһы командиры генерал Шайморатовтың скульптураһы һыбай атта торасағы алдан уҡ хәл ителә. Ә һәйкәлдең эскизы күп тапҡыр үҙгәртелә. Скульптор Денис Стритович был проекты үҙ ғүмерендәге иң мөһим проекттарҙың береһе, тип иҫәпләй. Бронза һынды Мәскәүҙә ҡойолар. Өс тонналыҡ генералды эвакуаторҙа бишкөн алып ҡайталар. Машина туҡтаған һәр ерҙә урындағы халыҡ һәйкәлдең кемгә ҡуйыласағы менән ҡыҙыҡһына, шул рәүешле Шайморатов генералдың һыны оҙон юл буйына ерҙә тыныслыҡтан да ҡәҙерлерәк нәмә юҡлығын тағы бер хәтерҙәрҙә яңырта килә...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Халҡыбыҙҙың бөйөк улы Миңлегәле Шайморатовтың данлы дивизияһы Тыуған илдә тыныслыҡ урынлаштырыу өсөн Дондан Эльбаға тиклем меңәр саҡрым ер үтә. Шайморатовтың геройлығын оҙаҡ йылдар шик аҫтына ҡуйыусылар булһа ла, халыҡ үҙ батырын бер ваҡытта ла таптамаңы, бөгөн дә ул утта янмаҫ, һыуҙа батмаҫ милли батырыбыҙ булып күңелдәребеҙҙә йәшәүен дауам итә. 1943 йылдың февралендә Украинаның Дебальцево станцияһында ысынында нимә булыуы һәм ни өсөн данлыҡлы командир Советтар Союзы Геройы исеменә тәҡдим ителмәүенә лә бер аҙ аңлатмалар табылды, матур фильм да төшөрөлдө. Хәҙер килеп уға Рәсәй Геройы исеме лә бирелһә, батырыбыҙ иңенә төшкән ошо ябай булмаған һынауҙы ул үҙе лә, беҙ ҙә лайыҡлы үтә алдыҡ, тип тынысланыр инек. Был сараларҙы ошо изге юлдың башланғысы итеп ҡабул итәйек.**

**Ләйсән НАФИҠОВА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Балалар уйындары ла үҙгәрә. Г. В. Йосопов яҙыуынса, әлеге ваҡытта киң таралған уйын булып хоккейҙы хәтерләткән сәкән тора. Унда сәкән менән ҡоралланган ике команда уйынсы ағас шарҙы ике ялан ситендә ҡуйылған таяҡ йәки таш артына һуғып индерергә тырыша. Шулай уҡ соҡор туй йәки ҡаҙан уйыны ла киң таралған. Ул да сәкән ярҙамында уйнала. Уйынсылар бер-береһенән 1,5 - 2 метр алыҫлыҡта, үҙҙәренең соҡоро эргәһендә тора. Түңәрәк уртаһында ҙур соҡор - ҡаҙан. Уйынды алып барыусы шарҙы ҡаҙанға индерергә, ә башҡалар уға ҡамасауларға тырыша. Уйынсыларҙың береһе иғтибарын юғалтҡанда, уйынды алып барыусы үҙенең сәкәнен уның соҡорона ҡуйып, уйынсының урынын ала, ә асыҡ ауыҙ үҙе уйынды алып барыусы булып ҡала. Шар ҡаҙанға төшкән арала уйынсылар тиҙ генә урындар менән алмашырға тейеш. Был ваҡытта уйынды алып барыусы ниндәй ҙә булһа соҡорҙо алып ҡалырға тырыша. Соҡорһоҙ ҡалған уйынсы уйынды алып бара.

Билге йәки билге һаҡлау ергә ҡаҙап ҡуйылған таяҡҡа әйә булыуға ҡайтып ҡала. Уны һаҡлаусы, һөжүм итеүселәрҙе һәр төрлө кире ҡағырға тырыша. Кем таяҡҡа ҡағыла, шул кеше билге һаҡсыһы була, ә унан алдағы һаҡсы уйындан сыға.

Был уйын - Т. Г. Байышев әйтеүенсә, борон ололарҙың йыйын ваҡытында һәр яҡта 50-нән дә ашыу кеше ҡатнашҡан уйынын балаларҙың үҙҙәренә яраҡлаштырып алыуы ул.

Аҡтар-ҡыҙылдар уйынында уйынсылар ике төркөмгә бүленә. Һәр яҡтың үҙенең әләме була. Төркөмдәр бер-береһенең әләмен алырға тырыша. Шундай уҡ уйын байраҡ өсөн тип тә атала. Шулай уҡ башҡа уйындар ҙа бар, әммә улар бик киң таралмаған.

Башҡорт балаларының хәҙерге ваҡытта яратҡан уйыны булып волейбол һәм футбол тора.

Бай башҡорттар байрам иткән боронғо туйҙар үткәндә ҡалған. Ҡарғатуй, һабантуй кеүек халыҡ күнел асыуҙары , ҡайһы бер районларҙа һаҡланһа ла, улар яңы форма алған.

Г. В. Йосопов материалдары буйынса, ярыштарҙа ҡатнашыусыларға биреү өсөн бүләктәр халыҡтан йыйыла, әммә уларҙың ҙур өлөшөн колхоздар бирә. Байрам үҙе элекке кеүек үк ауылдан ситтә, майҙанда үтә. Унда ауылдың барса халҡы һәм күрше ауылдар халҡы ҡатнаша. Байрамса кейенгән йәштәр төркөм-төркөм булып гармун тартып, йырлап йөрөй, уйындар ойоштора, байрамса биҙәлгән аттарҙа йөрөй.

Беҙҙең көндәрҙә һабантуй - ул коллектив хеҙмәт һәм социалистик ер эшкәртеүҙең юғары уңышы байрамы. Шуға күрә уны байрам иткәндә башҡорт ауылының мәҙәни үҙгәреүе һөҙөмтәһе булған яңылыҡтар ҙа күҙәтелә. Боронғо ярыш уйындары менән бер рәттән күңел асыу программаһында волейбол, һикереү, велосипедтарҙа ярыш, колхоздың үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәре коллективтары сығышы индерелә.

Элекке күнел асыуға алмашҡа клубтарҙа һәм мәктәптәрҙә үҙешмәкәр сәнғәт түңәрәктәре барлыҡҡа килә. Улар спектаклдәр ҡуя, бейеүҙәр башҡара (**һүрәт**), йырсылар, ҡурайсылар, гармунсылар бар.



✓ *Саҙаҡаны ярлы, меҫкен хәленә төшкән кешегә генә һорау рөхсәт. Бер көн ашарлыҡ ризығы булған кешегә саҙаҡа һорарға ярамай. Әгәр мулла саҙаҡаны хаҡ ҡуйып һораһа, яҙыҡ эш ҡыла.*

# ЕҢЕЛЛЕК

## кеше хаҡына

**Бөгөн ислам дине йәмғиәтебеҙгә үтеп ингән, тиергә лә була. Уны ныҡлап өйрәнгән, төплө ғилем алған, яҡшы белгән һәм беҙгә аңлайышлы итеп өйрәтә алған кешеләр арта бара. Шундайҙарҙың береһе Илшат хәҙрәт Хафизи. Дин тәғлимәттәрен тотоп йәшәгән кешеләр булмаһаҡ та, әлбиттә, һәр кемебеҙҙең күңелендә Аллаһ бар һәм дини философияны ла ниндәйҙер кимәлдә аңлайбыҙ кеүек. Әммә Илшат хәҙрәт менән һөйләшкән ваҡытта мин үҙемде бер нәмә лә белмәйенсә дәрескә килеп ултырған бала хәлендә тойҙом. Быға ҡыҙыҡһындырған, әммә бер дин әһеленән дә ҡәнәғәтләнерлек яуап таба алмаған һорауҙарыма яуап алдым, төшөнөп етмәгәндәремде асыҡланым һәм әңгәмә ниндәй темаға ҡағылғанда ла сикләү тойманым. Уның бер генә рус һүҙе лә ҡушмайынса саф башҡортса һөйләшеүе, яҡшы үҫешкән телмәр эйәһе булыуы, фекерләү ҡеүәһенең юғарылығы һәм шул фекерҙе дөрөҫ системаға һалып тыңлаусыһына еткерә белеү һәләте аҡыл, аң күрһәткеселер тип уйлайым. Бына шундай ғилемле милләттәшебеҙ, Ишембай егете Илшат Хафизи "Дәғүәт" нәшриәте ойоштороп, башҡортса дини китаптар нәшер итеү менән шөғөлләнә бөгөн. Гәзит уҡыусыларыбыҙға хәҙрәт менән әңгәмәбеҙ ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайбыҙ.**

**▸ Күп осраҡта дин әһелдәренә үҙенде ҡыҙыҡһындырған һорауҙар яуҙыра башлаһаң: "Диндә төпсөшөргә ярамай", - тип тыялар. Ошонан сығып, әгәр ҙә аңларға, белергә теләк бар һәм Аллаһ кешене шулай аңлы итеп яралтҡан икән - ни өсөн ярамай?**

- Ярай. Дөрөҫ яуап бирмәгән, аңлатмаған дин әһелдәренең, тимәк, белеме лә сикле. Һорашыу ҙа, бәхәсләшеү ҙә, асыҡларға теләү ҙә тәбиғи, дингә килеү өсөн һин уны аңларға тейешһең. Бары тик "Ҡайҙа ул тамуҡ?", "Аллаһтың йөҙө нисек?", "Үлгәс, йән ҡайҙа була?" тигән кеүегерәк кеше аңы етмәҫ төшөнсәләргә генә тығылырға ярамай. Сөнки уларҙы һин бер ваҡытта ла белә һәм аңлай алмайһың. Был тәңгәлдә ысынлап та беҙҙең аҡыл сикле.

**▸ Бөгөн балаларҙы бәләкәйҙән дингә ылыҡтырыу күренеше тарала бара. Сабыйҙарҙың балалығын урлау түгелме бындай иртәлек? Дингә кеше аңлы рәүештә килергә тейеш түгелме ни?**

- Һәр ҡайһыбыҙға үҙ балаларыбыҙ ҡәҙерле. Тыуғас та бәпләп, һөйә-һөйә үҫтерәбеҙ, бысраҡтан, ауырыуҙарҙан, ямандан ҡурсалайбыҙ, уға яҡшыраҡ булһын тип тырышабыҙ. Ләкин үҫеп еткәс, шул балаларҙың береһе эскесе, икенсеһе наркоман, ә өсөнсөһө хаҡлы ялдағы әсәһенең пенсияһын ашап ятыусы бер булдыҡһыҙ әҙәм булып китергә мөмкин... Ата-әсә үҙ ғәзиз балаһына шундай яҙмыш теләгәнме ни? Әлбиттә, юҡ! Бер кеше лә үҙ балаһына бындайҙы теләмәй. Ләкин эскеселәр, наркомандар, енәйәтселәр айҙан төшмәй. Беҙ шул балаларҙы тыуҙырғанбыҙ, шундай итеп үҫтергәнбеҙ. Балалар - ата-әсәләренең көҙгөһө. Йүнле тәрбиә ала алмаған баланың ғәйебе ата-әсәһенекенән күберәк түгел. Алдағыны йәштән уйларға кәрәк. Ҡартлыҡ һәр ҡайһыбыҙға киләсәк. Беҙҙең өсөн доға ла ҡыла алмаған бала үҫтерһәк, ни үкенес булыр... Башҡа дингә күсеп, ҡәберенде лә белмәгән балаға әйләнһә?.. Юҡҡа ғынамы, халҡыбыҙ баланы бишектән тәрбиәләргә ҡушҡан. Шул бишектән алып мәсеткә йөрөтһәк, ғәйет намаҙҙарында, йома намаҙҙарына ҡатнаштырып күнектерһәк, бәләкәйҙән Аллаһтың барлығын һеңдерһәк, ҡайҙа йәшәүенә ҡарамаҫтан, улар диненә ныҡ булыр. Рухи яҡтан көслө кеше бер ҡасан да үҙ-үҙенә ҡул һалмаҫ, донъя ҡаршылыҡтарына бирешмәй көн итер. Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм: "Был дин бары тик изгелек дине", - тигән. Бала тәрбиәләүҙә булһынмы, тормош көтөүҙәме, сауҙаламы, идара итеүҙәме. Кешенең иң көслө инстинкттарын да тик дин генә йүгәнләй ала. Быға баһа бирмәй ҡалырға ярамай. Башҡа әмәл ҡалмағанда ғына мәсеткә барырға түгел, бәлки, ҡыйынлыҡтар булғансы уҡ үҙебеҙгә лә шул юлды тапауҙы онотторға ярамайҙыр.

**▸ Дин байлыҡҡа ынтылмаҫҡа, булғанына шөкөр итеп йәшәргә өндәй. Ә шул уҡ ваҡытта етеш йәшәүҙе лә хуплай. Быны нисек аңларға?**

- Халҡыбыҙҙа "байлыҡ - яуызлыҡ" тигән әйтем йәшәй. Ул һүҙҙәрҙә дөрөҫлөк күп. Бәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с) был турала хәҙисе бар: "Дөрөҫлөктә, һәр динар үә дирхәм үҙ хужаһын бысратып килеп (кеҫәһенә) керә". Әгәр кеше аҡса ҡоло була икән, был тапҡан байлыҡтан бары тик гонаһ ҡына була. Кешенең байлығы ҡулында булырға тейеш, ҡәлебендә түгел. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) ваҡытында бик бай сәхәбәләр булған, ләкин байлығы өсөн талашып, һуғышып йөрөмәгән. Хатта сит яҡтан килгәндәр хужаны эшселәрҙән айыра алмаған. Хәҙрәти Әбү Хәнифәне алайыҡ. Ул хәлифтең һарайын һатып алған булған. Күҙ алдына килтерегеҙ әле, Мәскәүҙәге Кремлде һатып алып, унда йәшәгән сауҙагәрҙе... Ләкин ул бер ҡасан да маһайып йөрөмәгән, башҡаларҙан айырылып та тормаған, көндәр буйы халыҡты дингә уҡытҡан, сауаптар эшләргә ашыҡҡан.

Хәҙерге заманда кеше аҡсаһын юғалтһа, йәне сыға яҙа, ә мәсеткә йома намаҙына бара алмағанына бошонмай. Шулай булғас, нимә ҡәҙерлерәк ул әҙәмгә: Аллаһы Тәғәләме, әллә малмы? "Кеше үҙ ата-әсәһенә, балаларына ҡарағанда ла Бәйғәмбәребеҙҙе ныҡыраҡ яратмаһа, имандың ләззәтен татымаҫ", - тигән Бәйғәмбәребеҙ. Аллаһы Тәғәлә бар нәмәгә ҡарағанда ла ҡәҙерлерәк булһа, шул саҡта ғына кеше Раббыбыҙ алдында ҙур дәрәжәгә өлгәшкән булыр. Биш һумға ҡыйбатыраҡ торған хәләл тултырманы "ҡыйбатыраҡ" тип алмаған кешенең иманының дәрәжәһе лә шул саҡлы.

Мал тураһында Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) һоҡланып тағы ла шулай әйткән: "Ҡайһылай яҡшы, әгәр байлыҡ изге кешелә булһа!" Байлыҡта фәҡәт зыян ғына булһа, Бәйғәмбәребеҙ былай әйтмәҫ ине. Ысынлап та, әгәр байлыҡ булмаһа, мәсеттәр төҙөлмәҫ, китаптар сыҡмаҫ, уҡытыусылар уҡытмаҫ, ғөмүмән, диндең таралыуы ныҡ ауырлашыр ине. Бөтәһе лә "аҡсала зыян" тип эшләмәһә, илебеҙ, халҡыбыҙ артта ҡалыр, кешелек тәрәҡҡиәте (прогресы) туҡталыр ине. Юҡҡа ғына Ғәли (радыаллаһү ғәнһү): "Әгәр фәҡирлек кеше булһа, мин уны үлтерер инем", - тип әйтмәгәндер.

Быларҙан сығып, аҡсала файҙа ла, зыян да күп, тигән һығымта яһайбыҙ. Әгәр хәләл юл менән табылып, хәләл юлға тотонолһа - хәйерле, йүнһеҙ юл менән табылып, йүнһеҙ урындарға тотонолһа - зыян. Шуны онотторға ярамай: харам аҡсалар бәрәкәтле булмай. Кешене ҡыйырһытып табылған мал - ҙур бәлә-ҡазаларҙың башы.

*Мал тураһында Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) һоҡланып тағы ла шулай әйткән: "Ҡайһылай яҡшы, әгәр байлыҡ изге кешелә булһа!" Байлыҡта фәҡәт зыян ғына булһа, Бәйғәмбәребеҙ былай әйтмәҫ ине. Ысынлап та, әгәр байлыҡ булмаһа, мәсеттәр төҙөлмәҫ, китаптар сыҡмаҫ, уҡытыусылар уҡытмаҫ, ғөмүмән, диндең таралыуы ныҡ ауырлашыр ине. Бөтәһе лә "аҡсала зыян" тип эшләмәһә, илебеҙ, халҡыбыҙ артта ҡалыр, кешелек тәрәҡҡиәте (прогресы) туҡталыр ине. Юҡҡа ғына Ғәли (радыаллаһү ғәнһү): "Әгәр фәҡирлек кеше булһа, мин уны үлтерер инем", - тип әйтмәгәндер. Быларҙан сығып, аҡсала файҙа ла, зыян да күп, тигән һығымта яһайбыҙ. Әгәр хәләл юл менән табылып, хәләл юлға тотонолһа - хәйерле, йүнһеҙ юл менән табылып, йүнһеҙ урындарға тотонолһа - зыян.*

**▸ Фән менән динде бергә бәйләүсе лә, шул уҡ ваҡытта уларҙа күп кенә айырмалар табыусы ла ғалимдар бар...**

- Донъя үҫешеү менән кеше диндән алыҫая төҫлө тойолһа ла, күп ғалимдарҙың үтә диндар булыуы тарихта мәғлүм. Күбеһе үҙенең асыштарын фәҡәт Аллаһы Тәғәлә ярҙамы менән генә яһауын фараз итә. Ньютондың башына алма төшкәс, үҙенең асышын эшләй. Әллә шундай уҡ алмалар башҡа кешеләрҙең башына төшмәгән тип уйлайһығыҙмы? Әлбиттә, һәр ғилем кешелек донъяһына ваҡыты еткәс кенә бирелә. Бер осорҙа баҡыр иретергә өйрәнгәндәр, ә икенсе осорҙа туҡыма эшләргә... Ул заман кешеләрен әлеге кешеләрҙән наҙаныраҡ тип әйтеү дөрөҫ булмаҫ. Платон, Аристотель, Птолемейҙарҙың хеҙмәттәрен әлеге заман кешеләренең күбеһе аңлай алмауы мөмкин, ләкин уларға компьютер технологияһы Аллаһ тарафынан бирелмәгән. Ә хәҙерге заман кешеһенә бирелгән. Күрәһең, ваҡыты еткән...

Хәҙерге заман кешеһен сит планетаға алып барып ҡалдырһаң, тимер рудаһын табып, эшкәртеп, үҙенә балта йәки бысаҡ эшләргә булдыра алыр инеме икән? Шикле...

Фән үҫешкән һайын, кешеләр күп тапҡыр дингә тәнҡит күҙлеге аша ҡараны. Төрлө теориялар булды. Динебеҙгә хилаф булғандары юҡҡа сыҡты. Ваҡыт үтеү менән тағы ла күберәк иҫбатлауҙар табылыр. Шуны ла онотмайыҡ, дингә килгән кешеләрҙең күбеһе ғилем эйәләре, интеллигенция вәкилдәре, сөнки һәр төрлө ғилем Аллаһтың барлығына ышандыра.

**▸ Күптәрҙең ауыҙынан "Мәсеткә йөрөй башланым, ләкин барыбер бәлә-ҡазалар бөтмәне, ни эшләргә?" тигәнде ишетергә мөмкин.**

- Бәлә-ҡазалар ике юл менән бирелә. Береһе гонаһ ҡылғанға яуап итеп, икенсеһе имтиханһынау булып. Әгәр гонаһтар ҡылып йәшәгәнһең икән, тәүбәгә ҡайтып, Аллаһтан көнө-төнө ғәфү һорарға, мөмкин булған ҡәҙәре изгелектәр ҡылырға тырышырға кәрәк.

Әгәр мосолман булып, намаҙҙар ҙа ҡылаһың икән, был һынауҙар ҙа ике төрлө. Береһе ғәрәпсә "дарб" тип атала, "этәреү" тип тәржемә ителә. Бер бәлә-ҡаза биреп, Аллаһ изгелеккә этәрә. Мәҫәлән, ямғыр бирмәй һәм халыҡ күпләп ямғыр һорап, мәсеттәргә бара. Икенсеһе "рафғ", йәғни "күтәреү" тип тәржемә ителә. Бер һынау биреп, Аллаһ кешенең дәрәжәһен үҫтерә. Быларҙың ҡайһы береһе һеҙҙең үҙегеҙгә генә мәғлүм. Аллаһтың ғәфү итеүенә, рәхмәтенә өлгәшергә тырышырға кәрәк.

Аллаһы Тәғәлә Үҙе һөйгән бәндәһенә һынауҙар биреүе ихтимал. Бәйғәмбәребеҙҙең (с.ғ.с.) имам Әхмәд килтергән хәҙисендә: "Берәүгә Аллаһ сүбхәнәһү Тәғәлә ҙур дәрәжәләр бирергә булһа үә ул ғәмәлдәре менән быны булдыра алмаһа, уға тәнендә (йәғни сәләмәтлеге менән), малында (байлығын кәметеп) йәки балаларында (йәғни бала бәләләрен биреп) һынауҙар бирә. Уның өҫтәүенә сабырлыҡ биреп, был кеше һынауҙарға түҙә үә Аллаһ шул бөйөк дәрәжәләргә ирештерә". Шулай уҡ Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.): "Һәр ауырыу, ауырһыныу менән, хатта энәгә сәнселһәң дә, шулар сәбәпле Аллаһ бер гонаһыңды ғәфү итер", - тигән.

Шулай булғас, бәлә-ҡазаларға сабыр итеп йәшәй бирергә кәрәк, улар күберәк булған һайын, гонаһтарыбыҙ кәмей.

**▸ Ҡайһы бер мәсеттәрҙә йәки дини саралар алдынан хәҙрәттәр саҙаҡаның суммаһын әйтә. Был дөрөҫмө?**

- Саҙаҡаны ярлы, меҫкен хәленә төшкән кешегә генә һорау рөхсәт. Бер көн ашарлыҡ ризығы булған кешегә саҙаҡа һорарға ярамай. Әгәр мулла саҙаҡаны хаҡ ҡуйып һораһа, яҙыҡ эш ҡыла. Ундайҙарҙы саҡырғансы, ихлас бабайҙы саҡырыу хәйерле булыр. Әгәр мәсеттең мәсруфаттарына (сығымдарына) үтә лә кәрәк икән, ярҙам кәрәклеге хаҡында халыҡҡа иғлан итергә була. Ул рәсми рәүештә ҡылынырға һәм мәсеттә теркәлеп йыйылырға тейеш. Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с) тап шулай эшләгән, минбәрҙән тороп иғлан итә торған булған. Хаҡ ҡуйыу дөрөҫ түгел, бындай хәҙрәттәрҙе тыйырға кәрәк.

**▸ Дин тотоу еңел эш түгел, биш намаҙ һәм башҡа тәғлимәттәргә ваҡыт та, күңел көсө лә талап ителә. Уны нисек тә еңелләштереү, заманға ҡулайлаштырыу юлдары ҡаралмағанмы?**

- Халҡыбыҙҙы дингә саҡырһаң, Исламды аңлата башлаһаң, тиҙ генә ситләшергә әҙер тора. Ҡайһыһы динде терроризм менән бәйләп ҡото оса, ҡайһылары ауырлығынан ҡурҡа. Намаҙ уҡырға кәрәк, тәһәрәт алырға, ураҙа тоторға... Төрлөһө төрлө сәбәп таба. Дөрөҫ, дин тотоуы ауыр. Ләкин кем ауырлыҡ күрмәйенсә, берәй хәйерле ни-

***✓ Зыярат ҡылыу рөхсәт ителә, тауаф ҡылыу ярамай. Йәғни һин зыяратта бер ниндәй ҙә йола атҡарырға тейеш түгелһең. Ҡәберҙә ятҡан кеше йәне аша нимәләр һорама, унан өмөт итмә, ә уның исеменә доғалар бағышла, Аллаһынан һора.***



мәгә тарығаны бар? Яҡшы эштә эшләйем тиһәң, мәктәптә 11 йыл тырышып яҡшы уҡырға кәрәк. Һуңынан, көс түгеп, университетҡа уҡырға инергә, унда ла ныҡышмалы рәүештә 5-6 йыл уҡырға, аслы-туҡлы йәшәргә тура килә. Һуңынан да, хеҙмәт юлын башлағас, тырышып үҙеңде күрһәтмәһәң, яҡшы эшкә тәғәйенләмәйҙәр... Яҡшы тормош өсөн тиҫтәләгән йылдарыңды түгәһең.

Ә Аллаһы Тәғәләнең мәңгелек йәннәте утыҙ, ҡырҡ, илле йыл ғибәҙәт итеүгә тормаймы ни? Ә диндә булып, күңел тыныслығы табыу, хәйерле, тәрбиәле ефетең, балаларың, сәләмәтлегең? Уларҙың хаҡы аҙмы? Ошо оло маҡсат өсөн, ялҡаулыҡты, битарафлыҡты еңеп, дин юлына баҫһаҡ, аҙағы хәйерле булыр.

Кеше, гәзиттә, тормошта еңеллек эҙләй: еңелерәк донъя көтөүҙе, әҙерәк мәшәҡәт, күберәк аҡса табыуҙы. Әҙәм тәбиғәтендәге нәфсе ошо еңеллекте талап итә. Был бит ожмахтағы, йәннәттәге тормоштоң сифаты. Шулай итеп, кеше үҙ-үҙенә донъяла ожмах эшләмәксе. Ләкин быны ожмахта ғына табырға була. Әҙәмде лә бит шайтан тап ошо, еңеллек үәсүәсәһе менән алдай. "Ошо ағастың емешен ашаһағыҙ, фәрештә булаһығыҙ, мәңге йәннәттә ҡаласаҡһығыҙ", - ти. Ахырҙа, Аллаһы Тәғәлә уны йәннәттән ҡыуа. Кешенең нәфсеһе һәр ваҡыт еңеллеккә, рәхәтлеккә ынтыла, был уның тәбиғәтендә. Әммә еңеллек эҙләгәндә кеше хаҡына керергә, уны гонаһ арҡылы табырға ярамай, уны хәләл юлдар менән, тырышлыҡ аша ғына табырға мөмкин.

# ЭҘЛӘГӘНДӘ...

**ИНМӘ**



***Аллаһы Тәғәлә диндә яралтҡан һәм уның тәртибен, шәриғәтен билдәләгән. Һәр диндең бәйғәмбәре, хажы, Китабы, имамдары, шәриғәте булған. Коммунизмды ла шул уҡ рәүештә төҙөгәндәр. Уның шәриғәте итеп - партия ҡарарҙары, бәйғәмбәре итеп - Ленин, хаж ҡылыу урыны итеп - сәғәттәр буйы сират тороп мавзолейы, имамдары итеп иһә партия сәркәтибтәре һәм башҡалар тәғәйенләнгән. Дин схемаһы буйынса икенсе сәйәсәт төҙөп, уңышҡа ирешкәндәр. Әгәр был схема буйынса эшләнмәһә, совет хөкүмәте оҙаҡҡа бармаҫ, тиҙ арала халыҡ уның ялған икәнлеген аңлап биҙрәр ине. Миҫал өсөн диндә дәғүәт ҡылыусы кешеләр тураһында әйтелгән. Ҡөрьәндә, арағыҙҙа дингә саҡырып йөрөүселәр булһын, тиелә. Совет хөкүмәтендә лә был эште комсомолдар, партия хеҙмәткәрҙәре башҡарған.***

**Ниндәйҙер тәғлимәт тип әйтәйекме, системамы, айырым бер тәртиптә төҙөлә һәм уларҙың күптәре бер-береһенә ни яғы менәндер оҡшаш. Мәҫәлән, дин тәртибе менән коммунизм системаһы...**

- Аллаһы Тәғәлә диндә яралтҡан һәм уның тәртибен, шәриғәтен билдәләгән. Һәр диндең бәйғәмбәре, хажы, Китабы, имамдары, шәриғәте булған. Коммунизмды ла шул уҡ рәүештә төҙөгәндәр. Уның шәриғәте итеп - партия ҡарарҙары, бәйғәмбәре итеп - Ленин, хаж ҡылыу урыны итеп - сәғәттәр буйы сират тороп мавзолейы, имамдары итеп иһә партия сәркәтибтәре һәм башҡалар тәғәйенләнгән. Дин схемаһы буйынса икенсе сәйәсәт төҙөп, уңышҡа ирешкәндәр. Әгәр был схема буйынса эшләнмәһә, совет хөкүмәте оҙаҡҡа бармаҫ, тиҙ арала халыҡ уның ялған икәнлеген аңлап биҙрәр ине.

Миҫал өсөн диндә дәғүәт ҡылыусы кешеләр тураһында әйтелгән. Ҡөрьәндә, арағыҙҙа дингә саҡырып йөрөүселәр булһын, тиелә. Совет хөкүмәтендә лә был эште комсомолдар, партия хеҙмәткәрҙәре башҡарған. Һәр колхозда, завод-фабрикаларҙа, ойошмаларҙа парторг булды. Коммунизмды төрлө илдәргә таратыуҙар ҙа булды. Теләмәһәләр, йыһад һуғышын да асып ебәрҙеләр (Афғанстан, Вьетнам, Йәмән һ.б.).

Партия идеологияһын йәштән үк өйрәтеү өсөн дә күп көс һалдылар. Ҡулдан-ҡулға биреп, ыҫҡындырмайынса "дөрөҫ" тәрбиәләп, пионер, комсомол ойошмаларын булдырҙылар. Әлбиттә, дин булғас, саҙаҡаһы ла булырға тейеш. Был иһә взностар булды. Хатта мәктәптә уҡып йөрөгән баланан да ике тин взнос йыя торғайнылар. Эш кешеләре тураһында әйтәһе лә түгел.

Һәр диндә ғәҡидәне (иман белемен, идеологияны) өйрәнеү ҙур әһәмиәткә эйә булған кеүек, бында ла коммунистар алда булды. "Идеологически подкованный" тинеләр "иманы камил" булғандарын. Халҡыбыҙҙа бындайҙар әле лә туп-тулы. Әммә Аллаһы Тәғәлә: "Дөрөҫлөктә Аллаһ ҡаршында бер генә дин, ул да булһа Ислам дине", - тигән. Башҡа идеологиялар юҡ. Нисек кенә тырышһаҡ та, миллиондар түкһәк тә, башҡа дин булмаясаҡ. Аҡ ҡара булмаған кеүек, ялған бер ҡасан да дөрөҫ була алмаясаҡ.

**Ислам дине лә заманында ҡылыс һәм ҡан аша килгән. Ул үҙе лә шул уҡ власть, йәғни хакимлыҡ түгелме?**

- Киреһенсә, хакимлыҡтан ҡотолоу юлы. Исламда һин бер Аллаһтың ғына ҡоло. Дингә баҫып, үҙең өсөн шул асылды асаһ - һинән ирекле йән юҡ.

**90-сы йылдарҙа, мулла булмағанлыҡтан, ауылдарҙа никахтарҙы әбейҙәр уҡый ҙа ҡуя ине. Ҡатын-ҡыҙҙың никах уҡыуы дөрөҫмө икән?**

- Үкенескә ҡаршы, бындай никахтар дөрөҫ түгел. Бик тә бик булмағанда, ҡатын кеше әйтеп, ир кеше уны ҡабатлап барырға тейеш. Ҡатындар шулай уҡ йыназа, исем ҡушыу кеүек тәртиптәрҙе лә үтәй алмай. Уларға Ҡөрьән сығыу рөхсәт ителә. Әбей никахы менән йәшәгәндәргә никахтарын дөрөҫләтеп ҡуйыуҙы кәңәш итәм.

**Ә никах яңыртыу тигән төшөнсә нимә ул?**

- Никахты яңыртып булмай, ул бер тапҡыр ғына уҡыла. Ир кеше талаҡ әйтеп һәм талаҡҡа торошло "сығып кит", "йәшәргә теләмәйем" йәки "һинән китәм" кеүек һүҙҙәр әйтеп айырыла һәм өс ай ҡатыны менән яҡынлыҡҡа инмәй икән, шунда никах боҙола. Ә талаҡ әйтеп тә, бер нисә көндән кире ярашһа һәм яҡынлыҡҡа инһә - никах һаҡлана. Шулай уҡ закон нигеҙендә айырылышҡан ир менән ҡатын икенсегә өйләнер алдынан талаҡлап айырылырға ла тейеш. Юғиһә, уларҙың никахы һаман да тәүгеләре менән дауам итә һәм улар зина ҡыла булып иҫәпләнә.

**Изгеләр, әүлиәләр ҡәберенә йөрөүҙәр йышайҙы. Дин бындайҙы рөхсәт итәме?**

- Зыярат ҡылыу рөхсәт ителә, тауаф ҡылыу ярамай. Йәғни һин зыяратта бер ниндәй ҙә йола атҡарырға тейеш түгелһең. Ҡәберҙә ятҡан кеше йәне аша нимәләр һорама, унан өмөт итмә, ә уның исеменә доғалар бағышла, Аллаһынан һора.

**Исламда йырларға ярай йәки ярамай тигән бәхәстәргә лә асыҡ ҡына яуап юҡ...**

- Борон башҡорттар диндә булған һәм күңел һағыштарын баҫыу, эмоцияларын сығарыу өсөн йырлаған. Бындай йырлау тыйылмай. Бары йыр әҙәпһеҙ һәм ҡурҡыныс теләктәр генә уятмаһын.

**Балаларын һәм ғаиләләрен телевизорҙан, компьютерҙан бөтөнләй тыйған дини ғаиләләр бар. Шундай сикләүҙәр мотлаҡмы?**

- Мотлаҡ түгел, әммә сама белергә кәрәк. Беҙ, мәҫәлән, балаларыбыҙға күңелдәрен үҫтерерҙәй, яҡшылыҡҡа, изгелеккә өндәрҙәй мультфильмдарҙы ла, тапшырыуҙарҙы ла ҡаратабыҙ. Ә инде ҡайһы бер каналдарҙы бөтөнләй асыуҙан тыйғанбыҙ. Шулай уҡ донъя яңылыҡтары хаҡында ла белергә тейештәр. Йәшәйештән бөтөнләй айырылһалар, нисек итеп аңлы, белемле һөнәр эйәләре буласаҡтар һуң улар?

**Илшат хәҙрәт, ҡайһы ваҡыт ышаныс тыуҙырмаған муллалар, намыҫлы эшләмәгән, тупаҫ мөғәмәлә иткән дин әһелдәре осрай һәм күңелдә төшөрәләр. Улар менән нисек булырға?**

- Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.): "Диндең афәты өс: 1) боҙоҡ ғалим (мулла); 2) залим (йүнһеҙ) падишаһ, түрә, 3) наҙан (динен белмәгән) мөжтәһид", - тип киҫәтеп ҡалдырған. Шуларҙың беренсеһе: йүнһеҙ, боҙоҡ дин кешеһе. Әгәр бындай кеше мәсеттә мулла булып эшләһә, күптәр уны күрмәҫ өсөн булһа ла мәсеткә инмәй. Диндән хатта шайтан да йүнһеҙ муллаға ҡарағанда тиҙерәк биҙҙерә алмаҫ! Шуға ла Бәйғәмбәребеҙ (с.ғ.с.) быны ябай ауырлыҡ ҡына тимәгән, афәте тигән. Ләкин бөтөн муллалар ҙа бындай түгел, уларҙың күбеһе динебеҙ өсөн тырыша, халҡыбыҙҙың киләсәген, балаларын һаҡлап алып ҡалыуға көс һала. Дингә тәүләп аяҡ баҫҡанда мосолмандар менән һөйләшеп-кәңәшләшеп, белемле, дөрөҫ йүнәлеш биргәндәй остаз табырға тырышығыҙ. Ә инде тупаҫ муллаға иғтибар итмәгеҙ, уға яҙаһын Аллаһ үҙе бирәсәк.

**Һеҙ башҡортса дини китаптар нәшер итәһегеҙ. Дини әсбапты һәр дин әһеле яҙа аламы һәм был өлкә нәшриәтенең хәле нисек баһалана?**

- Мин баҫмаларымда дин буйынса төрлө аңлатыу эштәре алып барам, сүрәләрҙе анализлайым, ябай уҡыусы аңына барып етерлек телгә әйләндерәм. Беҙҙә дини нәшриәт эштәре бик аҡһай. Ғилемле, фәлсәфәүи фекерле кешеләр аҙ. Был өлкәлә Шамил һәм Илдар Әләүетдиновтар, Рәмил Йоносов, Мөхәммәт Басыр кеүек исемдәрҙе хуплап телгә алыр инем. Китаптарымды Ҡазан ҡалаһында баҫтырырға мәжбүрмен, сөнки унда нәшриәт хаҡы осһоҙораҡ килеп сыға. Миҫал өсөн генә әйтәм, Татарстанда "Хозур" дини китап нәшриәтенә хөкүмәттәре быйыл - 10, "Рәсәй" нәшриәтенә 18 миллион аҡса биргән. Тимәк, Татарстанда был йәһәттән ярҙам һиҙелерлек. Шуға ла дини китаптарҙың тик татарса булыуын аңлап була. Ә башҡортса дини китаптар бик аҙ, мин бына шул бушлыҡты тултырырға маташам да инде. Киләсәктә беҙҙә лә дини нәшриәткә етди иғтибар булыр, тип ышанам.

**Илшат хәҙрәт, һеҙҙең ғаилә хәлегеҙ хаҡында һорашырға яраймы?**

- Ә ниңә ярамаһын? Беҙ хәләл ефетем менән һигеҙ бала тәрбиәләйбеҙ һәм уларҙы хаҡ мосолман тәғлимәттәрендә үҫтереп, Аллаһ ярҙамы менән илебеҙгә, еребеҙгә файҙалы кешеләр итеп аяҡҡа баҫтырырға өмөт итәбеҙ.

**Гәзит уҡыусыларыбыҙға теләктәрегеҙ?**

- Ислам динендә көсләү юҡ, әммә өгөт бар. Эҙләгән бәхетте лә, йән тыныслығын да, хөрмәтте һәм өммәте лә ошо юлда табырға була икәнен һәр кем иҫтә тотһон ине.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ - Минең хәләл ефетем Өфөлә бит, - тине Ай бер аҙ уңайһыҙланып. - Миңә уларҙың иле, халҡы бик оҡшаны. Мин артабан шунда йәшәргә ҡарар иттем…***





## Ай

**Хәлил Һөйөндөков**

*Хикәйә*

Ҡатын-ҡыҙҙар үҙ-ара ни һөйләшкәнен, әлбиттә, ирҙәр белмәне һәм белергә лә тейеш түгел ине. Ә был ваҡытта Айбулат ҡыҙып-ҡыҙып үҙенең дуҫын тәнҡит утына тота ине. Ошоғаса буйҙаҡ йөрөгәне өсөн.

- Японка булһа ни?.. - тине ул һаман. - Ана ҡалай беҙҙең динебеҙгә лә, башҡортлоҡҡа ла ылығып, хөрмәт итеп тора. Бер-бер артлы башҡорт балалары тыуҙыра башлаһа, японка икәнен үҙе лә онотор, һин дә онотороһоң...

* * *

Никахҡа ҡыҙҙың ғына түгел, уның берәй ир туғанының да ризалығы булыуы мотлаҡлығын күҙ уңында тотоп, Япониянан Айҙың атаһын да саҡыртып алдылар. Иошико әфәнде, телефон аша саҡырылғас, ихлас күңелдән риза булды. Үҙе лә табип булараҡ, ҡыҙының "Рәсәйҙә хирургҡа тормошҡа сығырға ниәтләйем", тиеүенә айырыуса шатланды ул.

Никахты Салауаттың тыуған ауылы мәсетенә барып уҡытырға булдылар. Ауылға буласаҡ ҡатыны, ҡайныһы менән килеп төшкән Салауаттың ата-әсәһе ни алып, ни ҡуйырға белмәй тигәндәй йөрөнө. Үҙҙәре лә урыҫса таҡа-тоҡа һөйләшкән ауыл кешеләре булараҡ, урыҫ телен бөтөнләй белмәгән буласаҡ ҡоҙалары менән, әлбиттә, Айҙың тәржемәләүе ярҙамында ғына һөйләштеләр. Ифрат та алсаҡ булған был ике ғаилә бер-берeһенә йылмайыу аша ла яҡшы мөнәсәбәттәрен белдереүгә өлгәште. Телдәре төрлө булыу уларға һис тә ҡамасауламаған һымаҡ та булды хатта. Йәштәрҙең никахына шаһит һәм шаһиҙә булып, әлбиттә, "бола башлыҡтары" Айбулат менән Мәрйәм килде. Салауат ап-аҡ костюмда, шундай уҡ төҫтәге теүәтәйҙә ине. Ә Ай нәҡ Мәрйәм һымаҡ мосолман ҡатын-ҡыҙҙары кейемен хуп күрҙе. Күҙҙе сағылдырып емелдәп торған аҡ туҡыманан тегелгән шул кейемдә лә әхирәте һайлап алып бирешкәйне.

Мәсеттә байтаҡ ҡына туғандары йыйылды. Никах уҡыусы мулла йәштәрҙең, ҡыҙҙың атаһының ризалығын һорап алғас, Салауатҡа, кейәү егете булараҡ, ҡыҙға мәһәр биреү кәрәклеген дә әйтте. Егет паҡетҡа төрөлгән бер пачка "меңәрлек"тәрҙе өҫтәлгә сығарып һалды. Унан мулла Сабирхан ағай егет менән ҡыҙҙың ошо мәлдән алып бер-береһенә хәләл икәнлеген иғлан итте һәм иман, ғаилә бәхете, һаулыҡ һорап, оҙаҡ итеп Аллаһы Тәғәләгә доға ҡылды. Ир һәм ҡатындың һәр ғаиләлә булырға тейешле бурыстары хаҡында ла иҫкәртте...

Мәсеттән һуң Айбулаттың йәштәр ултырған машинаһы Салауаттың ата-әсәһенең өйө ҡаршыһына килеп туҡтаны. Машинанан төшөүенә, килендең аяҡ аҫтына ап-аҡ мендәр һалып, Салауаттың әсәһе ҡаршы алды. Бындайын да гүзәл йоланы үҙ ғүмерендә тәү тапҡыр күргән Ай таң ҡалды. Салауат уны етәкләп, өйҙөң эсенә ҡәҙәр түшәлгән матур йомшаҡ келәм буйлатып алып килде. Улар өйгә инеп киткәнсе, Салауаттың балалыҡ дуҫтары - ауылдың ҡурайсылары Ишмөхәмәт менән Фәнил башҡорт милли кейемендә ифрат та матур итеп "Урал" көйөн уйнап торҙо.

Ауыл оҫталарының йыр, бейеү кеүек матур уйындары менән туй бик күңелле үтте. Туй мәжлесе аҙағына етер мәлдә, был яҡтарҙа була торған "килен һөйөү" йолаһын да атҡарырға булдылар. Йәйҙең иң матур мәле. Көн салт аяҙ ине. Салауаттарҙың ихатаһының ҡап уртаһына йышылған таҡталар түшәлгән майҙансыҡҡа ултырғыс алып сығып, йәш киленде ултырттылар. Бындай йола хаҡында Салауат һөйләп тә өлгөрмәгән булғанға, килен башта, әлбиттә, бер ни ҙә аңламаны. Фәнил менән Ишмөхәмәт һағышлы итеп "Сеңләү" көйөн уйнап ебәрҙе. Унан башҡорт милли кейемендәге, ауыл мәҙәниәт йорто мөдире булып эшләгән Таңсулпан еңгә килен янына килде. Айҙың уң яурынбашына ҡулын һалып, ҡурайға ҡушылып, моңло итеп йырлай башланы.

*Әйҙә килен, киленсәк,*
*Булма улай оялсаҡ.*
*Әсәңдә һин ҡолонсаҡ,*
*Ҡәйнәңдә һин уйынсаҡ...*

Йыр тамамланыуға, ҡатын-ҡыҙҙар бер-бер артлы килеп, йәш киленгә изге теләктәр теләп, уға һәр төрлө бәләкәй генә бүләктәр бирҙе. Иңбашына ҡат-ҡат ябылған яулыҡтарға, муйынына эленгән мәрйендәргә, арзанлы ғына булһа ла, ысын күңелдән бирелгән һәр бүләккә, арҡаһынан йомшаҡ ҡына итеп тупылдатып һөйөүҙәргә балаларса шатланды Ай. Ошондай гүзәл башҡорт туйы хаҡында үҙенең диссертацияһында айырыуса күп итеп, матур итеп яҙасаҡ ул...

Иошико ҡоҙа йылы хушлашып, Өфө аэропортына юлланды. Стажировкаһы тамамланырға инде дүрт-биш аҙналай ғына ҡалған япон ҡыҙы Ай, шулай итеп, башҡорт килене булып китте. Йәш ҡатынды атаһы һалған яңы йортҡа алып ҡайтты Салауат. Башҡортса бер һүҙ ҙә аңламаған Ай, иренең ата-әсәһенең, туғандарының, ауылдаштарының үҙенә ҡарата булған шундай яҡшы мөнәсәбәтенә шатланып бөтә алманы. Ошо эскерһеҙ, ябай, ҡунаҡсыл халыҡтың телен ҡасан да булһа бер заман барыбер өйрәнеп алырға ҡарар итте.

* * *

Стажировкаһы тамамланып, Мәскәүгә диссертацияһын яҡларға киткән кәләшенә Салауат Өфөлә эш юлланы. Япон теле белгесе кәрәк урындарҙы табыу ҙа анһат булманы. Тик бер мәл Салауаттың бай ғына бер пациенты тел үҙәге - шәхси мәктәп асырға йыйыныуы хаҡында осраҡлы ғына әйткәйне.

- Инглиз, немец теле белгестәре буйынса проблема әллә ни юҡ, тик бына япон теле белгесе таба алмайым, - тине операциянан һуң йүнәлеп килгән Шамил Фәтих улы.

Салауат үҙенең хәләл ефете, буласаҡ тарих фәндәре кандидаты Ай хаҡында әйткәс, пациенттың йөҙҙәре яҡтырып китте.

- Бына бит, Хоҙай, бирәм тиһә ҡолона, сығарып ҡуйыр юлына. Былай булғас, Салауат ҡустым, мин һиңә өмөт итәм. Бөгөн үк шылтырат кәләшеңә...

Бала сағынан дини рухта тәрбиәләнмәгән Ай, башҡорт егете менән танышҡанға ҡәҙәре, ысынлап та, бер ҡасан да дин хаҡында уйланмай ине. Баштараҡ диссертация өсөн генә Ислам динен өйрәнә башлаған ҡыҙҙың йөрәге, ысынлап та, ошо хаҡ дингә ылыға башлағанын үҙе лә һиҙмәне. Кистәрен, үҙенең быуынына төшкән нәҫел ауырыуынан ҡотолдороуын үтенеп, илай-илай ысын күңелдән Аллаһҡа ялбара ине ул. Был хаҡта, әлбиттә, һис бер кемгә өндәшмәне, хатта Салауатҡа ла.

Мәскәү университетында оҙон еңле күлдәк кейгән, башына яулыҡ ябынған япон ҡыҙын күреп тәүҙә ғәжәпләнһәләр ҙә, тиҙ генә өйрәнеп тә киттеләр. Сөнки университетта башҡа Азия, Африка илдәренән килгән күп кенә ҡыҙҙар ҙа шундай кейемдә булғанғамы, быны ғәҙәти хәл итеп ҡабул иттеләр. Хәләл ефетенең Өфөлә эш табыуы хаҡында хәбәрен ишеткәс, Айҙың шатлығының иге-сиге булманы. Диссертация яҡлағандан һуң Башҡортостандың баш ҡалаһы мәктәптәренең береһендә япон теле уҡытырға китеү теләгән белдергәс, кафедралағы профессор-уҡытыусылар ифрат та ғәжәпләнде.

- Беҙ һине, уҡыу отличнигын, ошо кафедрала уҡытыусы итеп ҡалдырырға ниәтләй инек, - тине профессор Чуйкин. - Мәктәпкә ни, ябай уҡытыусы табырҙар ине әле...

- Минең хәләл ефетем Өфөлә бит, - тине Ай бер аҙ уңайһыҙланып. - Ирем ҡайҙа, мин шунда булырға тейеш. Ул - хирург.

- Үҙе килһен Мәскәүгә. Хирургка бында ла эш табылыр.

- Рәхмәт, - тине Ай әҙәпле генә. - Миңә уларҙың иле, халҡы бик оҡшаны. Мин артабан шунда йәшәргә ҡарар иттем...

* * *

Шамил Фәтих улы асҡан мәктәптә япон теле яңы йылдан һуң ғына уҡытыла башланы. Сөнки Айҙың диссертация яҡлап бөтөрөп, Мәскәүҙән килеп етеүен көттөләр. Баштараҡ Ай Иошико ҡыҙына нисегерәк итеп өндәшергә ҡыйынһынған коллегалары, һуңынан уны тик исеме менән генә атай торған булып киттеләр. Шамил Фәтих улының кәңәше буйынса, балаларға ул үҙен "Ай апай" тип әйтергә ҡушты. Эсендә нисәндәй генә ҡайғы-хәсрәте булған хәлдә лә һәр саҡ кешеләргә йылмайыу бүләк итеү һәләте булған был уҡытыусыны балалар ҙа, коллегалары ла бик оҡшатты. Японсанан бөтөнләйгә икенсе һүҙҙе аңлатыуына ҡарамаҫтан, "Ай" исеме есеменә тап килгән һымаҡ ине уның.

- Салауат, - тине бер кис бер аҙ бойоҡ тойолған Ай хәләл ефетенә, - мин ауырлы буғай...

- Шулаймы?.. - әле генә эштән ҡайтҡан ире бер аҙ ҡаушап төшкәндәй булды, унан ашап ултырған еренән тороп, ҡаршыһында ултырған ҡатынан барып ҡосаҡлап алды. - Ысынмы, йәнем?

- Эйе, бөгөн клиникаға барып тест үткәрттерҙем.

- Был бит бик шатлыҡлы ваҡиға! Ни өсөн үҙең шундай бойоҡ?

- Өләсәйҙәрем, әсәйем тағы иҫкә төштө. Улар менән булған хәл минең менән дә ҡабатланыр һымаҡ...

- Улай булмаҫ, иншаллаһ. Алланан һорайыҡ, доға ҡылайыҡ...

- Мин инде күпме ваҡыттар тик Уға ғына ялбарам. Малай тыуыуын һорайым.

- Малай?..

- Эйе, малай. Элегерәк һиңә әйткәйнем дә шикелле, Токионың радиология һәм генетика кафедраһы ғалимдары беҙҙең нәҫелдә малай донъяға килеү шул быуындан-быуынға күсеп килгән сиребеҙҙең бөтөүе хаҡында күрһәткес булырын фаразлағайны. Өс айҙан һуң УЗИ-ға килергә ҡуштылар...

Ике йәш йөрәктең ҡурҡыу һәм өмөт араһында көндәре үтә торҙо. Буласаҡ УЗИ диагностикаһы көнөн календарға билдәләп тә ҡуйғайнылар.

- Һис шикһеҙ, бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт ғәләйһиссәләм исемен бирербеҙ, - тине бер көн буласаҡ атай хәләл ефетененең еңелсә генә беленеп килгән ҡорһағына ҡулын һалып. - Ер йөҙөндәге иң гүзәл исем...

- Аллаһы Тәғәлә әллә ҡасан уҡ барлыҡ кешелек өсөн яҙып ҡуйған тәҡдиргә исем бер нисек тә тәьҫир итә алмай ҙабаһа!..

- Хаҡ һүҙ, - тип ҡосаҡлап алды ир ҡатынын. - Әммә һәр исем матур булырға тейеш. Ысын күңел менән, көнө-төнө мин ошо хаҡта Аллаһы Тәғәләгә ялбарасаҡмын.

Хәҙер инде үҙен Ислам динендә итеп тойған мөслимә Ай ҙа шундай теләк менән янды, Раббыға доғалар ҡылды. Беренсенән, үҙенең нәҫелендәге быуындан-быуынға күсеп килгән яман сирҙән ҡотолдороуын һораһа, икенсенән, Хоҙай Тәғәләнән бөтә халыҡтарҙы иманлы итеүен үтенде. Кешеләргә Хиросима, Нагасаки, Чернобыль һәм Фукусималағы һымаҡ бәлә-ҡазаларҙы башҡаса бер ҡасан да күрһәтмәүен һораны. Ҡорһағында әле генә яралып килгән бәләкәс йәндең малай булыуын бик-бик теләне. Тәнендә малай яралыу - уның нәҫел сиренең бөтөүен аңлатасаҡ бит!..

...Күҙ йәштәрен тыя алмай, битен ҡаплап, диагностика клиникаһынан шәп-шәп атлап сығып килгән хәләл ефетенә ҡаршы йүгерҙе Салауат.

- Йә, нисек?.. - тип һораны ул үтә ныҡ тулҡынланып. - Йә, йәнем, әйтә һал!

- Мө-хәм-мәт!.. - тип өҙә-өҙә көскә өйтеп бөтөрҙө шатлығынан күҙҙәренән йылғалай йәштәре аҡҡан Ай.

- Мөхәммәт! - тип ҡабатланы Салауат. Үҙен ошо Ер йөҙөндә иң бәхетле кеше итеп тойған буласаҡ атай, берәй ерен имгәтеп ҡуймайым, тип ҡурҡҡандай, ҡатынын һаҡ ҡына ҡосаҡлап алды.

**(Аҙағы. Башы 34-37-се һандарҙа).**

✓ ***Беҙҙең ғүмерҙә лә, көнитмешебеҙҙә лә шундай мәлдәр, ҡаты һынауҙар булып тора. Инде һуңғы мөмкинлектәр тамам, тәҡдирем шулайҙыр, тип төшөнкөләккә бирелгәндә лә бар ул беҙҙең кесә төбөндә һаҡланып ҡалған бер шырпы бөртөгө.***



*ЙӘШТӘР ҠОРО*

**Был өс ижадсы ла тамашасыға, уҡыусыға яҡшы таныштыр, тигән өмөттәбеҙ. Уларҙың ниндәй өлкәлә, ниндәй кимәлдә ижад итеүе лә билдәлелер. Был юлы ижади эшмәкәрлектәре тураһында һөйләп тормайынса ғына, уларҙың "Һеҙҙе бөгөн иң борсоғаны ни?" тигән һорауға яуаптарын ғына ишеттермәксе булдыҡ.**

# ИҢ БОРСОҒАНЫ ШУЛ...



***Алмас ШАММАСОВ,*** *шағир, журналист, Башҡортостан Республикаһы Башлығы референты:*

Беҙ бик ҡыҙыҡ заманда йәшәйбеҙ. Үҙем тарих фәнен яратҡан һәм ихтирам иткән кеше булараҡ, шуны әйтә алам: донъя тарихында ла, илебеҙ тарихында ла әлеге заман менән тулыһынса сағыштырырлыҡ осорҙо осратҡаным булманы. Әлбиттә, ниндәйҙер бер күренештәре менән хәҙерге Рәсәйебеҙ батша замандарын да, совет осорон да, капиталистик илдәрҙе көрсөк йылдарын да, 60-70-се йылдарҙағы Европа илдәрен дә, хатта Салтыков-Щедрин һәм Франц Кафка әҫәрҙәрендәге ваҡиғаларҙы хәтерләтеп ҡуя. Был тәбиғи ҙә. Сөнки үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап беҙ ҡиблабыҙҙы таба алмай, һаман йә тегендә, йә бында төртөлөп, бәрелеп-һуғылып йөрөй бирәбеҙ. Был юлдың һаман осо-ҡырыйы ла күренмәй. Әлеге көндәр Горькийҙың "Клим Самгин тормошо" романын ныҡ хәтерләтә. Ундағы бәрелеп-һуғылыуҙар ни менән тамамланғанын уҡыусы яҡшы беләләр.

Мине бөгөн иң ҡурҡытҡан нәмәләр - ул битарафлыҡ һәм эгоизм. Тап бына ошо ике нәмә бөтә кешелектә генә түгел, Ер шарындағы барлыҡ тереклектә юҡҡа сығарыуы мөмкин. Бер ниндәй атом бомбалары ла кәрәкмәй, кешеләр тик битараф һәм эгоист ҡына булһын, бер-береһен ҡырып, бер-береһенең ҡырылыуын ситтән йәшенеп кенә күҙәтеүҙәре лә етә.

Кеше нимәнән башлана? Кеше, минеңсә, икенсе тере йәндең күңел әрнеүен, барлыҡ кешелектең бер туған булыуын аңлауҙан, ғәҙелһеҙлеккә һәм яуызлыҡҡа нәфрәт тойғоһонан башлана. Был мәңгелек закондар. Ул законларға Бөйөк Еңеүҙе яулаған ата-бабаларыбыҙ, әсә-өләсәйҙәребеҙ тоғро булған. Ә беҙ уларҙы оноттоҡ. Күптәр тик үҙенең әрнеүен генә белә, үҙ мәшәҡәттәренә генә йомолоп, үҙ шатлығына, еңеүенә генә ҡыуанып йәшәй. Кешеләр ауырлыҡтан ҡасырға тырыша, һикәлтәләр аша атларға, дауылға ҡаршы барырға ҡурҡа. Әйтерһең дә, Горькийҙың пингвиндары. Күптәр тик үҙ туғандарының йәки үҙ милләтенең мәнфәғәттәренән генә сығып йәшәй, үҙен генә уйлай, башҡаларҙы һанға ла һуҡмай. Һанға һуҡмау ғына түгел, башҡаларҙың мыҫҡыл итеүҙән, башҡаларҙың интегеп йәшәүенән, кұҙ йәштәренән йәм таба. Әйтерһең дә, аждаһалар, яуыз көстәр менән бәхәс ҡороп, күберәк яман эштәр эшләргә, яуызлыҡ конкурсында еңергә ынтыла. Ныҡлабыраҡ ҡарағыҙ тирә-яҡҡа, тыңлағыҙ: күпме зар ишетелә, күпме ҡан-йәш ағыла. Ҡот осҡос түгелме ни? Һеҙҙе был донъяның ни тиклем йәмһеҙ, бәғерһеҙ булыуы саҡ ҡына булһа ла уйландырмаймы?

Күптәр хәҙер быға хатта ғәжәпләнмәй ҙә. Сөнки телевизорҙа ла, интернетта ла ҡот осҡос яңылыҡтарға күнегеп бөткәнбеҙ. Хәҙерге кеше миңә Фонвизиндың бөйөк комедияһы геройын хәтерләтә. Һәм бына шундай һаҡаллы сабый компьютер алдында гамбургерҙар, кока-кола ашап-эсеп ултыра, ти. Ә уның күҙ алдында төрлө күренештәр пәйҙә була. Йорт ишелеп төшкән, һалдаттар һәләк булған, ғәрипләнгән. "Ай-ай-ай! Ҡот осҡос! Йәл! Йәл!" ти ҙә беҙҙең герой ашауын дауам итә. Террористар Пальмира музейын һаҡлаусыны үлтергән, тарихи, мәҙәни ҡомартҡыларҙы юҡҡа сығарған. "Ҡот осҡос!" - һәм ашауын дауам итә. Түбәнге Новгород ҡалаһында ата кеше алты балаһын, ҡатынын, әсәһен үлтергән, Октябрьскийҙа әсә кеше ике балаһын һыуға батырған. "Ҡот осҡос!" - һәм ашауын дауам итә. Украинала һуғыш, ҡарттар, балалар һәләк була. "Ҡот осҡос!" - һәм ашауын дауам итә. Был тағы-тағы ла көндәр-төндәр буйы ҡабатлана. Ошо күренештәр кешене тик ҡурҡыта, аптырата ғына. Иртәгәһен ул был яңылыҡтарға инде тетрәнмәй. Иртәнән һуңға ул быларға тыныс ҡарай. Бер айҙан уларҙы тулыһынса онота. Сөнки ул бөгөн төп нәмәнән - бөйөк идеалдарҙан, хыял итә белеүҙән, икенсе тормош теләй белеүҙән мәхрүм. Ул ҡото осоп йәшәй, ә донъяны үҙгәртергә, донъяның киләсәген саҡ ҡына булһа ла күҙ алдына баҫтырыу тураһында уйлап та ҡарамай. Сөнки уның тамағы туҡ, өҫтө бөтөн, йоҡларға урыны бар, тирә-яҡта күңел асыу өсөн урындар шул тиклем күп - уйна, көл, иҫер, рәхәтлән! Кире күренештәр тураһында уйланма ла! Бер тапҡыр йәшәйһең, рәхәтләнеп йәшәп ҡал, үҙең тураһында ғына уйла - был хәҙерге заман девизы түгелме?

Икенсе тормош тураһында хыялланыу түгел, беҙ уның булыу мөмкинлегенә лә ышанмайбыҙ хатта. Беҙ утопияларҙы инҡар итеп, антиутопия селтәренә килеп эләктек. 90-сы йылдарҙа азатлыҡҡа ынтылыуыбыҙ бөтә йәмғиәттән азат булыуға ҡайтып ҡалды. Әммә был азатлыҡ түгел, иптәштәр. Был, киреһенсә, яңғыҙлыҡ камераһына үҙең теләп ябылып йәшәү. Ә был камераның һаҡсылары - битарафлыҡ һәм эгоизм.



***Шәһит ХАММАТОВ,*** *М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры актеры:*

Мине һәр ваҡыт йәмғиәтебеҙгә ҡағылышлы бер проблема борсой: ауылда йәшәгән ир-егеттәребеҙҙең күбеһенең күҙендә нур, йәшәүгә дәрт һүнгән. Мин үҙем белгән заманда әле, һабантуйҙарҙа атҡа атланып ярышып, күкрәк киреп көрәшеп, бынамын тигән донъя көтөп, янып йәшәгән ағайҙар, нишләптер, тормош ауырлыҡтарына бирешеп, ҡулдарын төшөргән. Ҡайһылары хатта ҡарт атаәсәһе алған пенсия аҡсаһына йәшәүгә күскән! Бына шул кешеләрҙең күҙҙәрендә янынан ышаныс, дәрт уятырға, ҡулдарына ҡеүәт бирергә ине. Ергә ятып эшләп, тырышып-тырмашып йәшәһәләр, тип хыялланам.

Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, ауылдарҙағы тормошто йәнләндереп ебәреү ысулын эҙләп табыу мөһим. Минеңсә, бының өсөн махсус комиссия төҙөп, халыҡты йыйып, улар араһынан эште яйға һалғандай лидерҙарҙы эшкә егергә кәрәк. Тәү сиратта үҙ креслоһын юғалтыуҙан ҡурҡмаған етәкселәр, тормошҡа зарланып, мыжып, аптырап ятмай, инициативаны үҙ ҡулына алырға әҙер булған йәштәр өлгө күрһәтергә, үҙ артынан эйәртергә тейеш. Халыҡ мәнфәғәттәрен өҫтөн ҡуйған лидерҙар ғына ауылдарыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу проблемаһын хәл итергә ярҙам итәсәк, тип уйлайым.



***Альберт ИМАМЕТДИНОВ,*** *Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры режиссеры:*

Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры режиссеры булараҡ, күберәк балалар өсөн ижад итәм һәм балалар донъяһын күҙәтеп, уларҙың характерын, ҡыҙыҡһыныуҙарын, уй-фекерҙәрен өйрәнәм, анализлайым. Балалар донъяһы икһеҙ-сикһеҙ, бай, матур. Халҡыбыҙҙың һәм илебеҙҙең киләсәге бөгөн ололарҙан - ата-әсәләрҙән, олатай-өләсәйҙәрҙән ҙур яуаплылыҡ талап итә. Ғаиләлә һалынған белем, донъяға ҡараш кешенең артабанғы яҙмышында бик мөһим роль уйнай. Уның үҫеше сәнғәт донъяһы менән дә бик тығыҙ бәйләнештә барырға тейеш. Сөнки сәнғәт - ул матурлыҡ, белеүебеҙсә, донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр. Шуға күрә, балаларыбыҙҙа ни тиклем матур сифаттар тәрбиәләнәк, шул тиклем киләсәккә ныҡлы ышаныс менән баға алабыҙ. Бының өсөн тәү сиратта уларҙа сәнғәткә ҡарата һөйөү тыуҙырырға кәрәк. Кескенә саҡтарынан уҡ әкиәттәргә, йыр-моңға, бейеүгә ҡыҙыҡһыныу уятырға, артабан беҙҙең Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры аша баланың белем даирәһен арттырыу мөһим. Сәнғәт донъяһы кешенең күңел даръяһын киңәйтә, хыялландыра һәм яҡшынан яманды айырырға өйрәтә. Балалар нимә менән ҡыҙыҡһына башлаһа ла самаһын белмәй, замана балалары компьютер, төрлө техника менән артыҡ мауыға. Уларҙың энергияһын, танып белеү теләген дөрөҫ юҫыҡҡа йүнәлтәйек, рухи донъяһын тәрбиәләүгә вайымһыҙ ҡарамайыҡ, роботҡа әйләндермәйек. Бала тирә-яҡ мөхит, үҙен уратып алған һәр нәмәгә ҡыҙыҡһынып, аптырап, һоҡланып ҡарарға өйрәнһә, ул күрә белергә, битараф булмаҫҡа өйрәнә. Шуға ла спектакль ҡарап ҡайтҡандан һуң балалар менән унда барған тамаша тураһында фекер алышыу бик кәрәк, нимә оҡшай, нимә аңланы, ҡайны персонаж күңеленә ятты, ул үҙе шул әкиәт геройы урынында нимә эшләр ине - былар бөтәһе лә Кеше сифаттарын тәрбиәләргә булышлыҡ итә торған мәлдәр. Ҡыҙғаныҫҡа күрә, бөгөн Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрына балаларын етәкләп килеүселәр бик күп түгел. Аңлы, рухлы, матур балалар үҫтергән ғаиләләр беҙҙең театрҙа сәхнәләштерелгән изгелек, яҡтылыҡ, яҡшылыҡ өләшеүсе спектаклдәр, тамашаларҙан ситтә ҡалмаһа ине. Бала тәрбиәһендә ярҙам итергә теләп ярҙам ҡулы һуҙған Ҡурсаҡ театрына ата-әсәләр йышыраҡ иғтибар итһен, кескәйҙәрҙең рухи донъяһын байытыуға күберәк әһәмиәт бирһен ине. Режиссер булараҡ, бөтөн борсолоуҙарым, бөтөн ижадым бына ошондай маҡсатты тормошҡа ашырыуға йүнәлдерелгән инде...

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҺУҢҒЫ ШЫРПЫ

**"Һуңғы шырпы" - бына шулай исемләнә Тәскирә Даянованың бер ижад емеше. Һүҙем әҫәрҙең эстәлегендә түгел, ә үҙкиммәте булған яҙмыштар үҙенсәлеге хаҡында. Йәғни, Ислам динендәге иман кәлимәһенең бишенсе терәге булған тәҡдирҙең кеше ғүмерендәге сағылыш алыуы хаҡында булыр.**

Айырып әйтергә кәрәк, тәҡдир төшөнсәһе был әҫәрҙә бөтә нескәлектәре менән һәр геройҙың көнитмешендә һүрәтләнгән. Әйтәйек, төп героиня эскелек һаҙлығына батҡан, зина юлына баҫҡан иренән биҙрәп, өйөн, донъяһын ташлап китһә лә, Аллаһ үҙенең ҡоло булған был ир затын бер ҙә үҙ мәрхәмәтенән ташламай, "Был, бәлки, тәүбәгә килер", тип, уның алдына төрлө һынауҙар ҡуя. Әммә ир, хикәйәлә һүрәтләнеүенсә, еңел юлды - шайтан юлын һайлай. Әҫәрҙә һәр геройҙың яҙмышы тулыһынса асылып бирелгән һәм тәҡдир булараҡ, һәр кемгә үҙ мәлендә Аллаһ тарафынан яҡты киләсәккә алып сығасаҡ юлдар һайлау мөмкинлеге бирелгән. Әлбиттә, әҫәр һуңы, героиняның аҙымы ғәжәпләндерә кеүек, әммә ләкин бында ла тәрән фәлсәфә ята. Әгәр һинең ихтыярыңда тәҡдиреңде үҙгәртеү теләге ята икән, күңелең был ғәмәленә яуаплылыҡ тойорға тейеш. Сөнки бында һинең генә яҙмышың түгел, башҡаларҙың да тәҡдире үҙгәреү алдында торасаҡ. Шайтан ғына өмөтһеҙ, тиҙәр. Әҙәм балаһын өмөт йәшәтә, йөрөтә. Ошо урында режиссер Гайдайҙың үткән быуаттың 80-се йылдарында төшөрөлгән "Кин-дза-дза" комедияһын иҫкә төшөрһәм, урынлы булыр кеүек. Фильм эстәлеге шунан ғибрәт: ахыр заман хөкөмө, джәһәлиәт осорон кисергән планетаға ике ер кешеһе килеп юлыға. Уларға был сит-ят ерҙә юғалып ҡалмаҫҡа өмөт терәк була, йәшәтә һәм йөрөтә. Кире ер йөҙөнә ҡайтыуға барса мөмкинлектәр тамамланған кеүек булһа ла, уларҙың ошо өмөт осҡонон осраҡлы табылған ни бары бер шырпы бөртөгө тоҡандырып ебәрә...

Беҙҙең ғүмерҙә лә, көнитмешебеҙҙә лә шундай мәлдәр, ҡаты һынауҙар булып тора. Инде һуңғы мөмкинлектәр тамам, тәҡдирем шулайҙыр, тип төшөнкөләккә бирелгәндә лә бар ул беҙҙең кесә төбөндә һаҡланып ҡалған бер шырпы бөртөгө. Яҙмышҡа һылтанып, шешәгә, үҙемә ҡул һалам, тип бауға үрелгәндә лә, бейек йорттоң ҡыйығына үрмәләгәндә лә ҡала әле ул күңел төпкөлөндә һуңғы ышаныс. Онотмайыҡ: Аллаһ һәр ҡолон, ниндәй генә ғүмер кисерһә лә, тиң күреп ярата, тәүбәгә, аҡылына кил, тип иҫкәртеп тора. "Бер Аллаһы таны, ғибәҙәт ҡыл, иман юлына баҫ, бәлки, ҡотолоу юлын табырһың".

Уйланайыҡ әле бер аҙ, йәмәғәт! Аллаһ ҡаты гонаһтар рәтенә ҡуйған ғәмәлдәрҙе һуңғы сара булараҡ ҡулланырҙан алда, ҡарайыҡ әле: кеҫәләребеҙҙә ятмаймы икән бер шырпы бөртөгө. Ул - күңелебеҙгә ялҡын, йәшәүебеҙгә дәрт биреүгә һәләтле бөйөк ут.

**С. КЕЙЕКБАЕВ.**
**Баймаҡ районы Ниғәмәт ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# КАКАО ХӘТЕРҘЕ ЯҠШЫРТА

■ Өлкәнәйә барған һайын кешенең мускул массаһы кәмей. АҠШ-ның Айова университеты ғалимдары был күңелһеҙ күренештең сәбәбен асыҡлаған. Америка ғалимдары мускул көсһөҙлөгөнә килтергән аҡһым өлгөһөн тапҡан. ATF4 аҡһымы мускул аҡһымы синтезын ҡыçҡартып, һөлдә мускулдары генына тәьçир итә. Белгестәр ATF4 әүҙемлеген баçыусы ике тәбиғи компонентты асыҡлаған - уларҙың береһе алмала, икенсеһе йәшел помидорҙа. "Ҡарт кешеләр мускулдарҙың көсһөҙлөгө менән яфалана. Алмалағы урсол кислотаһы менән йәшел помидорҙағы томатидин был процесты туҡтатып тора ала", - ти тикшеренеүҙәрҙең авторы Кристофер Адамс.

■ Чипсы, ҡыҙҙырылған тауыҡ, балыҡ, картуф, шулай уҡ майҙа бешкән бәлештәр простата яман шешенә килтереүе ихтимал. Тышы кетерләп торған тәмле тауыҡ ҡанаттары менән боттары Америкалағы иң популяр ризыҡтар. Уларҙы һәм картуф чипсылары, майҙа бешкән бәләкәй ҡабартмалар Европала ла киң билдәле хәҙер. Әммә күптән түгел Сиэтлдағы яман шеш яуырыуы тикшеренеүҙәре үҙәге ғалимдары асыҡлауынса, бындай аш-һыу ир-егеттәр өсөн айырыуса хәүефле. Майҙағы канцероген матдәләр - альдегидтар, гетероциклик аминдар яман шешкә килтерә.

■ Ҡайнар какао ҡарттарҙың хәтерен яҡшырта, ти Гарвард университеты ғалимдары. Улар был эффектты какао составындағы флавоноидтарға япһара. Экспериментта уртаса йәштәре 73 йәште тәшкил иткән бер төркөм ҡатнашҡан. Уларҙың өстән бер өлөшө баш мейеһе ҡан әйләнеше боҙолоуы менән яфаланған. Тейешле тикшеренеүҙәр үткәндән һуң, улар бер ай буйына көн һайын 2 стакан ҡайнар какао эскән. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, баш мейеһенең ҡан әйләнеше 8 процентҡа яҡшырған. Какао ҡартайыу һөҙөмтәһендә мейелә барған кире процестарҙы яйлата, неврологик тайпылыштар хәүефен түбәнәйтә.

■ Британия ғалимдары мәғлүмәттәренә ярашлы, иртәнге зарядка ябығыуҙың эффектын 20 процентҡа күтәрә. Тик күнегеүҙәр ас ҡарынға башҡарылырға тейеш. Тикшеренеүҙәрҙә 12 ир-егет ҡатнашҡан, уларҙың бер өлөшө спорт менән ас көйөнә, бер өлөшө иртәнге аштан һуң шөғөлләнгән. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, иртән спорт менән шөғөлләнеүселәрҙең көн дауамында калориялы ризыҡ ашарға теләге булмай, улар асығып та бармай. Ә бына ас көйөнсә спортзалға йүнәлеүселәр уларға ҡарағанда 20 процентҡа калорияларҙы күберәк яндыра.

■ Шәкәрҙе артыҡ ҡулланыу иммунитетты ҡаҡшата. 100 грамм шәкәр ҙә (шул иçәптән фруктоза менән глюкоза ла) ҡандың аҡ тәнсәләренең зыянлы микроорганизмдар менән көрәшеү һәләтен түбәнәйтә. Шәкәр ашағандан һуң ике сәғәт эсендә иммунитет яртылаш ҡына эшләй, ә өс сәғәттән һуң ул эшмәкәрлеген бөтөнләй туҡтата. Был ваҡыт эсендә организм хәлһеҙләнә. Йоғошло ауырыуҙар менән яфаланыусыларға бөтөнләй татлы ризытар ашарға ярамай. Шулай уҡ һуттар ҙа зарарлы, сөнки уларҙың составында глюкоза бар.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**"Ҡояш, һыу һәм һауа - беҙгә иң яҡшы дауа!" - ҡасан ғына әле ошо һүҙҙәр йәйге лагерҙарҙа ял итеүсе балаларҙың девизы ине. Ололар ҙа йәй етеү менән, йылыға туймағандай, күберәк ҡояшта булырға, үҙенә файҙа алып ҡалырға ынтылды. Бөгөн иһә күптәр, киреһенсә, ҡояш нурҙарынан да, һыуҙан да ҡасырға тырыша. Сөнки, белгестәр әйтеүенсә, әүҙем ҡояш нурҙары һәм насар һыу тән тиреһенә кире йоғонто яһай. Ә инде онкологтар белдереүенсә, тире яман шеше күрһәткесе йылдан-йыл арта бара. Был ысынлап та шулаймы, әллә халыҡ араһында тыуҙырылған сираттағы имеш-мимешме? Ошоларҙы асыҡлау маҡсатынан 1-се республика тире-венерология диспансерының беренсе категория табип-дерматовенерологы Алһыу ХАММАТОВАға мөрәжәғәт иттек.**



# ТИРЕ ЛӘ ИҒТИБАР ТАЛАП ИТӘ

**➔ Күптәр өсөн дерматология - тире ауырыуҙарын дауалаусы медицина тармағы. Әммә был тар мәғәнәлә генә шулай, ә табиптар күҙлегенән ҡарағанда, ул ниндәй дисциплина? Нимәне өйрәнә, нимәне дауалай?**

- Дерматология - ул тәү сиратта фән, ул тире ауырыуҙарын диагностикалауҙан, дауалауҙан, профилактикалауҙан тыш, уның төҙөлөшөн, физиологияһын өйрәнә. Тире кеше организмының иң ҙур өлөшөн алып тора. Был ҡатмарлы һәм иç киткес ҡатлам беҙҙе инфекцияларҙан, йәрәхәттәрҙән генә һаҡлап ҡалмай, шулай уҡ тән температураһын көйләүгә, бөйөрҙәрҙән төрлө токсиндарҙы сығарырға ярҙам итә. Унда беҙҙе ультрафиолет нурҙарҙан һаҡлаусы пигменттар барлыҡҡа килә, һөйәктәрҙе формалаштырыуҙа ҡатнашыусы Д витаминын (бигерәк тә балалар өсөн мөһим) эшләп сығара. Бынан тыш, тирелә мейегә мәғлүмәт биреүсе төрлө - температура, ауыртыу, тактиль - рецепторҙар бар. Медицинаның был бүлегенә шулай уҡ тырнаҡ, сәс, лайлалы тән өлөштәре проблемаларын өйрәнеү ҙә инә. Ә врач-дерматолог төрлө сәбәптәр, шулай уҡ инфекция һөҙөмтәһендә барлыҡҡа килгән тире ауырыуҙарын асыҡлап, уларҙы дауалау менән шөғөлләнә. Әммә ул диагноз ҡуя ла, тиҙ генә дауалау билдәләп, дауалай ҙа башлай тип уйларға ярамай - бында шулай уҡ башҡа сирҙәр менән дифференциаль диагностика ла үткәреү мөһим.

**➔ Һәр кеше үҙ тормошонда ниндәй ҙә булһа тире ауырыуы менән ауырыған йәки осрашҡан. Ләкин беҙ белгән иң ябай ҡысынма, тире ярылыу кеүек проблемалар - иң ябайҙары. Уйлап ҡараһаң, дерматологтарҙың исемлегендә әллә күпме атама булыуы мөмкин. Шуларҙың бөгөн ҡайһылары иң ныҡ таралғаны һәм улар йәмғиәттә хәүеф тыуҙырамы?**

- Эйе, тире ауырыуҙары беребеҙҙе лә урап үтмәй. Һәр кем көндәлек тормошта тиреһен бешереп тә ала, теге йәки был ере киçелеп-сыйылып та китә. Тәү ҡарашҡа, тире проблемалары ябай ғына кеүек - уларҙы күҙ менән күреп тә асыҡларға мөмкин. Әммә был һәр осраҡта ла шулай түгел, тире ауырыуҙары күп төрлө һәм бик йыш уларҙы диагностикалау, дауалау ауыр. Бөгөн йышыраҡ беҙгә псориаз, экзема, һытҡы ауырыуы, кесерткән биҙгәге, тиренең бәшмәк ауырыуы менән мөрәжәғәт итәләр. Шулай уҡ бик һирәк, ләкин ауыр сирҙәр тип һаналған һыулы ҡыуыҡсалар сире, дискиод ҡыҙыл сөсө ауырыуы, насар сифатлы яман шештәр ҙә осрай.

Тире ауырыуҙарының үҙенсәлеге булып уларҙың күҙгә ташланып тороуын әйтергә мөмкин. Күптәре йоғошло булмаһа ла, бәғзеләр тиреһендә ниндәйҙер үҙгәрештәр булыусыларға сикәнеп һәм ҡурҡып ҡарай. Был беҙҙең учреждение пациенттарында ниндәйҙер психологик проблемалар тыуҙыра һәм уларҙың сирен тағы ла көсәйтә. Шуға күрә гәзит аша кешеләрҙе иçкәртеүҙе үҙемдең бурысым тип һанайым: әгәр кемдендер тиреһендә ниндәйҙер үҙгәрештәр күрәһегеҙ икән, был уның мотлаҡ йоғошло сир менән ауырыуын аңлатмай.

**➔ Әгәр тирелә ниндәйҙер үҙгәреш барлыҡҡа килһә, мәçәлән, шул уҡ ҡысытыу ғына булғанда ла, был бары тик тире проблемаһы ғына булып торамы, әллә эске ағзаларҙың шулай сигнал биреп, үҙенә иғтибар йәлеп итергә тырышыуымы?**

- Дөрөç әйтәһегеҙ, бик йыш тире ауырыуҙары эске ағзаларҙың патологик процестары сағылышы булыуы ла мөмкин. Дерматологтар әйтеүенсә, тире - организмдың көҙгөһө. Һәм ошо өлкәлә эшләүсе табиптың төп бурысы - тире ауырыуҙары барлыҡҡа килеүҙең эске сәбәптәрен табыу. Бик йыш ул эндокрин системаһы, ашҡаҙан-эсәк тракты, аутоиммун процестар, нервылар системаһы зыянлауы, аллергия менән бәйле булыуы мөмкин. Бында шулай уҡ нәçелдән килгән сирҙәр тураһында ла иçтән сығармаçҡа кәрәк. Шуға күрә дерматолог дауалау билдәләр алдынан анализ тапшырырға ҡуша, башҡа белгестәргә консультацияға ебәрә икән, аптырарға ярамай. Сөнки бында эндокринологтың, неврологтың, ревматологтың, гастроэнтерологтың, гинекологтың, инфекционистың, терапевтың, ҡан тамырҙары хирургының консультацияһы талап ителеүен инҡар итеп булмай.

Тире ауырыуҙарын барлыҡҡа килтереүсе сәбәптәр бик күп. Эске ағзалар ауырыуҙарынан тыш, быға төрлө вирустар, бактериялар, бәшмәктәр сәбәп булыуы ихтимал. Тирелә сабыртма барлыҡҡа килеүгә йәки булған проблемаларҙы көсәйтеүгә насар ғәҙәттәр һәм дөрөç туҡланмау - саманан тыш шәрбәт, тоҙло, әсе ризыҡ ҡулланыу, стрестар, көсөргәнешле эш графигы, көн режимын һаҡламау, ҡуҙғытыусы химик матдәләр менән эшләү йоғонто яһауы мөмкин.

Хатта ҡояш та тире сабыртмаһының - фотодерматиттың сәбәбе булыуы ихтимал. Ҡояш нурҙарына һиҙгерлек артыуы ҡайһы бер дарыу препараттарын (антибиотиктар, ауыртыуҙы баçыусы дарыуҙар, йөрәк-ҡан тамырҙарын дауалаусы препараттар), ҡояшҡа сығыр алдынан косметика ҡулланғанда, ялан үләндәре менән бәйләнеш булғанда барлыҡҡа килә. Хатта ҡояшта бик аҙ ғына булғанда ла тәндең ҡапланмаған урындары ҡыҙарып сығыуы, шешенеүе, ҡысыта башлауы, ҡайһы берҙә ҡыуыҡсалар сығыуы бар.

**➔ Тире ауырыуҙарына ниндәй сәбәптәр йоғонто яһай? Ниндәй симптомдар булғанда мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк?**

- Тирелә сабыртма, таптар, эренле һытҡылар барлыҡҡа килгәндә, ҡысытҡанда, ҡауаҡланғанда, төçө үҙгәргәндә, сәс ҡойолғанда, тырнаҡтарҙың төçө һәм формаһы үҙгәргәндә мотлаҡ дерматологҡа мөрәжәғәт итегеҙ. Тағы бер проблема тураһында әйтмәү мөмкин түгел - ул яман шештәр. Тире рагы (бик йыш ул меланома) онкология ауырыуҙарының иң хәүефлеһе тип һанала, сөнки ул тиҙ тарала һәм бик иртә метастазалар бирә. Һуңғы ваҡытта беҙҙең илдә генә түгел, тотош донъяла меланома менән сирләүселәр һаны арта. Был сиргә бигерәк тә аҡ тәнле һәм зәңгәр күҙле кешеләр, эштәре оҙайлы ваҡыт асыҡ һауала, ҡояш нурҙары аçтында булған ваҡытта дусар була. Бала саҡта ҡояшта яныу йәки йыш ҡабатланған яныуҙар киләсәктә тире рагы хәүефен арттыра. Меланома өсөн иртә диагностика бик мөһим, шуға күрә миңдәргә бик иғтибарлы булыу зарур - әгәр миң төçөн, формаһын, күләмен үҙгәртә, ҡанһырай башлай икән, мотлаҡ табипҡа күренегеҙ.

**➔ Тире ауырыуҙары проблемаһы менән осрашмаç өсөн ниндәй профилактика сараларын тәҡдим итәһегеҙ?**

- Тирегә бала саҡтан уҡ иғтибарлы булырға кәрәк. Йәйгеһен ҡояш нурҙарының ныҡ әүҙем ваҡытында (иртәнге 11-ҙән киске 4-кә тиклем) ҡояш нуры аçтында булмаçҡа, ҡулсатыр йәки тент аçтында ғына ҡыҙынырға, урамға сығыр алдынан тәндең асыҡ өлөшөнә ҡояштан һаҡлаусы крем һөртөргә. Тәбиғи туҡымаларға: етен, кизе-мамыҡҡа өçтөнлөк бирергә. Сәләмәт туҡланыу булырға тейеш, консерванттар, буяуҙар ҡушылған продукттар ҡулланыу ярамай. Физик күнегеүҙәр эшләргә кәрәк, сөнки тап спорт көсөргәнеш һәм стресс менән көрәшергә ярҙам итә. Баҡсала йәки өйҙә эшләгәндә тирене һаҡлау өсөн бирсәткә кейеү урынлы. Дөйөм мунсаға, бассейнға барғанда, бәшмәк ауырыуын эләктермәç өсөн ялан аяҡ йөрөмәгеҙ, кеше аяҡ кейемен киймәгеҙ. Тәмәке тартыуҙан тыйылығыҙ, сөнки тәмәке тартыу тамырҙарҙың тарайыуына килтерә, тире тейешенсә туҡлана алмай. Әйтеп китеүемсә, тирелә ниндәй генә үҙгәрештәр күрһәгеҙ ҙә, мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итегеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмә барышында тирене һаулыҡ көҙгөһө менән юҡҡа ғына сағыштырманы табип. Ысынлап та, тәнебеҙҙең бар өлөшөн тигәндәй тире алып тора һәм организмдағы ниндәйҙер үҙгәрештәрҙе лә ул үҙендә сағылдыра. Ә инде тормошобоҙҙа тиренең ниндәйҙер проблемаһы менән осрашабыҙ икән, ғәйепте үҙебеҙҙән эҙләйек - тимәк, көндәлек мәшәҡәттәр, тормош ығы-зығыһына күмелеп, тейешле иғтибар биреп еткермәгәнбеҙ...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**әңгәмәләште.**

ҠОРБАН БАЙРАМЫ МӨБӘРӘК БУЛҺЫН!

# БУЙҺОНОУСАН БУЛҒАНДАРҘЫ...

## Аллаһ үҙенең иғтибары менән ҡыуандырыр



**Зөлхизә айының 10-сы көнөндә бөтөн донъя мосолмандары динебеҙҙең иң бөйөк байрамы - Ҡорбан ғәйетен билдәләй. Ул хаж ғәмәле тамамланыуға тура килә. Байрам өс-дүрт көн дауам итә.**

Байрам бәйғәмбәребеҙ Ибраһим с.ғ.с. ваҡытына барып тоташа. Унең улын ҡорбанға килтереү өсөн күтәргән ҡулын Аллаһы Тәғәлә ситкә этеп, кешелеккә кеше ҡаны ҡойоуға тыйыу индерә. Ибраһим ғәләйһис-сәләм йондоҙҙарҙы һәм башҡа әйберҙәрҙе Алла тип иҫәпләүҙән һәм уларға табыныуҙан баш тартып, Аллаһтың берҙән-бер икәненә инана. Аллаһ уны һынап ҡарау өсөн Уға үҙенең улын ҡорбан итергә бойора. Ибраһим Унең ихтыярын үтәй, әммә Аллаһ кеше ҡаны ҡойолоуға ирек бирмәй, Уға ҡанлы ҡорбандар кәрәкмәй. Ошо мәлдән динебеҙҙең дә яңы - бер генә Аллаға ышаныу осоро башлана. Был байрамдың асылы - кеше ҡанын ҡойоуҙы тыйыуҙа. Ислам дине мәрхәмәтле дин, тыныслыҡ дине, унда ҡан ҡойошҡа ынтылыш булырға тейеш түгел. Бөгөнгө донъяуи йәмғиәт теле менән әйткәндә, Ҡорбан байрам - монотеизмдың, йәғни бер Аллалы диндең иң бөйөк байрамы һәм кешелек тарихындағы иң беренсе гуманлылыҡ, йәғни кешелеклелек байрамы.

Хоҙай Ибраһимды ғәмәлдә тикшереп ҡарағандан һуң, Ибраһимдың да, уның улы Исмәғилдең дә үҙенә ысын мәғәнәһендә бирелгәнлеген аңлай. "Эй, Ибраһим! Раббыңа тоғро булыуыңды иҫбатланың. Аллаһ һинән риза булды. Инде ҡорбан итеп улыңды түгел, ҡуй сал", - ти Ябраил фәрештә һәм Аллаһ бойороғона ҡуй бирә. Был көндә ҡорбанға мал салына, бының менән хаҡ мосолмандар Аллаһы Тәғәләгә ышаныуҙың ҡотолоу сараһы икәнен, шулай уҡ гонаһтарҙың әҙемтәләрен тағы бер ҡат иҫенә төшөрә. Ҡөрьәндә әйтелгән: "Ҡорбанға салынған хайуандарҙың ни ите, ни ҡаны Аллаһҡа түгел, Уға фәҡәт һеҙҙең тәҡүәлегегеҙ генә барып ирешә" (Ҡөрьән, 22:37).

Ҡорбан байрам Ислам мәҙәниәтенең иң боронғо йолаларының береһе һәм ул мәрхәмәтлек, изгелек, кешеләргә һөйөү идеалдарын сағылдыра. Исламдың бөтөн тәглимәттәре кеүек үк, мосолмандар был байрамды ла ихтирам итә, сөнки ул һәр кешеләгә әхлаҡи таҙалыҡ һәм инаныуҙы һаҡлауға этәреүсе үҙенсәлекле рухи мәғәнә менән тулған. Аллаһы Тәғәлә һәр мосолманға был ерҙәге тормоштан һуң ожмахҡа эләгеү тураһында хыялланыу хоҡуғы биргән. Бының өсөн беҙгә йәмғиәттәге бурыстарыбыҙҙы теүәл үтәүебеҙ ҙә, ғәҙел һәм тәртипле тормош алып барыуыбыҙ ҙа, кешеләргә иғтибарлы һәм изгелекле булыуыбыҙ ҙа, мәрхүмдәрҙе иҫкә алып тороуыбыҙ ҙа кәрәк. Иҫебеҙҙә тотайыҡ: Аллаһ буйһоноусан булғандарҙы Үҙенең иғтибары менән ҡыуандырыр.

Ҡорбан байрамы быйыл 24 сентябргә тура килә. 9-13 зөлхизә - Тәшриҡ көндәре. Ҡорбан байрамынан алда, 9-сы зөлхизә көнө - Ғәрәфә көнө. Ҡәҙер кисе йылдың иң мөбәрәк кисе булһа, йылдың иң ҙур, изге көнө - Ғәрәфә - хаж ҡылыусылар тырышып Мәккә эргәһендәге Ғәрәфәт тауына барыу һәм тау итәгендә намаҙ уҡыу көнө. Был байрам көнөнөң исеме лә ошо тау исеменән алынып, Ғәрәфә көнө тип аталған. "Хаж - ул Ғәрәфә, - ти Бәйғәмбәребеҙ с.ғ.с. - Был көн - Аллаһы Тәғәлә күп кешене уттан ҡотҡарған көн. Был көндә ураҙа тотҡан кешенең үткән йылғы һәм башҡа гонаһтары ла ғәфү ителер". Был ҙур көндә миллионлаған мөъминдәр хаж ҡыла. Ошо уҡ көндә Әҙәм менән Һауа йәннәттән ергә төшөрөлгәндән һуң, ошо Ғәрәфә ерендә гонаһтары ғәфү ителеп осраша.

"Зөлхизә айының беренсе ун көнөндә эшләнгән изгелектәрҙән дә Аллаһҡа һөйкөмләрәк эш юҡ", - ти бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт с.ғ.с. Ғәрәфә көнөнөң иртәнге намаҙынан башлап, 13-сө зөлхизәнең икенде намаҙын тамамлап, һәр фарыз намаҙ артынан: "Аллаһу әкбәр лә иләһә илләһ-лаһу үәл-ләһү әкбәр. Аллаһу әкбәр. Үә лилләһим-хәмдү", тип тәкбир әйтелә. Ҡорбанды байрам намаҙынан һуң башлап, 12-се зөлхизәнең аҡшам ваҡытына тиклем салырға була. Мөмкинлектәре булған һәр ғаилә, хужа үҙе һәм ғаиләһе исеменән Аллаһты ҙурлап ҡорбан сала. Мосолмандар берберенен ҡотлай, ҡорбан табындарына саҡыра. Ғаилә ағзаларына, туғандарына, балаларына бүләктәр өләшә.

Ҡорбанды фәҡәт Аллаһ хаҡы өсөн генә салалар. Әгәр берәйһе генә булһа ла ит өсөн тип ҡушылһа, башҡаларҙыҡы ла ҡабул ителмәй. Сөнки һарыҡкәзә берәр кеше исеменән булһа, һыйыр малы ете кеше йәки ғаилә исеменән һуйылырға мөмкин. Салынасаҡ мал һау-сәләмәт булырға тейеш. Һуҡыр, аҡһаҡ, тешһеҙ, ҡолаҡһыҙ, ябыҡ, мөгөҙө йәки ҡойроҡ төбөнән үк өҙөлгән хайуандарҙы ҡорбанға салыу дөрөҫ булмай. Ҡорбан ите-тиреһе һатылырға тейеш түгел. Матди яҡтан етеш кешеләр ҡорбан итенең өстән бер өлөшөн саҙаҡа ҡылырға тейеш.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# БАЛАҢА ХӘРӘМ АШАТМА!

**Ундырышлы ергә яҡшы орлоҡ сәсһәң, ул, әлбиттә, яҡшы уңыш бирә. Әгәр инде уңышһыҙ ергә орлоҡ сәсһәң, унда ҡый үләне генә үҫеп, араһындағы яҡшы үләндәрҙе баҫып ала, үҫергә ҡамасаулай. Уны сүпләп тә, йолҡоп та бөтөрөп булмай.**

Тормошта кешеләр менән дә шулай: бала тәрбиәләп үҫтереү иген үҫтереү менән бер. Мәҫәлән, Аллаһы Тәғәлә кешеләрҙе барлыҡҡа килтергәндән алып хәрәм ризыҡтарҙан, алама эштәрҙән, насар һүҙҙәрҙән тыйып, китаптар төшөргән. Уларҙың иң һуңғыһы - Ҡөрьән Кәрим. Хәрәм, йәғни урлап, алдау юлы менән табылған, араҡы кеүек иҫерткес эсемлектәр һатыу юлы менән алынған ризыҡ, суҫҡа ите, Аллаһ исеме әйтеп һуйылмаған ит ашатып үҫтергән баланың тәне - уңдырышһыҙ тупраҡ кеүектер. Ата-әсәнең балаға насар һүҙҙәр һөйләп, мәҫәлән, туғандарын, күршеләрен, уҡытыусыларын, тәрбиәселәрен яманлап, башҡалар алдында үҙен тәкәббер тотоп, йә булмаһа, бахыр булып йәшәүе баланың күңеленә насар орлоҡ сәсеү була. Харам ризыҡ ашап үҫкән баланың ҡаны, тәне уңдырышһыҙ ер булһа, атаәсәнең теленән сыҡҡан насар һүҙҙәр алама орлоҡ булып, бала күңеленә сәселгәс, үҫеп еткән бала бер нисек тә алға китә алмай, сөнки баланың тәне лә, йәне лә харам булып етешә.

Ризыҡың аҙ булһа ла, балаңа тик хәләл ризыҡ ашатып үҫтерһәң, баланың тәне уңдырышлы ер кеүектер. Ниндәй генә ауырлыҡтар күрһәң дә, насар һүҙҙәр ишетһәң дә, кешеләрҙең хыянатын кисерһәң дә, сабыр итеп, ныҡ булып, күңелеңде һүрелдермәй, балаларыңа барыһын да матурлыҡ, изгелек итеп еткерә белеү - яҡшы орлоҡ сәсеү кеүектер. Хәләл ризыҡ ашап, тәне уңдырышлы ергә әйләнгән баланың йәненә яҡшы орлоҡ сәселһә, был бала тормоштоң ел-ямғырына бирешмәй, аяғында ныҡ баҫып торасаҡ. Араҡы эсеү, насар ғәмәлдәр ҡылыу, кәмһетелеп йәшәү баланың күңеленә оҡшамаясаҡ, хәрәм юлға осраһа, уны ташлап, хәләл юлды һайлаясаҡ. Ул баланы Аллаһы Тәғәлә үҙе етәкләйәсәк, сөнки ата-әсә уны Аллаһтың тыйғандарынан тыйып, ҡушҡандарын үтәп үҫтергән. Шуға күрә, балаға хәрәм ризыҡ ашатыуҙан тыйылырға кәрәк. Араҡы, көмөшкә һатыуҙан, урлап, алдап, отоп табылған малдан килгән табыштың тамсыһы ла балалар өсөн тотонолорға тейеш түгел, уның һис тә бәрәкәте булмаҫ, балаларығыҙҙың юлы ябылыр.

Беҙҙең атеистик рухта үҫкән халыҡ балаларға дини тәрбиә биреү юлының дөрөҫ икәнен яңы аңлай башланы. Шул үткән осорҙа бер нисә быуын балалар эскелеккә бирелде, йәшәү мәғәнәһен тапманы, эшһеҙлек көсөйҙе, ғаиләләрҙән тороҡлолоҡ түбәнәйҙе. Балалар араһында тәкәбберлектең, тупаҫлыҡтың, битарафлыҡтың, күрә алмаусанлыҡтың ғәҙәти күренеш булыуы йөрәкте һыҙлата. Балаларҙы алама холоҡтарынан йолоп алыу, уларға дөрөҫ тәрбиә биреү өсөн ата-әсәләргә тәүбәгә килеп, ҡылған гонаһтар өсөн Аллаһы Тәғәләнән илап-ялбарып ярлыҡау һорап, иман юлына баҫырға кәрәк. Аллаһы Тәғәлә бөйөк ғәфү итеүсе! Ул бар гонаһтарҙы ярлыҡай. Тик тәүбәгә килгәс, уларҙы ҡабатламаҫҡа тырышырға кәрәк. Балиғ, аҡылы булған кеше: "Ата-әсәм мине дөрөҫ юлға баҫтырмаған", - тип үкенергә тейеш түгел, ул үҙе тура юлға баҫырға, аҙашыуҙа булған туғандарын, яҡындарын иман юлына өгөтләргә бурыслы.

**Зәлифә ШАКИРОВА.**
**Әбйәлил районы Аҫҡар ауылы.**

УҢЫШ ҠАҘАН

# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

### Бәхетһеҙ күпселек

Әгәр тирә-йүндәгеләргә иғтибарлабыраҡ ҡараһағыҙ, улар араһында үҙ юлдарын табып, тормош мәғәнәһенә эйә булған бәхетле кешеләр бик һирәк икәнен күрерһегеҙ. Уларҙың күптәре проблемалар һәм көндәлек ауырлыҡтарҙы хәл итә алмай. Бәғзеләре уртасалыҡҡа ҡәнәғәт булып, күптән инде ағым ыңғайына йөҙә.

Уртасалыҡ тормош рәүешенә әйләнде. Үҙҙәренең адекват булмауын тойоу кешеләрҙе үҙ уңышһыҙлыҡтарында һәм күңел ҡайтыуҙарында йәмғиәтте, тирә-йүндәгеләрҙе, шарттарҙы ғәйепләргә һәм төрлө сәбәп эҙләргә мәжбүр итә. Һәм был шулай тейеш кеүек тә! Тормоштоң башҡа кешеләр тарафынан контролләнергә тырышыуына инаныу тышҡы шарттарға бәйле һәм уларҙың аңында ныҡлы урын алған. Улар был фекерҙең киреһен раҫлаусы логик дәлилдәрҙе ҡабул итеүҙән баш тарта.

Билдәле философ һәм психолог Уильям Джеймс бер ваҡыт: "Беҙҙең замандың бөйөк ҡаҙанышы булып фекерләүҙең эске аспекттарын үҙгәртеп, тормошобоҙҙоң тышҡы аспекттарын үҙгәртеү һәләте тора", - тип билдәләгән. Был раҫлауҙа бөйөк хәҡиҡәт ята - беҙ урап алған мөхиттең тормош китабын яҙыуҙа ҡорбандар түгел, ә авторҙаштар. Йәки, икенсе аҡылда әйтелгәнсә: "Беҙ үҙебеҙ тураһында нимә уйлайбыҙ, шундай түгелбеҙ, ә уйҙарыбыҙ ниндәй - беҙ шундай!"

### Һарыҡ фекерләүе

Ҡаһарманлыҡҡа ҡапма-ҡаршы булып ҡурҡаҡлыҡ түгел, ә конформизм тороуын бик ҡиммәт түләп аңланыҡ. Ғүмеребеҙҙең баһалап булмаҫ йылдарын өйөр ҡанундары буйынса йәшәргә тырышып әрәм иттек - әммә бер ваҡытта ла быға өлгәшә алмаясағыбыҙҙы бик һуң төшөндөк.

Нимә беҙҙе һарыҡтар кеүек бер-беребеҙҙең артынан һуҡырҙарса эйәрергә мәжбүр итә һуң? Башҡаларға оҡшарға тырышыу. Һарыҡтарса фекерләүҙән арынып, үҙебеҙҙе ғазаплауҙы туҡтатыу һәм үҙебеҙҙең башҡаларҙан ғына түгел, хатта ғаилә ағзаларынан да айырылып тороуыбыҙҙы аңларға ваҡыт етте. Әгәр күпселеккә үҙ тормошобоҙҙо контролләргә мөмкинлек бирмәһәк, бик күп ғазаптарҙан ҡасырға мөмкин булыр ине. Сөнки уның башҡаларға йәки йәмғиәткә буйһоноуына инаныу үҙ иркең менән эске ҡоллоҡҡа рөхсәт биреүҙе, үҙ теләгебеҙ менән тотҡонға әүерелеүебеҙҙе аңлата.

Уйҙарыбыҙ төпкө аңыбыҙҙың барлыҡ элементтарын сағылдырыусы көсөргә, улар ыңғай йәки кире көҙәллауҙар булып тормошҡа аша. Тормош ағын теүәл сағылышы булып тора. Беҙ тормошобоҙға яҡшы йәки насарҙы, шатлыҡты йәки күңелһеҙҙе, уңышты йәки уңышһыҙлыҡты тартып килтерәбеҙ. Был барлыҡ өлкәләргә лә - эшкә, никахҡа, сәләмәтлеккә һәм шәхси тормошҡа ҡағыла. Әйткәндәр тураһында уйланығыҙ! Беҙҙе урап алған мөхит - ул бары тик уйҙарыбыҙҙың эске эшмәкәрлегенең тышҡы сағылышы ғына. Әлеге ваҡытта кем булыуығыҙҙың сәбәбен аңлаһағыҙ, кем булырға теләүегеҙгә яуап табырға була.

### Үҙгәрештәргә йоғонто яһаусы көс

Шекспир: "Кем икәнлегебеҙҙе беләбеҙ, әммә кем була аласағыбыҙҙы белмәйбеҙ", - тигән. Был һеҙгә ҡағыламы? Үҙегеҙҙең сикләнгәнлегегеҙҙә, уңышһыҙлыҡтарығыҙҙа, хаталарығыҙҙа иғтибар туплағанһығыҙмы? Кем була аласағығыҙ тураһында уйланғанығыҙ бармы? Проблема шунда йәшеренгән: бәләкәй сағығыҙҙан һеҙ ялған көҙәллауҙар, ялған ҡиммәттәр, ялған инаныуҙар менән программаланғанһығыҙ һәм улар һеҙҙең ысын һәләттәрегеҙҙе күрергә, үҙенсәлегегеҙҙе аңларға ҡамасаулай.

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 21 СЕНТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Джуна". Драматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.20 "Код 100" (18+).
03.00 Новости.
03.05 "Ликвидатор". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
Уважаемые телезрители!
Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Непридуманная жизнь". 1-3-я серии. Драматический сериал (16+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Собака на сене". 1-я серия. Музыкальная комедия.
02.15 "Чокнутая". Детективный сериал (16+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ
**Уважаемые телезрители!**
**Телеканал приносит извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00.**
**14.00 Новости недели (на русск. яз.).**
**14.45 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.30 "Гора новостей" (0+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 21.30, 06.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Позывной "Барс" (12+).**
**18.00 "Бай" (12+).**
**18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (0+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Биш дауа" (12+).**
**20.45 "Уфимскому НИИ медицины, труда и экологии человека - 60 лет" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**22.00 "Следопыт" (12+).**
**23.00 "Ангел А". Худ. фильм (16+).**
**01.15 С.Латыпов, Х.Фатыхова "Завидуй, Америка, завидуй" (12+).**
**03.30 "Мелодии души" (12+).**

## 22 СЕНТЯБРЯ ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Джуна". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Джуна". 3-я и 4-я, заключительные, серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
01.30, 03.05 "Большой Лебовски". Худ. фильм (18+).
03.00 Новости.
03.50 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Вопросы воспитания". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Непридуманная жизнь". 4-6 серии (16+).
23.50 "Вести.doc" (16+).
01.05 "Собака на сене". 2-я серия. Музыкальная комедия.
02.30 "Чокнутая". Детективный сериал (16+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 17.45 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30, 06.30 Новости (12+).**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**13.00, 05.45 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.15 "Шәп арба" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**18.00 "Биш дауа" (12+).**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (Хабаровск).**
**22.00 Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Самый главный босс". Худ. фильм.**
**01.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Амур" (12+).**
**03.45 "Мелодии души" (12+).**
**04.30 "Жизнь, творчество и духовный подвиг". Зайнулла Расулев (12+).**

## 23 СЕНТЯБРЯ СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Джуна". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Джуна". 5-я и 6-я серии (16+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
00.30 "Политика".
01.35, 03.05 "Меня зовут Хан". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Личный состав". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Непридуманная жизнь". 7-я и 8-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Театр". Худ. фильм.
02.00 "Чокнутая". Сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30, 06.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00, 05.45 "Бәхетнамә" (12+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Байтус" (0+).**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Интервью" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Странные родственники". Худ. фильм (12+).**
**01.00 Т.Миннуллин. "Ильгизар+Вера" (12+).**
**03.00 "Мелодии души" (12+).**
**04.00 "Благословенная земля" (12+).**

## 24 СЕНТЯБРЯ ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
11.15 "Курбан-Байрам". Трансляция из Уфимской соборной мечети.
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Джуна". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00"Мужское/Женское (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Джуна". 7-я и 8-я серии (12+).
23.40 "Вечерний Ургант" (16+).
00.15 Ночные новости.
0.30 "На ночь глядя" (16+).
01.25, 03.05 "Поворотный пункт". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.50 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "О самом главном".
10.00 "Тайны следствия". Детективный сериал (16+).
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 Праздник Курбан-Байрам. Прямая трансляция из Московской Соборной мечети.
12.50 "Тайны следствия". "Веселый слоник". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Непридуманная жизнь". 9-я и 10-я серии (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.35 "Театр". Худ. фильм.
02.05 "Чокнутая". Сериал (16+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Йома" (0+).**
**08.00 "Хуш киләһең нурлы Байрам!" (12+).**
**09.00 "Курбан-Байрам". Прямая трансляция из Соборной мечети "Ләлә-Тюльпан" (0+).**
**10.00 "Колонкай" (0+).**
**10.45, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**11.00 "Царь горы" (0+).**
**11.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.30 "Полюс времени" (6+).**
**12.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Праздник веры и добра" (12+).**
**13.45 "Последнее лето Сюмбель". Сериал (12+).**
**15.15 "Не хочу расти одна" (0+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.30, 01.00 Т.Миннуллин. "Мулла" (12+).**
**18.30 "Мамаша". Худ. фильм (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**21.30, 06.30 Новости.**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Мой лучший друг". Худ. фильм (12+).**
**03.00 "Мелодии души" (12+).**
**03.45 "Рами Гарипов" (12+).**
**04.30 Концерт Дианы Ишниязовой (12+).**

## 25 СЕНТЯБРЯ ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Джуна". Драматический сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
23.50 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.45 Концерт Мадонны (16+).
03.00 "Беглый огонь". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41 "Утро России".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Звуки музыки". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Петросян-шоу". Юмористическая программа (16+).
22.55 "Я тебя никогда не забуду". Мелодрама (12+).
00.50 "Любовь до востребования". Мелодрама (16+).
02.55 "Горячая десятка" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30, 06.30 Новости.**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00, 05.45 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Күңелем моңдары" (6+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык с Владиславом Черневым" (0+).**
**19.40 "Розыгрыш акции "Счастливый билет" аптечной сети "Фармленд" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Хит-парад "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Точка зрения. ЛДПР" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**23.00 "Интердевочка". Худ. фильм (16+).**

## 26 СЕНТЯБРЯ СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.30, 06.10 "Война и мир". Сериал.
06.00 Новости.
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.45 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "До первого крика совы". Док. фильм к юбилею программы "Что? Где? Когда?" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Королева бензоколонки". Комедия (12+).
15.45 "Голос" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "ДОстояние РЕспублики: Григорий Лепс" (16+).
21.00 "Время".
21.25 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.10 "Ограм на счастье". Худ. фильм (16+).
01.00 "Банда шести". Комедия (12+).
02.45 Бокс. Бой за титул чемпиона мира.
03.45 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1
04.50 "Старый знакомый". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Мульт-утро".
09.30 "Правила жизни" (12+).
10.05 "Качество жизни".
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20 "Бабье лето". Мелодраматический сериал. 4 серии (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Бабье лето". Продолжение (12+).
15.30 "Субботний вечер".
17.15 "Некрасивая любовь". Мелодрама (12+).
19.10 "Знание - сила". Телевикторина.
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Исцеление". Мелодраматический сериал. 4 серии (16+).
00.35 "Два мгновения любви". Худ. фильм (12+).
02.40 "Вам телеграмма" Мелодрама (12+)
04.05 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05, 12.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Медведи-соседи. Вокруг света" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Большой чемодан" (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (12+).**
**13.30 "Автограф" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байык-2015" (12+).**
**17.00 Т.Гарипова. "Девушка с монистами" (12+).**
**19.00 "Уйлан, кеше" (12+).**
**19.45 "Замандаш" (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Осрашыу" (12+).**
**21.00 "Бай" (12+).**
**21.30, 06.30 Новости.**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Мистер Пип". Худ. фильм (16+).**
**02.15 Ф.Буляков. "Похищение стариков" (12+).**
**04.15 "Земля под ногами" (16+).**
**05.00 Концерт Гульназ Кадырбердиной (12+).**

## 27 СЕНТЯБРЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости.
06.10 "Война и мир". Сериал.
07.05 "Лист ожидания". Сериал (16+).
08.10 "Армейский магазин" (16+).
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Добровольцы. Драма.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.10 "1812" (12+).
17.20 "Время покажет". Темы недели (16+).
19.00 "Точь-в-точь". Шоу пародий (16+).
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Точь-в-точь". Продолжение шоу (16+).
23.35 "Легенды о Гоге". К 100-летию Георгия Товстоногова (16+).
00.40 "Спасти мистера Бэнкса". Худ. фильм (12+).
03.00 "Модный приговор".
04.00 "Мужское/Женское" (16+).

### РОССИЯ 1
05.15 "Время желаний". Худ. фильм (12+).
07.20 "Вся Россия".
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20, 03.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 Большой праздничный концерт.
13.10 "Ожерелье". Худ. фильм (12+).
14.00 "Вести".
14.20 "Ожерелье". Продолжение фильма (16+).
15.30 "Главная сцена".
17.55 "Самое главное". Драма (12+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
00.30 "Кровь с молоком". Мелодрама (12+).
02.40 "Поезд-призрак. Тайна золота Колчака" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ
**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Алиса знает, что делать!" (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (12+).**
**10.00 "Литра" (6+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00 "Оперение-2015. Всероссийский фестиваль школ-студий К.Хабенского" (0+).**
**15.30 "Из мира тишины" (0+).**
**15.30 "Дорога к храму" (6+).**
**16.30 "Газпром трансгаз Уфа" (12+).**
**16.45 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**17.00 Ж.-Б.Мольер. "Скупой" (12+).**
**18.45 "В фокусе" (0+).**
**19.00 "Говорящий человек" (0+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Мир настоящих мужчин" (6+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.15 "Любимое дело" (12+).**
**20.45 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.) (0+).**
**22.15 "Специальный репортаж" (0+).**
**22.30 "Байык-2015" (0+).**
**23.30 "Вечер.com" (12+).**
**00.15 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.30 "Личный номер" Худ. фильм (12+).**

✓ *Тик еңеүҙе генә алдарына маҡсат итеп ҡуйған юлаевсылар "Барыс" менән осрашыуҙан да үҙҙәренә мәрәй эшләй алды. Ныҡышмалы көрәш һөҙөмтәһе буйынса еңеү 1:2 иҫәбе менән Өфө командаһына тәтене.*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ГЕОГРАФТАРЫБЫҘ




**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.**

**37-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Ноутбук. Барбаросса. Евро. Ырылдай. Оденсе. Инфляция. Исем. Мәхмүтов. Дайхатсу. Абашидзе. Процент. Эшҡыуар. Плюс. Капитал. Аскернә. Сүрә. Абрар. Баллистика. Иҫәнбаев. Цуба. Ирөш. Тәңкә. Роман. Таба. Алама. Банк. Барлыбаев. Аннат. Иена.

**Вертикаль буйынса:** Умып. Девальвация. Отпуск. Бур. Думец. Ербаба. Нисә. Бурыс. Хәйруллина. Ревва. Люблин. Нәбиуллина. Төшөм. Атлант. Алиби. Трофей. Аэроб. Бари. Имде. Иртән. Агорн. Эскимос. Ваза. Үксә. Памир. Ярағы. Әҙәбиәт. Уртаға. Рабле. Ягуар. Лира. Вена.

*БАҠСА*

# ЙӘЙ ЙӘМЕН...

## көҙҙән хәстәрлә

**Көҙ сәсеп ҡалдыра торған сәскәләр ҙә була. Улар - ләлә, нәркәс, сөмбөл, декоратив һуғандар, крокус. Лилиәне яҙ ҙа, көҙ ҙә ултырталар.**

Ләлә (тюльпан), нәркәс, лилиә орлоҡтарын һатып алғанда һуғанбаштың ҙурлығына иғтибар итегеҙ, сөнки сәскәнең сифаты уға бәйле. Һуғанбаш тығыҙ булһын, серей башлаған ерҙәре булмаһын, төбө ҡоро һәм шулай уҡ тығыҙ булырға тейеш. Ҡыҫҡа үҫентеләрҙең орлоҡтары ла вағыраҡ була.

Сөмбөлдөң (гиацинт) һуғанбашының төҫө, ҡағиҙә буларак, сәскәнең төҫөн хәтерләтә. Төрлө төҫтәге сөмбөлдөң орлоҡтары төрлө төҫтә һәм ҙурлыҡта була. Алһыу, шәмәхә, күк сөмбөлдөң һуғанбашы киң, һары һәм әфлисун төҫөндәгеһенеке - тар һәм конус формаһында, аҡтарыныҡы йомортҡаға оҡшаш.

Магазиндан һатып алынған орлоҡтарҙы өйгә алып ҡайтҡас, тағы берҙе тикшереп, насарҙарын ташлау кәрәк. Ҡайһы берҙә һатыуҙа пенициллез үңәҙ менән зарарланған орлоҡтар осрай. Был сир баҡсалағы башҡа үҫентеләргә күсә, шуға ла орлоҡта аҡ тирәс менән уратып алынған буҙ төҫтәге таптар бар икән, уны ҡырҡып ташлайҙар, иҙелгән күмер йәки фунгицид порошоғы һибәләр. Ҡырҡылған урын кипһен өсөн 2-3 тәүлек тоталар. Сәсер алдынан орлоҡтарҙы "Витарос", "Максим" кеүек ағыуҙар менән инструкцияла яҙылғанса эшкәртәләр.

Орлоҡтарҙы сәскәндә ябай бер ҡағиҙәне күҙәтергә: орлоҡтоң бейеклеген 3-кә ҡабатлайбыҙ, соҡорҙоң тәрәнлеге ошо күләмдә булырға тейеш. Тупраҡ ныҡ ауыр, балсыҡлы булһа, ултыртыу тәрәнлеген 20 процентҡа кәметеү яҡшыраҡ. Һуғанбашлы үҫемлектәр артыҡ һыуҙы яратмай, шуға ла урын һайлағанда ошоға иғтибар итегеҙ. Тупраҡ ҡомло булһа, өҫтәмә рәүештә йыш туҡландырырға һәм һыу һибеп торорға тура килер.

Дөрөҫөн әйткәндә, беҙ хәҙер крокус ултыртырға һуңланыҡ, уны август аҙағында - сентябрь башында ултырталар. Нәркәсте лә ошо мәлдә сәсәләр, ләләне лә артыҡ һуңлатырға ярамай. Бына сөмбөлдө иртә ултыртыу кәңәш ителмәй, 8 градус тирәһендәге йылылыҡ торған мәлдә, октябрҙең икенсе декадаһы иң ҡулайлы мәл.

Шулай ҙа көҙөн һуңлатып та һуғанбашлы сәскәләрҙе сәсергә мөмкин, ти тәжрибәле баҡсасылар. Һыуынған тупраҡҡа ултыртылған орлоҡтар ҙа икенсе йылына сәскә ата. Тик был осраҡта уларҙы мотлаҡ ҡышҡылыҡҡа ябырға кәрәк.

Лилиәләрҙе ултыртыуҙың иң яҡшы ваҡыты - сентябрь башы. Шул саҡта улар тамыр йәйеп өлгөрә һәм һәйбәт ҡышлай. Шулай ҙа сентябрь аҙағы, хатта октябрҙә лә ултыртырға мөмкин. Ул саҡта ҡышҡылыҡҡа ябыу мотлаҡ.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Сентябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 21 (8) дүшәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 17:46 | 19:16 | 20:46 |
| 22 (9) шишәмбе | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 17:44 | 19:14 | 20:44 |
| 23 (10) шаршамбы | 5:34 | 7:04 | 13:30 | 17:41 | 19:11 | 20:41 |
| 24 (11) кесе йома | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 17:39 | 19:09 | 20:39 |
| 25 (12) йома | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 17:36 | 19:06 | 20:36 |
| 26 (13) шәмбе | 5:39 | 7:09 | 13:30 | 17:34 | 19:04 | 20:34 |
| 27 (14) йәкшәмбе | 5:41 | 7:11 | 13:30 | 17:31 | 19:01 | 20:31 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ХОККЕЙ*

# НИҺАЙӘТ - ЕҢЕҮҘӘР!

Юлаевсылар "ЦСКА"нан 5:2 иҫәбе менән еңелгәндән һуң, ниһайәт, үҙҙәрен ҡулға алып, оҫта, мауыҡтырғыс, етеҙ уйын күрһәтә башланы. Шулай, "Северсталь" хоккей командаһы менән осрашыуҙы юлаевсылар уйынды үҙ файҙаһына 2:1 иҫәбе менән тамамланы. Был еңеү уларҙы ҡанатландырмай ҡалманы һәм үҙенең принципиаль көрәштәше - "Аҡ Барс"ты буллит буйынса еңеүгә килтерҙе. "Йәшелдәр" бәйгеһе юлаевсылар файҙаһына 3:4 иҫәбе менән тамамланды.

Тик еңеүҙе генә алдарына маҡсат итеп ҡуйған юлаевсылар "Барыс" менән осрашыуҙан да үҙҙәренә мәрәй эшләй алды. Ныҡышмалы көрәш һөҙөмтәһе буйынса еңеү 1:2 иҫәбе менән Өфө командаһына тәтене. Шуныһы ҡыҙыҡлы: был уйында ла көслө команда буллит һөҙөмтәһе буйынса асыҡланды.

Артабан да "Салауат Юлаев" ошо уңышлы тулҡындан төшмәй, көйәрмәндәрен тик еңеүҙәр менән генә шатландырыр, тигән өмөттәбеҙ.

*АФАРИН!*

# "ҮҘЕМ БУЛЫП ҠАЛАМ"

**Фарсы теленән тәржемә иткәндә, уның исеме "Һөйөклө" тигәнде белдерә. "Һөйкөмлө һөйәк" тиҙәр, гәҙәттә, ундайҙарҙы халыҡта. Яҙмышы, ғаиләһе, эшенән уңыуына шөкөрана ҡылып, үҙ-үҙе, тирә-йүндәгеләр менән тулы гармонияла йәшәгән Франгизә Финан ҡыҙы өсөн быйыл юбилей йылы. Телевидение режиссеры, Телерадиосәнғәт мәктәп-студияһы белгесе Франгизә Илбәкованың күркәм генә юбилейы алдынан үҙенә бер нисә һорау менән мөрәжәғәт иттек.**



**➔ Тамашасы Һеҙҙе кем булараҡ яҡшыраҡ таный - режиссермы, әллә сценарийҙар оҫтаһы итепме, әллә шағирә булараҡмы?**

- Күберәк телевидение режиссеры булараҡ беләләрҙер, тип ышанам, сөнки был эшкә үҙемдең көсөмдө, тырышлығымды күберәк һалғанмындыр, моғайын. "Аҡ тирәк, күк тирәк" тапшырыуы, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн барған "Айгөл иле" тележурналы, "Инсан", "Нәҙер" тапшырыуҙар циклдарын өлкәнерәк быуын яҡшы иҫләй. "Йома" тапшырыуында ла эшләнем, "Арҡайым" зыялылар клубы бер нисә йыл бик уңышлы барҙы. Артистар, яҙыусылар, шағирҙар ижадына арналған тапшырыуҙар күпме булды! Мифтахетдин Аҡмулланың, Башҡортостандың халыҡ шағирҙары Марат Кәримовтың, Факиһа Туғыҙбаеваның ижадына арналған фильмдар ҙа ижад емештәрем исемлегендә. Режиссер бик ижади ҡараш талап иткән һөнәр ул, геройыңдың хистәрен, эске кисерештәрен тоя белеүҙән тыш, бар тупланған мәғлүмәтте дөрөҫ итеп үрә белеү ҙә кәрәк. Күп ижадсыларҙың концерттарын, юбилей кисәләрен үткәргәнмен, сценарийҙар яҙырға, был сараларҙың сәхнә режиссеры булырға ла тура килде. Шиғырҙарыма иһә Салауат Низаметдинов байтаҡ йырҙар яҙҙы. Ришат Сәғитов менән ижади дуҫлыҡ "Күрше малай" тигән балалар йырынан башланды. Бик популяр йыр булды ул, ғәжәп инде, хатта дискотекаларҙа шуға бейейбеҙ, тип килеп әйтә торғайны йәштәр.

**➔ Композиторҙар әйтеүенсә, бөтөн шиғырға ла йырҙар яҙылмай. Йырлап ҡына торған шиғырҙар нисек тыуа?**

- Шағирә булыу өсөн ниндәйҙер айырыуса, бик юғары һәләткә эйә булырға кәрәк, тип иҫәпләнем гел генә һәм үҙемде шағирә тигәндәренән ояла инем. Шулай ҙа шағирҙар араһында ла минең шиғырҙарыма яҡшы баһа биреүселәр бар икәнен беләм.

Тәүге хистәр тәбиғәткә һоҡланыуҙан килә, аҙаҡ инде икенсерәк тойғолар кисереүҙән тұмәйенсә ҡулға ҡәләм алаһың. Шиғырҙарың шау хистән, һөйөүҙән генә тора, тигәндәре бар. Был шиғриәтемә, бәлки, ниндәйҙер еңеллек тә бирәлер, әммә ҡатын-ҡыҙға ил-көн темаһын, проблемаларын күтәреү мотлаҡ түгел, тип иҫәпләйем. Быныһы инде Хоҙай тарафынан ир-егеткә йөкмәтелгән бурыс.

**➔ Йыһан ҡанундары буйынса, ҡатын-ҡыҙ тормошҡа тап һөйөү аша бағырға тейеш түгелме һуң?**

- Һис шикһеҙ, гүзәл зат булараҡ тормошто тап ошо яҡтан - һөйөү, наҙ аша күреү тәбиғи хәл. Беҙҙең был донъяла-ғы бурысыбыҙ - яҡтылыҡ таратыу. Үҙе булып ҡала алған, үҙенең эске торошонан ҡәнәғәт ҡатын-ҡыҙ ғына нур сығынағы була ала. Яҙмышыма рәхмәтлемен, үҫкән ғаиләмдә ауыр эштәрҙе ағайҙар күтәрҙе, еңелдәрен ҡустылар эшләне. Апайҙар ҙа күнелемдә аяп ҡына торҙо, шуға бер аҙ иркәрәк тә инем. Ошо наҙҙы үҙ ғаиләмдә лә татыйым, Ишморат ысын егеттәрсә һүҙен дә әйтә, яҡлай ҙа, һаҡлай ҙа, баһамды күтәрә лә белә. Ғаиләмдә аңлау тапҡанға күрә, эшем дә алға барҙы. Ижад бит ул бер яҡлы ғына түгел, үҙемде төрлө яҡлап үҫтерә алыуыма ла шатланам.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Кем иһә Франгизә Илбәкованың төрлө яҡлы ижады менән тағы ла яҡындараҡ танышырға теләй, 25 сентябрҙә уның "Үҙем булып ҡалам" тигән концертына килә ала. Концерт тулыһынса уның шиғырҙарына яҙылған йырҙарҙан тораcаҡ. Тәүге өлөштә шиғырҙар менән йырҙарҙы бәйләп, бәләкәй генә драматик тамаша ҡороласаҡ. Икенсе өлөш тыуған яҡ, бөгөнгө көн хаҡында уйланыуҙарға бәйле буласаҡ. Сарала Франгизә Илбәкованың "Үҙем булып ҡалам" тигән шиғырҙар китабының презентацияһы ла ойошторола.**

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*ХАЗИНАЛАРЫБЫҘ*

# БИҘӘНЕҮ ӘЙБЕРҘӘРЕ



**Боронғо биҙәнеү әйберҙәре халҡыбыҙҙың алтын мираҫын тәшкил итә. Ғалим, этнограф Светлана Шитова "Башҡорт ҡатынының милли кейеме, биҙәнеү әйберҙәре - йыр, бейеү, бәйге, яу, бала һөйөү һәм мөхәббәт",- тип яҙған. Бик хаҡ һүҙҙәр.**

Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының биҙәүестәре башлыса муйынсаҡ, елкәлек, сулпы, түшелдеректәрҙәге һәм ҡашмауҙағы тәңкәләрҙән, алҡа, һырға, беләҙек, йөҙөк һәм балдаҡтан, ҡаптырманан тора. Барлыҡ төбәктәрҙең дә биҙәүестәрендә көмөш һәм мәрйен, шулай уҡ аҡыҡ, фәйрүҙә, гәрәбә, сәйлән һәм шымартылған быяла ҡулланылған.

Күкрәк биҙәнеү әйберҙәре төбәгенә ҡарап формалары менән айырыла. Ҡыҙыл тукыманы мәрйәндәр, көмөш тәңкәләр, ярым ҡиммәтле таштар менән биҙәп, һәкал, селтәр, күкрәксә эшләгәндәр.

Түшкә тағa торған биҙәүестәр араһында көньяҡ-көнсығыш һәм үҙәк Башҡортостанда таралған ҡатын-ҡыҙҙар селтәре - иң ауыры. Уның өҫкө өлөшөнә епкә теҙелгән мәрйен түңәрәкләп йәки балыҡ тәңкәһенә оҡшатып ярымтүңәрәкләп баҫыла, биҙәкле бер нисә еҙ тәңкә, сулпылар һәм мәрүәт пластиналар беркетелә.

Борон башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары балдаҡ, йөҙөк, беләҙек, алҡа, һырға, сулпы, муйынса, яға сылбыры кеүек көмөш әйберҙәр ҙә таҡҡандар. Ғөмүмән, һәр биҙәнеү әйберенә киң тәрән мәғәнә һалынған.

Биҙәүестәр өсөн материалды уның тылсым көсөнә ышанып һайлағандар. Көмөш паҡлау-һаҡлау көсөнә эйә, мәрйен кешегә һаулыҡ килтерә, тип белгәндәр. Ярым затлы таштарҙан аҡыҡ нығ таралған. Уны сулпыға, сәскапҡа теккәндәр, йөҙөк-беләҙектәрҙә ҡашлағандар. Аҡыкты бәхет ташы тип иҫәпләгәндәр, ә фирүзә ташы тыныс йоҡо тәьмин итә тип ышанғандар.

Ҡашмауҙы баш кейеме тип кенә түгел, биҙәнеү әйбере итеп тә ҡарарға мөмкин. Төрлө төҫтәге мунсаҡ, сәйлән, мәрйен, суҡ менән биҙәлеп, арҡаға төшөп торған киң булмаған туҡыма кисәге олон, өңкә йәки ҡойороҡ тип атала. Ҡашмау сылбырлы һырға менән биҙәлгән, матур ҡаптырма менән беркетелгән. Һоратылған ҡыҙға инәйҙәр ҡашмау өсөн мәрйен һәм көмөш тәңкәләр алып килгән. Ҡайһы төбәктәрҙә йола буйынса ҡашмауҙы кейәү бүләк иткән, тик кәләш уны улы тыуғас ҡына кейә алған.

**Миңзәлә ФӘСИМОВА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ХАНДЫҢ АЛДЫНАН...

## аттың артынан уҙма

*Атаһын үлтергәндә уғлан онотмаç, ҡойроғон ҡыçҡәндә йылан онотмаç.*

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер аҡыллы кеше йәшәгән. Кистәрен уның өйөнә таныштары, таныш булмағандар йыйылған, уның аҡыллы риүәйәттәрен тыңлаған, фәһем алған, һығымталар яһаған. Был йыйындар өсөн ул кешеләрҙән бер тин дә аҡса алмаған. Иртән иһә был кеше ғаиләһен туйҙырырлыҡ аҡса эшләү өсөн баҙар майҙанына юлланған һәм битлек кейеп, төрлө тамашалар күрһәткән, ҡыҙыҡ-мыҙыҡтар һөйләгән.**

**Берҙән-бер көндө был аҡыл эйәһенең өйөнә бер бай килгән. Уның риүәйәттәрен тыңлап, тәрән уйға батып ултырған, тормош мәғәнәһе тураһында уйланған. Үҙенең йәшәү рәүешендә нимәләрҙелер үҙгәртергә кәрәклеге тураһында һығымта яһап, ҡайтып киткән. Ләкин бер нисә көндән ул да баяғы баҙар майҙанына һуғылған һәм майҙан уртаһында бер битлекле кешенең бар халыҡты ауыҙына ҡаратып һөйләгәненә ҡолаҡ һалған. Битлекле кешенең байҙарҙан әсе көлгән бер риүәйәт һөйләп торған сағы булған. Бай ҡаты асыуланып, халыҡты йырып майҙан уртаһына сыҡҡан да, битлекле кешене тортоп ебәргән. Кеше йығылып киткән, битлегенә бер ситкә осҡан. Бай уны таныған һәм:**

**- Был кеше оятһыҙ, ике йөҙлө! - тип ҡысҡырған. - Кистәрен ул аҡыл эйәһе булып ҡыланып, аҡыллы һүҙҙәр һөйләй, ә иртән әртискә әйләнеп, аҡса йыя. Уның ҡылығында аҡыл бармы?**

**Баҙар майҙанындағы халыҡ ризаһыҙлыҡ белдереп, геү килгән. Был хурлыҡлы ваҡиғанан һуң кеше ҡабат баҙар майҙанына аяҡ та баҫмаған. Кистәрен дә уның өйөнә килеүсе булмаған.**

**Бына берҙән-бер көндө ҡалаға көслө дауыл ябырылған һәм ҡаланың яртыһын ер менән тигеҙләгән. Баяғы бай ҙа зыян күргән. Хәҙер инде ул ярлыға әйләнгән. Аҡса эшләү юлдарын белмәгәс, хәйер һорарға мәжбүр булған.**

**Бер саҡ хәйер өмөт итеп алға һонол ултырған элекке байҙың ҡулына кемдер икмәк кисәге һалған. Хәйер һораусы рәхмәт уҡып, күҙҙәрен күтәреп ҡараһа, алдында теге аҡыл өләшеүсе кеше баҫып торғанын күргән.**

**- Мин бит һине баҙар майҙанында хурлыҡҡа ҡалдырғайным... - тигән бай гәйепле тоҫ менән.**

**- Кешене хурлыҡҡа ҡалдырыу уға хәйер биреүгә ҡарағанда ауырыраҡ шул, - тигән кеше. - Теге саҡта һин минең хәлемде аңлап, миңә хәйер бирһәң, мин баҙарҙа сығыш яһамаç, ә аҡыл таратып ҡына ултырыр инем. Ә һин гонаһлыға әйләнмәҫ һәм бөгөн шул гонаһың өсөн был яҙаға тарымаç инең..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 18 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 4292